ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

10-16 октябрь (карасай) 2025

№40 (1184)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуға хаҡы ирекле

*Арзанға яҙылып ҡалығыҙ!* ***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ, 1 октябрҙән 11-нә тиклемге ун көнлөктә республиканың һәр ҡалаһында-ауылында ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә 2026 йылдың беренсе яртыһы өсөн ташламалы хаҡ менән 905 һум 04 тингә яҙыла алаһығыҙ. Ошо ун көнлөктә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласаҡ икәнен дә онотмағыҙ. Әйҙәгеҙ!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ике йылдан әйләнеп ҡайтасаҡ**



2

**Тормошта үҙенде табырға теләһәң, халҡыңа, тыуған телеңә хеҙмәт ит!**



8-9

**Ҡурай көнө...**

**Йомабай Иҫәнбевтың тыуған көнө лә икән**



12

**"Кешегә байман табығыҙ!"**



13

ҺӨЙӨНСӨ!

# ЯҢЫ ИҪКЕ КҮПЕР

**Өфөгә ингән юлдағы Ағиҙел йылғаһы аша аркалы күперҙе 11 октябрҙә, Республика көнөндә, сафҡа индерәләр. 8 октябрҙә уның аша һынау маҡсатында автомобилдәр ебәрелде.**



Яңынан ҡоролған арка конструкцияһы тәүге вариантты ҡабатлай. Уның ике яғында ла күперҙе төҙөү һәм капиталь ремонтлау даталары яҙылған иҫтәлекле таҡтаташтар ҡуйыла. Техник яҡтан ҡатмарлы уникаль объектты аҙағынаса тормошҡа ашырғандан һуң ҡаланың Көньяҡ ҡапҡаһы аша Өфөгә инеү-сығыу өсөн 6 һыҙат буласаҡ. Көньяҡ йүнәлештәге транспорт ағымы тәүлегенә 164 мең автомобиль тәшкил итә. Был Өфө ярымутрауы территорияһына ингән машиналарҙың дөйөм һанынан 49 процент, тигән һүҙ.

Әйткәндәй, республикала бөтәһе 31 күпер ремонтлана. Йыл аҙағына тиклем уларҙың 12-һен файҙаланыуға тапшырырға ниәтләйҙәр. Улар араһында Хәйбулла районының Яңы Ергән ауылы янында Таналыҡ йылғаһы аша, Октябрьский - Урыҫһыу юлындағы Ыҡ йылғаһы аша күперҙәр бар. Архангел һәм Дөртөйлө районларында Ағиҙел аша, Дөртөйлө һәм Борай райондарында Танып йылғаһы аша, Дәүләкән - Талбазы юлындағы Дим аша, Урал - Мораҙым юлындағы Түрһәгәҙе йылғаһы аша, Ауырғазыла Үҙән аша күперҙәр әле төҙөкләндереү этабында. Стәрлетамаҡта Ағиҙел аша яңы күпер төҙөйҙәр. Ул авария хәлендә тип табылған иҫке күпер эргәһендә һалына.

БАЙРАМ АЙҠАНЛЫ

# БАШҠОРТОСТАН!

## Данлы ла, шанлы ла тарихың бар һинең!

**(Сәйәси эссе)**



Беҙ Башҡортостанда йәшәйбеҙ. Исеме яңғырауыҡлы ла, яғымлы ла, күңелдәргә яҡын да. Ҡәҙимге, ябай ғына бер өлкә түгел бит: Республика! "Res publika" тигән боронғо латин һүҙенән килеп сыҡҡан был атама йәмәғәт байлығын, уртаҡлыҡты, дөйөм эште лә аңлатҡан заманында. Ни эшләп шулай булмаһын ти: Көньяҡ Урал - иң әүәл аҫаба башҡорттоҡо ғына булһа ла, хәҙер инде бында йәшәгән халыҡтарҙың уртаҡ ере бит, һәм дә республикабыҙ йәшәһен, сәскә атһын өсөн барыһы ла ең һыҙғанып, уртаҡ, дөйөм эштәребеҙҙе башҡара.

Ер йөҙөндә дәүләттәр бихисап, республика тип аталғандары ла 140-тан ашыу. Республика тип аталғанбыҙ икән, тимәк, Башҡорт иле айырым дәүләткә тиңләнелгән. Әлбиттә, дәүләттәрҙең төрлөһө бар донъяла: ҡайһы берҙәрендә әлегә тиклем королдәре лә бар хатта ки. Королдәребеҙ булмаһа ла, башҡорт хандары булғаны билдәле тарихта. Хандар тигәс тә, һис бер саҡта ла үҙ халҡын ҡолға һанамаған улар: башҡорт борон-борондан яугир затлы булған, ә ҡораллы яугир бер ҡасан да ҡол хәленә төшмәй, сөнки ул иле-ере өсөн йәнен фиҙа ҡылырға әҙер булған азат инсан. Ә хандарын башҡорттар үҙҙәре һайлап ҡуйған, араларындағы иң аҫыл, аҡыллы, башҡалар менән идара итергә һәләтле кешене генә аҡ кейеҙҙә юғары күтәргәндәр.

Цивилизация кимәленә күтәрелгән бер генә йәмғиәт тә дәүләт ҡормай йәшәмәй. Тик беҙ дәүләт тигәнде бер төрлөрәк аңларға күнеккәнбеҙ: хакимдар, идара итеүселәр, яһаҡ-һалым йыйыусылар, ҡораллы һаҡсылар һәм яугирҙар, хөкөмдарҙар һәм башҡа шундай дәүләт кешеләренән башҡа дәүләтте күҙ алдына ла килтереп булмай. Ә боронғо башҡорттарҙың дәүләте ниндәйерәк булған икән?

**(Дауамы 4-5-се биттәрҙә).**

12+

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

✓ *Хәтеремдә, ул саҡтағы Рәсәй Президенты Борис Ельциндың: "Власты күпме йота алаһығыҙ, шунса алығыҙ... Ер аҫты байлыҡтарын, ерҙе лә халҡығыҙ милке итеп ҡабул итһәгеҙ, ул шулай буласаҡ", - тигән һүҙҙәр яңғыраны.*



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Республика көнө һинең өсөн ниндәй байрам ул?

*Әминә ЯХИНА, яҙыусы. Сибай ҡалаһы:* Был байрам 1990 йылдың 11 октябрендә Башҡорт ССР-ының дәүләт суверенитете тураһында декларация ҡабул итеүенә бәйле. Хәтеремдә, ул саҡтағы Рәсәй Президенты Борис Ельциндың Стәрлетамаҡ ҡалаһында уҙған митингыла Башҡортостан халҡына һәм төбәк власы даирәләренә әйткән мөрәжәғәтендә: "Власты күпме йота алаһығыҙ, шунса алығыҙ... Ер аҫты байлыҡтарын, ерҙе лә халҡығыҙ милке итеп ҡабул итһәгеҙ, ул шулай буласаҡ", - тигән һүҙҙәр яңғыраны. Халыҡ уға дәррәү ҡул сапты.

90-сы йылдарҙа башҡорт теле, мәҙәниәте йылдам үҫеш алды. Республикала юғары уҡыу йорттары асылды, мәктәптәр, балалар баҡсалары, мәҙәниәт йорттары төҙөлдө. Мин үҙем йәшәгән Сибай ҡалаһын алһаҡ, ул, ысынлап та, Урал аръяғының баш ҡалаһына әүерелде. Бында йәшәү, белем алыу, мәҙәни тормошта әүҙем ҡатнашыу өсөн бөтә шарттар ҙа бар. Әйтәйек, бала мәктәптә тамамланы икән, ул иҡтисадтың төрлө тармаҡтары өсөн урта звено белгестәре, шулай уҡ уҡытыусылар, шәфҡәт туташтары һәм фельдшерҙар, артистар әҙерләгән биш урта белем биреү йортонда, артабан Өфө фән һәм технологиялар университетының филиалы булған Сибай институтында уҡый ала. Суверенитет йылдарында ҡалала ике колледж һәм бер вуз асылды. Сибай филармонияһы, "Сулпан" балалар театры, башҡорт телендә сыҡҡан "Атайсал" гәзите һәм башҡа урындағы бихисап ҡаҙаныштарҙың башы нәҡ 1990 йылдың 11 октябрендә барып тоташа. Бәлки, шуға күрә лә Республика көнө байрамы халыҡ өсөн ҙур мәғәнәгә эйә.

Хәҙер ҙә һәр ауылда, һәр ҡалала байрам киң ҡолас менән үткәрелә, майҙандарҙа концерттар, төрлө бәйгеләр, йәрминкәләр ойоштоорола. Республика көнө - минең өсөн оло байрам, ул ошолай даими билдәләнергә тейеш.

Шулай ҙа тәүге йылдарҙағы байрам кәйефе онотолмай, ул саҡта халыҡ киләсәккә яҡты хыялдар менән йәшәне. Шул өмөттәрҙең барыһы ла үтәлмәүе күңелде ҡыра. Оптималләштереү тип, ауылдарҙа мәктәптәрҙең, дауаханаларҙың ябылыуы, башҡорт теле дәрестәренең кәмеүе, ир-егеттәребеҙҙең эш эҙләп сит яҡтарға китеүе бигерәк борсой беҙҙе. Нисек кенә булмаһын, тормош алға бара. Гәзит уҡыусыларҙы Республика көнө менән ҡотлайым!

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

## ИКЕ ЙЫЛДАН ӘЙЛӘНЕП ҠАЙТАСАҠ



**Өфөлә Салауат һәйкәленең өсҡө - һыбайлының кәүҙә өлөшөн - һаҡлыҡ менән генә кран ярҙамында ҡутарып алдылар. Бынан бер нисә көн алдараҡ реставраторҙар скульптураны өлөштәргә бүлеп алыуҙы тиҙләтте.**

Республикала Башҡортостандың төп символы - Салауат Юлаев һәйкәлен яңыртыу буйынса эштәр дауам итә. Ошо көндәрҙә белгестәр һәйкәлдең эленмәле өлөштәре - ҡылыс, ҡамсы һәм йүгәнде алдылар. Рәсәйҙән атҡаҙанған архитекторы, Рәсәй художество академияһы академигы Александр Мирианашвили һөйләүенсә, зыян килтермәҫ өсөн һәйкәл һынын алдан беркетелгән урындары буйынса айырып алдылар. Ошо көндәрҙә шул уҡ ысул менән ат һыны ла ике өлөшкә айырыласаҡ һәм ул да урынынан алынасаҡ.

БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Рөстәм Гәзизов әйтеүенсә, бөтөн эштәр ҙә ентекле эшләнгән техник документацияға ярашлы алып барыла, реставрация буйынса шулай уҡ бөтөн эштәр Рәсәй художество академияһы ҡарамағында башҡарыла. Бөтөн реставрацияла эштәре Өфөләге махсуслаштырылған цехта үткәреләсәк. Халыҡ батыры үҙ урынына 2027 йылда әйләнеп ҡайтасаҡ.

## АУЫЛ МЕДИЦИНАҺЫ...

**Хөкүмәттең аҙналыҡ кәңәшмәһендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ауыл фельдшерҙарына ҡарата тейешле мөнәсәбәт талап итте һәм яңы һигеҙ фельдшер-акушерлыҡ пунктын асыуға старт бирҙе. "Республикала ауыл ерендә медицина хеҙмәтенең ролен һәм уның әһәмиәтен барыһы ла аңлай, -тип һыҙыҡ өҫтөнә алды етәксе. - Әлбиттә, күп итеп ФАП-тар төҙөргә була, әммә ауырыуҙар менән көрәштең алғы һыҙығында һеҙ, фельдшерҙар булмаһағыҙ, бының бер мәғәнәһе лә юҡ".**

Республикала ике меңдән ашыу фельдшер-акушерлыҡ пункты эшләй һәм уларҙың һәр өсөнсөһө яңыртылған, тип хәбәр итте төбәк етәксеһе. "Алда эш күп әле. Элек ФАП-тарҙың ниндәй хәлдә булыуын иҫегеҙгә төшөрөгөҙ. Үткән, хатта унан алдағы быуаттарҙа һалынған биналар утын яғып йылытылды, йылы һыу ҙа булманы. Әлбиттә, фельдшерҙарҙың үҙҙәрен дә ҡәҙерләргә кәрәк, араларында өлкән йәштәгеләр ҙә байтаҡ бит", - тине был турала Радий Хәбиров.

Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин билдәләүенсә, республика ФАП-тар һаны буйынса Рәсәйҙә алдынғы урында тора. Ауыл халҡын 2 071 фельдшер-акушер пункты хеҙмәтләндерә. Бер нисә йыл элек кенә уларҙың 30 проценттан ашыуы авария хәлендә булған. 2019 йылдан алып 608 модулле ФАП ҡороп ултыртылған. 2023 йылдан төбәктә "Һаулы ФАП" проекты гәмәлгә ашырыла. Ул медицина ярҙамы һәм дарыуҙар менән тәьмин итеү мөмкинлеген яҡшырта, профилактик медицина тикшереүе үтеү һәм электрон медицина хеҙмәттәре алыу мөмкинлеген бирә. Бөгөнгө көндә фельдшер-акушерлыҡ пункттары 99 процентҡа кадрҙар менән тәьмин ителгән. Һуңғы алты йылда "Ауыл фельдшеры" программаһы буйынса дөйөм суммаһы 140 миллион һумлыҡ 280 фельдшер (акушер) түләү алған.

## ЙӨРӘГЕҢ ИМЕНМЕ?

**Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Игорь Комаров һәм Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика кардиология үҙәгенең хирургия корпусында булды.**

Дөйөм майҙаны яҡынса 32 мең квадрат метрлыҡ күп ҡатлы бина 2019 йылдың июлендә төҙөлә башлағайны. Бында диагностика кабинеттары менән ҡабул итеү бүлеге, поликлиника, реанимация менән 10 операция блогы, рентгено-хирургия һәм кардиохирургия бүлексәләре, стерилләштереү комплексы, административ блок һәм дарыухана-бүлеү пункты урынлашҡан. Объекттың хаҡы 10,7 миллиард һум тәшкил иткән, аҡса Башҡортостан бюджетынан бүленгән.

Кардиология үҙәгенең баш табибы Ирина Николаева әйтеүенсә, республикала белгестәр йыл һайын 100 меңгә яҡын кешегә консультация бирә, стационарҙа 14 мең пациент дауалана. Табиптар алты мең асыҡ операция, шулай уҡ ҡан тамырҙарына дүрт мең операция яһай. Яңы ҡорамалдар Өфөлә гибридлы операциялар яһарға һәм яңы ысулдар индерергә мөмкинлек бирәсәк. Мәҫәлән, лазер технологиялары ярҙамында аортаға ҡатмарлы операциялар эшләргә. Ә яңы корпуста асылған рентгеногибридлы операция бүлмәһе республикала берәү генә. "Радий Фәрит улы республика етәксеһе итеп тәғәйенләнгәс тә үҙәк төҙөлөшөн башлау бурысы йөкмәтте. Бында ҡулланылған ҡорамалдарҙың, технологияларҙың кимәле хайран ҡалдыра. Артабан да уңыштар теләйем", - тип яуапланы Президенттың Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле журналистарҙың һорауҙарына.

Башҡортостанстат мәғлүмәттәре буйынса, һуңғы 10 йылда төбәктә ҡан әйләнеше системаһы ауырыуҙарынан үлем күрһәткесе 22 процентҡа кәмегән. 2015-2024 йылдарҙа йөрәктең ишемия ауырыуынан үлем күрһәткесе - 31 процентҡа, миокард инфарктынан иһә 26 процентҡа түбәнәйгән.

## ЯҺАЛМА ҠАРШЫЛЫҠТАРҒА...

**Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаттары пленар ултырышта торлаҡ законына МХО-ла ҡатнашыусыларҙың ғаиләләренең торлаҡ шарттарына ҡағылышлы төҙәтмәләр ҡабул итте. Закон проекты хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең ғаиләләренә торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға ҡамасаулаған административ ҡаршылыкты бөтөрөүгә йүнәлтелгән.**

"Беҙ ҡайһы бер осраҡтарҙа торлаҡ шарттарын яҡшыртыу хоҡуғынан файҙаланыуға ҡамасаулаған административ ҡаршылыкты бөтөрөргә теләйбеҙ. Хәрби хеҙмәткәрҙәргә түләүҙәрҙең төрҙәре ғаиләнең йән башына уртаса килемен сығарғанда иҫәпкә алына. Шуға күрә социаль ҡуртым килешеүе буйынса торлаҡ алырға хоҡуҡлы аҙ тәьмин ителгән ғаиләләр аҙ тәьмин ителгән тип иҫәпләнмәй һәм бындай мөмкинлектән мәхрүм ителә. Закон проекты ғаиләнең матди статусын билдәләгәндә иҫәпкә алынмаған килемдәр исемлеген билдәләргә тәҡдим итә", - тип аңлатма бирҙе Республика парламенты спикеры Константин Толкачев.

Төҙәтмәләр проектына ярашлы, ғаиләнең тәьмин ителеш кимәлен баһалағанда МХО-ла ҡатнашыусылар алған килемдең айырым төрҙәре иҫәпкә алынмай. Әйтәйек, хәрби хәрәкәттәрҙә ҡатнашыуға бәйле түләүҙәр, дәүләт наградалары (шул иҫәптән Батырлыҡ ордены) һәм дәүләт ойошмаларынан, шәхси фондтарҙан матди ярҙам. Закон проектын көҙгө сессия осоронда тулыһынса ҡабул итеү көтөлә.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Төбәк етәксеһе Радий Хәбиров етәкселегендәге Башҡортостан делегацияһы эш сәфәре менән Тажикстан Республикаһында булды. Программала бер нисә эшлекле осрашыу, шулай уҡ сәнәғәт һәм социаль объекттарҙы барып ҡарау планлаштырылған. "Тажикстанда дәүләт башлығы Владимир Владимирович Путин етәкләгән Рәсәйҙең рәсми делегацияһы составында эшләйем. Көн тәртибендәге сараларҙың береһе булып Рәсәй -Тажикстан индустриаль паркын булдырыу буйынса инвестиция килешеүенә ҡул ҡуйыу тора. Дөйөм алғанда, республика өсөн тышҡы иҡтисади хеҙмәттәшлек йүнәлешендә яңы ишектәр аса башлайбыҙ", - тип билдәләне Радий Хәбиров, сәфәрҙең маҡсаты тураһында.

✓ Республика етәксеһе бер нисә айҙан Кузнецов затонында Волга буйы федераль округындағы 2200 урынлыҡ иң ҙур мәктәп файҙаланыуға тапшырыласағы тураһында хәбәр итте. Пугачев урамын төҙөкләндереү бара, эштәрҙең бер өлөшө тамамланған, тине Радий Хәбиров. Пугачев урамында (Дуҫлыҡ монументынан Геофизиктар урамына тиклемге участкала) дүрт һыҙат буйынса хәрәкәтте йыл аҙағына тиклем асыу планлаштырыла.

✓ Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республиканың оператив штабы ултырышын үткәрҙе. Көс структуралары, министрлыҡтар һәм ведомстволар, сәнәғәт предприятиелары етәкселәре нефть эшкәртеү объекттарын БПЛА һөжүмдәренән һаҡлау буйынса өҫтәмә сараларҙы тикшерҙе. "Яғыулыҡ-энергетика комплексы предприятиелары етәкселәре менән тығыҙ бәйләнештәбеҙ. Террорҙан әүҙем һаҡланыу сараларын артабан көсәйтеү өҫтөндә эшләйбеҙ", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

✓ "Рейдтарҙы көсәйтергә" - Башҡортостан Башлығы юлдарҙа күҙәтеү сараларын ентекләрәк ойоштороу маҡсатын ҡуйҙы. Ныҡлы контроль, аңлатыу эштәре алып барыу юлдағы фажиғәле осраҡтарҙы кәметергә тейеш. Быға тиклем юл фажиғәләре ҡорбандары һаны кәмей килә ине. Ағымдағы йыл башынан алып Башҡортостан юлдарында 315 кеше һәләк булған. Былтырғы йылдың ошо уҡ осоро менән сағыштырғанда был 12 кешегә күберәк.

✓ Республика Хөкүмәтенең аҙналыҡ кәңәшмәһендә Премьер - министр урынбаҫары - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов белдереүенсә, республикала бөтә майҙандарҙың 1 миллион 543 мең гектарҙан ашыуы йәки 74 проценты йыйып алынған. Иген һәм ҡуҙаҡлы культураларын йыйыу буйынса эштәр тамамланыу өҫтөндә. Тулайым төшөм 3 млн 650 мең тонна тәшкил итә, уртаса гектар ҡеүәте - 27,4 центнер. Былтыр был күрһәткес гектарынан 21,7 центнер булған, ә иген һуғыуҙың дөйөм күләме 3,2 миллион тонна тәшкил иткән. Әлеге ваҡытта дүрт районда иген йыйыу тамамланған, 39 районында баҫыуҙарҙың - 90 проценттан ашыуы, туғыҙ районда 70 проценттан ашыуы йыйып алынған.

✓ *Ике дәүләт телендә Республика көнө менән ҡотлау һүҙҙәре яҙылған стеланы шулай уҡ милли орнамент һәм Өфөнөң "өс шөрәп" рәүешендәге стилләштерелгән атамаһы биҙәй.*



ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ!



# БАЙРАМ БЕҘҘӘ, БАЙРАМ!

**11 октябрҙә Башҡортостанда Республика көнө билдәләнә. 1990 йылда нәҡ ошо көндә республиканың Юғары Советы Дәүләт суверенитеты тураһында декларация иғлан итте.**

Рәсми байрам саралары быйыл да Дуҫлыҡ монументына сәскәләр һалыуҙан башлана. Шулай уҡ Совет майҙанында уҡыусыларҙы "шаймораторсылар" сафына алыу тантанаһы үтә.

Был көндә Сергей Аксаков исемендәге мәҙәниәт һәм ял баҡсаһында - "Сәскә ат, тыуған Башҡортостаным!", "Дим" паркында - "Минең Республикам - минең шатлығым", "Беренсе май" паркында - "Сәскә ат, Республикам!", "Тулҡын" паркында - "Республикамды яратам!", "Ҡашҡаҙан" паркында - "Был ерҙе мин, үҙемдеке, тием", Серго Орджоникидзе исемендәге майҙанда һәм Иван Якутов исемендәге паркта "Башҡортостан - минең бишегем" тип аталған байрам саралары ҡаралған.

"Өфө тарихы" музейына "Өфө - Башҡортостан Республикаһының баш ҡалаһы", "Башҡортостандың ер аҫты байлыҡтары" тигән темаларға лекциялар тыңларға, һуңынан республика тарихы буйынса викторина һорауҙарына яуап биреп, үҙ белемеңдә һынап ҡарарға саҡыралар.

Бынан тыш, байрам алдынан Өфөлә йыйылыштар, тематик лекциялар, күргәҙмәләр, конкурстар, кино сеанстары уҙғарыла. Шулай уҡ ял көндәрендә ауыл хужалығы йәрминкәләре ойоштороласаҡ.

Тантаналы сараларға әҙерләнеү һәм уларҙы үткәреү менән бәйле Өфө үҙгәгендә автотранспорт хәрәкәтен сикләү планлаштырыла, тип асыҡлык индерҙеләр мэрияла.

Әйткәндәй, Өфө ҡала округы хакимиәтенән хәбәр итеүҙәренсә, Башҡортостан Башлығы күрһәтмәһе буйынса баш ҡаланың Генерал Рыленко һәм Пугачев урамдары киҫелешендә стела урынлаштырылды. Ике дәүләт телендә Республика көнө менән ҡотлау һүҙҙәре яҙылған стеланы шулай уҡ милли орнамент һәм Өфөнөң "өс шөрәп" рәүешендәге стилләштерелгән атамаһы биҙәй.

# АҒИҘЕЛ БУЙЫНДА

**Өфөлә Ағиҙел буйында спорт майҙансығы барлыҡҡа киләсәк. Күп функциялы спорт майҙансығы "Рәсәй өсөн 100 спорт майҙансығы" проекты сиктәрендә төҙөлә.**

Өфө мэры Ратмир Мәүлиев үҙенең телеграм-каналында һөйләүенсә, спорт кластеры футбол һәм баскетбол, воркаут, өҫтәл теннисы өсөн уйын зоналары, балалар комплексы менән йыһазландырыла, шулай уҡ унда юлдар, эскәмйәләр һәм велопарковка буласаҡ. Кластерҙа тағы ла ГТО комплексы нормативтарын үтәү өсөн майҙансыҡ та ҡаралған. Асыҡ һауалағы спорт комплексында бер юлы 180-гә тиклем кеше шөғөлләнә ала. Ҡала башлығы спорт майҙансығының өфөләрҙең ғаилә һәм дуҫтар менән бергәләп ял итеү, үҙаллы күнекмәләр үткәреү өсөн яраткан урыны булып китеүенә өмөт белдерҙе. Майҙансыҡ ҡабул ителгәндән һуң унда ГТО нормативтарын үтәүгә әҙерлек буйынса инструктор менән асыҡ күнекмә һәм оҫталыҡ дәрестәре үткәреләсәк.

Әйткәндәй, Өфө хакимиәте ҡала халҡынан Киров районында Ағиҙел йылғаһы буйында урынлашҡан майҙанға исем биреү тураһында үҙ фекерен белдереүҙәрен һорай. Тауышты gorodufa.ru сайтында бирергә мөмкин. Тәҡдим ителгән варианттар араһында: "Троицк майҙаны", "Халыҡтар дуҫлығы майҙаны", "Иван Нагой майҙаны", "Ағиҙел майҙаны", "Хеҙмәт батырлығы һәм даны майҙаны", "Тыныслыҡ һәм дуҫлыҡ майҙаны", "Дуҫлыҡ һәм ҡаһарманлыҡ майҙаны", "Өфө колоннаһы майҙаны", "Аҡ пристань майҙаны" һәм "Беренсе ҡала майҙаны" исемдәре бар. Тауыш биреү Өфө хакимиәтенең һорау алыу майҙансығында ойошторолған һәм 13 октябрҙә тамамлана. Ҡатнашыу өсөн авторизация талап ителә.

# ШӘП ТЕМА!



**Өфөнән тарих уҡытыусыһы Юлиә Садиҡова - "Шәп тема!" телевизион проектының 4-се миҙгелендә ете финалсы иҫәбенә инде.**

Ете финалсы биология, рус теле һәм әҙәбиәте, физика, математика, химия, география, тарих фәндәрен уҡытҡан 35 педагог араһынан тауыш биреү юлы менән һайлап алынды. Юлиә Садиҡова финалға сыҡһын өсөн 50 меңдән ашыу яҡташыбыҙ, шул иҫәптән уның коллегалары тауыш биргән, тип хәбәр итте Башҡортостандың мәғариф министры Илдар Мәүлитбирҙин. Ул Башҡортостан вәкиленә ярҙам итҡәндәрҙең барыһына ла рәхмәт әйтте һәм уҡытыусыға финалда уңыштар теләне. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, ярымфиналда Юлиә Садиҡова жюриҙы сағыу видеовизитка менән таныштырҙы, унда популяр заманса йыр аша Шүлгәнташ мәмерйәһенең бай тарихы һәм үҙенсәлекле тәбиғәте, "Урал батыр" эпосы хаҡында һөйләне.

"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**Ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулаған, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапҡан бик күп арҙаҡлы шәхестәребеҙ бар. Бөгөн балалар, йәштәр улар хаҡында бигүк хәбәрҙар түгел. Башҡорт мәктәбендә фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһендәр әйҙә.**

## ҒАЙСИН ХӘСӘН НӘЗИР УЛЫ

Ул - Бөйөк Ватан һуғышы яугиры. Уҡсылар полкының пулемёт расчёты командиры, сержант. Советтар Союзы Геройы. Ырымбур губернаһы Ырымбур өйәҙенең Ҡарай ауылында (хәҙерге Көйөргәҙе районына инә) 1908 йылдың 8 майында тыуған. 1942 йылдың 7 ғинуарында Ҡыҙыл Армия сафтарына саҡырыла. Шул уҡ йылдың 20 июленән фронтта, сержант дәрәжәһендә 51-се армияның 204-се уҡсылар дивизияһында 700-сө уҡсылар полкының пулемёт расчёты командиры була. Воронеж, Калинин, 1-се Балтик буйы һәм 3-сө Белорус фронттарында барған алыштарҙа ҡатнаша.

1943 йылдың февралендә Воронеж фронтында Үрге Михайловка ауылы өсөн барған һуғышта ул үҙенең пулемёты менән дошмандың батальонға яҡын көсөн юҡ итә һәм фашистарҙың барлыҡ контратакаларын кире ҡаға. 1944 йылдың 1 майынан 2-һенә ҡарай төндә Витебск өлкәһе Степаньков ауылы янында, һөжүмгә күскән фашистарҙың флангыһына сығып, пулемёт уты менән дошманды ҙур юғалтыуҙарға дусар итә, командованиеның наградлау ҡағыҙында "Иптәш Ғайсин 13 дошман һалдатын юҡ итте", тип теркәп ҡуйылған. Уның 1944 йылдың июнендә Витебск янында күрһәткән ҡаһарманлығы "Батырлыҡ өсөн" миҙалы менән билдәләнә. 1944 йылдың 24 июнендә, һөжүм итеүсе пехотаға ярҙам итеп, танк пулемёты уты менән 40 немец һалдатын һәм офицерын сафтан сығара. Был алышта күрһәткән батырлығы өсөн III дәрәжә Дан орденына лайыҡ була.

1944 йылдың июль һәм августында Литваның Скопишкис һәм Расчунай ауылдары янында пулемёт уты менән дошмандың контратакаһын туктата, ике алыш барышында дошмандың 90-ға яҡын һалдатын һәм офицерын сафтан сығара. 6 августа Подскрапишка ауылы (Литва) янында ҡамауҙа ҡалған 357-се уҡсылар дивизияһына ярҙамға барған танк десантында ҡатнаша. Операция барышында танк броняһындағы десант төркөмөн етәкләй, дошмандың ике 75-се калибрлы орудиеһын ҡулға төшөрә һәм, уларҙы дошман яғына бороп, 25 снаряд менән бик күп немец һалдатын һәм офицерын ҡырып һала. Шул уҡ көндә автомат уты менән бер үҙе һигеҙ дошман һалдатын юҡ итә. 1945 йылдың 24 мартында СССР Юғары Советы Президиумы Указы менән Хәсән Нәзир улы Ғайсинға Советтар Союзы Геройы исеме бирелә.

Бөйөк Ватан һуғышы тамамланғандан һуң1968 йылға тиклем Күмертау районының В. И. Молотов исемендәге колхозында һәм Мораптал тоҡомсолоҡ совхозында эшләй. 1991 йылдың 12 августында тыуған ауылы Ҡарайҙа ҡаты ауырыуҙан һуң вафат була. Х.Н. Ғайсинға тыуған ауылында, шулай уҡ Көйөргәҙе районы үҙәге Ермолаево ауылындағы Батырҙар скверында һәйкәл ҡуйылған.

## Н И М Ә ?   Ҡ А Й Ҙ А ?   Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров эш сәфәре менән Татарстанда булды. "Күршеләребеҙҙең "Алабуға" айырым иҡтисади зонаһының инфраструктураһы һәм эшмәкәрлеге менән таныштым. Бында алдынғы производство һәм белем биреү учреждениелары тупланған, улар Рәсәйҙең инновация потенциалында мөһим роль уйнай. Проекттар күләмле һәм сифатлы үтәлеше менән ҙур тәьҫораттар ҡалдырҙы", - тип яҙҙы республика Хөкүмәте рәйесе үҙенең социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

✓Быйыл 44 мәҙәниәт хеҙмәткәре бер тапҡыр бирелә торған 1 миллион һум аҡсалата ярҙам ала. Был түләүҙәргә федераль бюджеттан 38 миллион һумдан ашыу сумма бүленгән. Башҡортостан "Ауыл мәҙәниәт хеҙмәткәре" программаһын 2021 йылдан тормошҡа ашыра башлаған Рәсәйҙең тәүге төбәк булды. Уның ярҙамында 150 профилле белгес үҙҙәренең торлаҡ шарттарын яҡшырта алды. Тәүге дүрт йылда бының өсөн дөйөм алғанда 105 миллион һум бүленгән. Ә 2025 йылдан программа федераль кимәлгә күтәрелде. Әле киләһе 2026 йылға ғаризалар ҡабул ителә. Квотаны 59 белгескә тиклем арттырыу ҡарала.

✓2024 йыл өсөн мөлкәт һалымдарын һәм НДФЛ түләү кампанияһы бара. Был мөһим эште 2025 йылдың 1 декабренә тиклем тамамлап ҡуйырға кәрәк. Иҫәпләүҙәр буйынса, һалымдың был төрҙәренән төбәктең тупланма бюджетына 8 миллиард һумдан ашыу аҡса инергә тейеш. Федераль һалым хеҙмәтенең республика буйынса идаралығы етәксеһе Андрей Агапов хәбәр итеүенсә, 1 октябргә ҡарата төбәк ҡаҙнаһына 705 миллион һум түләү ингән.

✓18 октябрҙә Республика колледждарында берҙәм асыҡ ишектәр көнө уҙғарыла. Был көндә 8-11 класс уҡыусылары талап ителгән эшсе һөнәрҙәр менән таныша, колледж һәм техникум студенттарының ниндәй программалар буйынса уҡыуы тураһында белә ала. "Студенттарҙы һөнәри йүнәлеш биреү процесына туранан-тура йәлеп итеү айырыуса мөһим. Ул уҡыусылар менән ышаныслы диалог булдырырға ярҙам итә. Предприятиеларға экскурсияларҙы һәм һөнәр менән яҡындан танышыуҙы үҙ эсенә алған практик йүнәлешле формат йәштәр өсөн һөнәр һайлағанда үтә лә мөһим", - ти БР мәғариф министры Илдар Мәүлетбирҙин.

✓Мәләүез районынан ММА көрәшсеһе Вадим Әхмәҙуллин ҡул һуғышы буйынса донъя беренселегенең ике тапҡыр призеры булды. Район хакимиәтенән хәбәр итеүҙәренсә, ике аҙна эсендә спортсы ике турнирҙа яҡшы һөҙөмтәләр күрһәткән. "Мәләүез студенты Вадим Әхмәҙуллин Башҡортостанда ММА үҫеше тарихына инде, республикабыҙҙан ҡатнаш көрәш буйынса донъя беренселеге призеры булды. Сентябрҙең ике аҙнаһында ул Санкт-Петербургта һәм Аҡтауҙа үткән донъя ярыштарында пъедесталға күтәрелде", - тиелә рәсми хәбәрҙә.

***✓ Башҡорт иле тип аталғас, ул берҙәм территорияны, үҙенсәлекле бер дәүләтте аңлатыуы билдәле. Тимәк, ил сиктәрендә һаҡсылар торған, уларҙың дәүләт башлыҡтарына буйһоноуы хаҡында ла фараз итергә була.***



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? Республика көнө һинең өсөн ниндәй байрам ул?

***Гөлдәр Абдуллина, мәғариф ветараны. Баймаҡ районы:*** Республика көнө - минең өсөн ҙур, мөһим байрам ул. Башҡортостан бик күп милләт вәкилдәре өсөн тоторо҇ҡло тыныс йәшәү урыны булып тора. Ә төп милләт, башҡорттар өсөн ул - тарихы яҙылған тыуған төйәк, данлы үткәне, бөгөнгөһө һәм яҡты киләсәге.

Мин үҙем Баймаҡ районының Ишбирҙе һәм Йомаш урта мәктәптәрендә уҡыттым. Әле хаҡлы ялдамын. Эшләгән осорҙа Республика көнө саралары планы, алдан раҫланып, ҙур байрам итеп үткәрелер ине. Ошо рәүешле йылдар дауамында бай традиция тупланды. Бөтә коллектив менән алдан әҙерлек эштәре башлайбыҙ, төрлө ижади конкурстар иғлан итәбеҙ. Байрамды ауыл хакимиәте менән берлектә үткәрә инек. Йәрминкәлә, спорт сараларында уҡыусылар, атай-әсәйҙәр, ауыл халҡы бик әүҙем ҡатнашты. Балаларҙың барлыҡ ижади эштәренә: һүрәттәренә, иншаларына, шиғырҙарына, ҡул эштәре күргәҙмәһенә йомғаҡ яһап, бүләктәр тапшырыла. Тантаналы сараларыбыҙҙа дәүләтебеҙҙең символикаһын, атрибуттарын ҡулланабыҙ. Милләтебеҙ ғорурлығы булған шәхестәребеҙҙе, батырҙарыбыҙҙы иҫләйбеҙ. Һәр иҫтәлекле байрамдағы кеүек, Республика көнөндә лә Дан орденының тулы кавалеры Әҙеһәм Әлибаевтның бюсына веноктар һалына. Йомаш мәктәпәбенән бик күп данлыҡлы шәхестәр сыҡҡан. Араларында РФ Дәүләт Думаһы депутаты, өс фән докторы, ун ике фән кандидаты, ике яҙыусы, ике мәҙәниәт эшмәкәре һәм башҡалар бар. Яңы мәктәпте иҡтисад фәндәре докторы, хәҙер инде арабыҙҙан киткән Хәлил Әбүбәкер улы Барлыбаев һалдырҙы, Президентыбыҙ Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов асты - бына был, ысынлап та, Республикабыҙ суверенитеты емеше!

Тик һуңғы йылдарҙа, илебеҙҙәге демографик хәлдең насар булыуы арҡаһында, мәктәбебеҙҙә башланғыс класс уҡыусылары кәмей. Әлбиттә, өмөт менән йәшәйбеҙ. Алдағы йылдарҙа балалар һаны артһа, мәктәбебеҙ үҙ асылына ҡайтыр, тип ышанабыҙ.

Һуңғы ике йылда Ҡаҙағстандың Алматы ҡалаһында етешәр ай йәшәнем (ҡышланым). Быйыл февраль айынан "Ҡурай" башҡорт ижтимағи үҙәгендә башҡорт теле дәрестәре алып барҙым. Ҡаҙағстандағы милләттәштәребеҙ ҙә Башҡортостан Республикаһын ярата, тарихи Ватаныбыҙ, тип ғорурлана, беҙҙә барған яңылыҡтар менән даими ҡыҙыҡһынып, танышып бара. Дәрестәрҙәрҙә республикабыҙ, шәхестәребеҙ, тарихыбыҙ, мәҙәниәтебеҙ, телебеҙ тураһында әңгәмәләр ҡорҙоҡ. Халыҡ-ара Башҡорт теле диктантында ла ҡатнаштыҡ. Ҡаҙағстандың "Халыҡтар дуҫлығы ассамблеяһы"ның 30 йыллығы сараларында сығыш яһаныҡ.

Республика көнө алдынан күп милләтле төбәгебеҙ халҡына именлек, берҙәмлек, татыулыҡ, рухи ныҡлыҡ, тыныс тормош теләйем. Тыуған Башҡортостаныбыҙ сәскә атһын!

БАЙРАМ АЙҠАНЛЫ

# БАШҠОРТОСТАН!

## Данлы ла, шанлы ла тарихың бар һинең!

**(Сәйәси эссе)**



**(Башы 1-се биттә).**

Иң элгәре 922 йылда көньяҡ Башҡортостан далалары аша Булғар ханлығына үтеп барышлай урындағы башҡорттар тормошо хаҡында бик тә ҡыҙыҡлы мәғлүмәт теркәп ҡалдырған ғәрәп илселеге сәркәтибе Ибн Фаҙлан иҫкә төшә. Унының яҙмаларында дәүләт һүҙе юҡ. Әммә ул Башҡорт иле тураһында яҙа. Әле Яйыҡ йылғаһына килеп етмәҫтән күпкә алдараҡ ғәрәп каруаны етәкселәрен: "Йылға аръяғында башҡорттар йәшәй, улар сит-яттарҙы үҙ ерҙәренә һис ҡасан рөхсәтһеҙ индермәй, үлтереп ташлауҙары бик мөмкин", - тип ҡәтғи итеп иҫкәртеп ҡуялар. Шуға ла Фаҙлан башҡорттарҙан ныҡ ҡурҡыуҙары хаҡында яҙып ҡалдырған. Әлбиттә, ул заман башҡорттары ул тиклем үк яуыздарҙан булмағандыр. Ә әлеге ҡурҡытыу тураһында бына нимә тип әйтергә булалыр: ***Башҡорт иле тип аталғас, ул берҙәм территорияны, үҙенсәлекле бер дәүләтте аңлатыуы билдәле. Тимәк, ил сиктәрендә һаҡсылар торған, уларҙың дәүләт башлыҡтарына буйһоноуы хаҡында ла фараз итергә була. Ҡурҡытыу алымына килгәндә, уны үҙенә күрә бер халыҡ-ара дипломатик феномен, тип ҡарарға ерлек бар: ул замандарҙа илйортҡа һөжүм итеп, халыҡты талап, ҡоллоҡҡа алып китеп, һатып ебәреүсе юлбаҫарҙар аҙ булмағандыр. Башҡорттарҙан ҡурҡҡас, уларҙың еренә баҫып инергә баҙнат итеүселәр аҙ булғандыр, тип уйлайым.***

Башҡорт дәүләтселегә тигәс, XII быуатта йәшәгән күренекле ғәрәп географы әл Иҙрисине лә иҫкә алмайынса булмай. Ул иң тәүләп тарих биттәренә ул дәүерҙә киң билдәле булған башҡорт ҡалалары тураһында бик ентекле мәғлүмәттәр теркәп ҡалдырған. Унның билдәләүенсә, башҡорттарҙың бер нисә билдәле ҡалалары булғас, улар менән етәкселек итеүселәрҙең булмауы мөмкин түгел. Ауылдарҙа, далаурмандарҙа йәшәүсе башҡорт кешеләренә етәксе-юлбашсылар, башлыса, дошман илгә баҫып ингән мәлдәрҙә ғәскәр туплау, һуғыш хәрәкәттәрен алып барыу өсөн кәрәк булһа, ҡала башҡорттары өсөн һәр даим идарасылар кәрәк булып тора. Сит илдәрҙән ҡалаларға сауҙагәрҙәр килә, шулай уҡ төрлө сәйәси мәсьәләләр менән килеүсе илселәр ҙә була бит. Әл Иҙриси тап ошо фаҡтҡа иғтибар иткән дә инде. Ҡоро һүҙ булмаһын тиһәк, әл Иҙриси әҫәренән бер өҙөктө уҡыусыларыбыҙ иғтибарына тәҡдим итәйек.

"Нәмджан ҡалаһы - ҙур булмаған сәскә атыусы ҡаласыҡ. ***Уның менән төркиҙәрҙән булған бер кеше идара итә. Уларҙа власты атанан улға тапшырыу ғәҙәте игелекле эштәре һәм ябай халыҡҡа, арҙаҡлы заттарға яҡшы мөнәсәбәтле булыуҙары арҡаһында өҙөлмәй килә.*** Был ҡала Суҡан тип аталған йылға буйында урынлашҡан. Был ҡаланан көнсығышта Арджика тауында баҡыр рудниктары бар, унда мендән ашыу кеше эшләй. Унда баҡыр күп табылып, Хуваразм (Хорезм. - **Ред.**) еренә, Шаш (Ташкент. - **Ред.**) иленә һәм гуз иленең яҡын өлкәләренә алып барыла. Был ҡаланан шулай уҡ төлкө һәм әл бабр (ҡондоҙ. - **Ред.**) тигән йәнлек тиреләре сығарыла, улар йылға буйлап Хазар диңгеҙенә тиклем алып барылып, бында һәм Дайламала юғары хаҡҡа һатыла. Был ҡалала балсыҡтан төрлө нәмәләр, шул иҫәптән юғары сифатлы һәм тиҙ ватылмай торған көршәктәр яһала. Был йылғаның ярҙарында төрлө төҫтәге ҡиммәтле таштар осрай, улар араһында лазурит күп. Был йылғалағы балыҡтарҙың сорттары һәм йыландарҙың төрҙәре шул тиклем күп, хатта уларҙы һөйләп тә, һанап та бөтөрлөк түгел. Нәмджан ҡалаһы кешеләре үҙҙәре өсөн төп аҙыҡ булған балыҡты бик ҙур таһыллыҡ һәм сослоҡ менән тота. Тотолған балыҡтың күберәк өлөшөн, һаҡлау өсөн тәмләткестәр һибеп, тоҙлап, караптарға тейәп, Хазар диңгеҙенә алып төшәләр, яр буйлап Исил ҡалаһына һәм башҡа урындарға тиклем барып етеп, һатыу итәләр, йәиһә үҙҙәре теләгәнсә тотоналар.

Нәмджан ҡалаһынан Гүрханға тиклем һигеҙ көсем ер. Был Аскутийа ере төркиҙәренең күп халыҡлы ҙур ҡалаһы. Ул Табаристан (Каспий. - **Ред.**) диңгеҙенә ҡойған Исил (Иҙел, йәки Волга. - **Ред.**) йылғаһынан төньяҡ тарафта урынлашҡан. Ҡала яҡшы төҙөкләндерелгән, тирә-яғы эшкәртелгән, бында ҡайһы саҡта күрһәтелгән йылға буйлап, сауҙагәрҙәр һәм сәйәхәтселәр килеп йөрөй. ***Бында Аскутийа төркиҙәре хакимы йәшәй, уның ҡарамағында күп һанлы яугирҙар, ҡорамал һәм ҡоралдар, күп ҡәлғәләр, эшкәртелгән ерҙәр бар.*** Был илдә һөнәрселек тауарҙары һәм сәнғәт әйберҙәренән тик көнкүреш өсөн кәрәклеләрен генә эшләмәйҙәр, шулай уҡ улар яһаған эйәр һәм ҡоралдар шул тиклем күркәм һәм камил - бындайҙар төркиҙәрҙең башҡа бер илендә лә етештерелмәй".

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ 2022-2025 йылдарҙа республиканың баҡса ширҡәттәренә 751 миллион һум ярҙам бүленгән. Уларҙың 297-һендә бюджет аҡсаһына юлдар рәтләнгән, 63 ширҡәттә яңы электр счётчиктары ҡуйылған. 218 баҡса, торлаҡ инфраструктураһын яңыртҡандан һуң, дәүләттән компенсация алған. Шулай уҡ баҡсасылар янғын иҫкәртеү ҡоролмалары менән тәьмин ителә, һөҙөмтәлә быйыл янғындар һаны 45 процентҡа кәмегән. Рәсәй Президенты ҡарарына ярашлы, баҡсаларға газ үткәреү дауам итә. 3 мендән ашыу килешеү төҙөлгән дә инде. 754 баҡса участкаһына газ торбалары һуҙғандар.

✓ Төбәктә уҙған тәүлектә коронавирус инфекцияһы менән сирләүҙең 111 осрағы асыҡланды, тип хәбәр итте Хөкүмәттең аҙналыҡ оператив кәңәшмәһендә республиканың һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин. Әлеге ваҡытта стационарҙарҙа ковидтан - 128, амбулатор шарттарҙа 737 кеше дауалана. Шул уҡ ваҡытта буш карауаттар фонды 29 процент тәшкил итә, тип билдәләне министр.

✓ Стәрлетамаҡтан "Илһам" бейеү-спорт клубы тәрбиәләнеүселәре "Көҙгө Мәскәү" бейеү спорты буйынса Бөтә Рәсәй ярыштарында уңышлы сығыш яһаны. Стәрлетамаҡ ҡала мәҙәниәт һарайынан биргән мәғлүмәт буйынса, улар яҡшы һөҙөмтәләр күрһәтеп, төрлө йәш категорияларында призлы урындар яулаған. Мәҫәлән, "Балалар" йәшендәге категорияла (7-11 йәш) Урал Мәжитов менән Мирослава Казакова ике беренсе һәм икенсе урындар ала. "Юниорҙар" категорияһында (14-15 йәш) Рамаҙан Хәйеров һәм Нино Кардава өсөнсө баҫҡысҡа күтәрелә.

✓ Башҡортостандың Юғары суды 1 октябрҙә йәштәр сәйәсәте буйынса дәүләт комитетының элекке рәйесе Яна Гайдукка хөкөм ҡарарын үҙгәрешһеҙ ҡалдырҙы. Уға 3,5 йылға дөйөм режимлы холоҡ төҙәтеү колонияһына оҙатырға тигән ҡарар сығарылғайны. Гайдук мәҙәни мираҫ объектын ремонтлағанда вазифа вәкәләттәрен арттырыуҙа ғәйепле тип табылды. Башҡортостандың Тәфтиш комитеты мәғлүмәттәре буйынса, 2021 йылда ул законһыҙ рәүештә 5,2 миллион һумдан ашыу бюджет аҡсаһын, конкурс процедураларын урап үтеп, Костерин һәм Черников йортон ремонтлау өсөн тотонған.

✓ Өфөлә Оло йәштәгеләр көнөн "Мин яратам һине, тормош!" фестиваленең ҙур гала-концерты менән билдәләнеләр. Бында 55-90 йәшлек иң һәләтле яҡташтарыбыҙ йыйылды. Үҙешмәкәр коллективтар, хорҙар, вокаль ансамблдәр, фольклор һәм бейеү төркөмдәре, оркестрҙар, халыҡ театрҙары һәм яңғыҙ башҡарыусылар еңеүсе исеменә дәғүә итте. Концерт ваҡытында тамашасыларҙы биҙәү-ҡулланма сәнғәт оҫталары үҙҙәренең эштәре менән хайран ҡалдырҙы. Ғабдулла Әхмәтшинға һәм Светлана Ғизәтуллинаға махсус бүләктәр тапшырылды.

***Был йылдарҙы уҡығас, беренсе мең йыллыҡ аҙаҡтарында - икенсе мең йыллыҡ баштарында уҡ башҡорттарҙың дәүләтселегe булыуына шик ҡалмай.***

Билдәле археологыбыҙ Нияз ағай Мәжитов та хәҙерге Өфө ҡалаһы урынында, иң кәмендә IV-V быуаттарҙан XVI быуатҡа тиклем, латинса Paskerti тип, урта быуаттарҙа йәшәгән географтар тарафынан карталарҙа теркәп ҡалдырылған ҡаланы Башҡорт ҡалаһы тип таныны. Ни эшләп Башҡорт ҡалаһы булмаһын ти: картала, Алтын Урҙаның башҡа бер ҡалалары кеүек үк, махсус тамға-һүрәт менән билдәләнгән ул. Унан һуң, әлеге "Paskerti" атамаһын тағы ла икенсе бер һүҙ менән атап булыуы мөмкин дә түгел. Ә Рәсәй тарихсылары ошо ҡаланың сауҙа итеү һәм административ идаралыҡ итеү үҙәге булыуын да инҡар итмәй.

Хакимы, ханы, уға буйһонған идарасылары булған илде кем дәүләтһеҙ тип атар? Был күрәләтә ялған фекер булыр ине.

***Башҡорт халҡының дәүләтселеге нимәгә нигеҙләнгән һуң? Көньяҡ Урал һәм уның тирә-яғын йөҙәр саҡрымдарса уратып алған ерҙәр башҡорттоң тәү төйәгe булған, һәм быйың башланғыс осорона алыштырғыһыҙ дәлил итеп шул уҡ Шүлгәнташ мәмерйәһен, "Урал батыр" һәм башҡа эпостарыбыҙҙы күрһәтергә була. Уралыбыҙ - мәңгелек дәүләтселегебеҙ нигеҙе. Ошо эпоста һәм башҡа бер риүәйәт-легендаларыбыҙҙа, батыр егет образы менән бер рәттән, батшалар, хакимдар, хан һарайҙары хаҡында ла мәғлүмәттәр сағылыш тапҡан бит. "Түккән ҡанын, биргән йәнен, һис бирмәгән башҡорт Уралын" тигән һүҙҙәрҙә башҡорт рухы асылы ғына түгел, уның ил-йорт-дәүләтселеккә ҡарашы асыҡтарҙан-асыҡ итеп күрһәтелгән.***

Быны гәжәп: әллә нисә быуат дауамында Рәсәй ҡулы аҫтында көн иткән башҡорт һис бер ҡасан үҙенә ят булған динде, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, йолаларҙы, уға хас идара итеү рәүешен үҙ итә алмаған. Бәғзе бер тарихсылар фекеренсә, башҡорттарҙа дәүләтселектең иң демократик - горизонталь идара итеү ысулы быуаттар буйына ҡулланыла килгән. Ул да булһа, илйорттоң иң ҡатмарлы, иң мөһим мәсьәләләрен йыйындарҙа хәл итеү. Башҡорт йыйындары - тарихи феномен, уны тик Рәсәй дәүләте ойошҡанға тиклемге Новгород республикаһына хас булған вечеларға ғына тиңләп була.

Иллегә яҡын ҡәбилә-ырыу тармаҡтарынан хасил булһа ла, башҡорт халҡының берҙәмлегенә дан йырларға була. Яугир халыҡҡа аҡһаҡал-юлбашсыларҙың бер һүҙе лә еткән: күмәкләп, берҙәмлектән көс туплап, ил-йорт өсөн яуҙарға ла сыҡҡан улар. Тап шуның өсөн 1917 йылда, бер-бер артлы өс ҡоролтайға фекер алышыу, берләшеү маҡсатында йыйылышып, Рәсәй составында үҙҙәре үҙҙәренә ерле мөхтәриәт иғлан иткән халҡыбыҙ. Күҙ асып йомған арала тиғәндәй, үҙ хөкүмәтен, административ берәмектәрен, хатта ки ҡораллы ғәскәрен булдыра алған улар. Был, миненсә, боронғо башҡорт үҙаллылығының, билдәле кимәлдә бойондороҡһоҙ булыуының асыҡ сағылышы ул.

Һәм граждандар һуғышының иң фажиғәле бер мәлендә күрәшкә күтәрелгән халыҡ мәнфәғәттәрен ул саҡтағы большевистик Совет хөкүмәте лә инҡар итә алмай - Совет Рәсәйе дәүләте исеменән башҡорт дәүләтселеген танырға мәжбүр була. Күп ҡорбандар бирәп, ут-һыуҙарҙа сынығып тыуа беҙҙең республикабыҙ!

Уҙған быуаттың 90-сы йылдарына ҡайтһаҡ, үҙаллылыҡ, суверенитет рухы ҡаныбыҙҙа ҡайнаны. СССР державаһы махсус рәүештә емертелде, тип әйтергә лә ерлек барҙыр. Тарҡалған илдә берҙәм булып буламы икән? Була! Башҡорт республикаһы ошоға дәлил. Рәсәйҙе инҡар итмәнек - уртаҡ дәүләт бит әле ул. Борис Ельцин башҡорт дәүләтселегенә ҡул тейҙерергә баҙнат итә алманы. "Күпме булдыра алаһығыҙ, шунса йотоғоҙ, мин ҡаршы түгел", - тигән булды. Әлеге суверенитет хаҡында инде. Сөнки ил-йорттоң ныҡлығы халыҡ рухынан тора. Көслө рухлыбыҙ беҙ! Суверенитет тигән ятыраҡ төшөнсәне лә шул саҡта "татып" ҡарап өлгөрҙөк. Тик олигархтар хакимлығы быныҡ менән һис риза булманы: тора-бара ана шул сәйәси-иҡтисади үҙаллылыҡты инҡар иттеләр, бер державала әллә нисә президент булмай, тип, хатта ки бер зыяны булмаған атаманан да ваз кистерҙеләр. Шулай инде, донъя бит!

Бынан бик күп йылдар элек талантлы шағирыбыҙ Ғәлимов Сәләм, тыуған республикаһын данлап, бик тә иҫтәлекле шиғыр яҙып ҡалдырған, ул быйа нисек башлана:

*"Паровоздар киҫеп сыҡҡан ерҙә*
*Урал ҡаялары уртаһын,*
*Ап-аҡ ташҡа баҫып ҡарап торҙом*
*Республикамдың мин иртәһен".*

Эйе, беҙ көн һайын республикабыҙҙың гүзәл иртәләрен ҡаршылайбыҙ, киләсәктә лә ошондай шатлыҡҡа тулы сыуаҡ иртәләрҙең күп булырына ышаныуыбыҙ ҙур. Шуның ыһы ҡыуаныслы: Башҡортостан тигән республикабыҙ исеме тарих биттәренә алтын хәрефтәр менән яҙылған, халҡыбыҙ киләсәккә ҙур өмөттәр бағлап йәшәй, дәртләнеп эшләй һәм ҙур хис-ғорурлыҡ менән сираттағы Республика көнөн ҡаршылай.

**Байрамыбыҙ ҡотло булһын, йәмәғәт!**

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# ЯУАПЛЫЛЫҠ - ЕВРОПА ИҢЕНДӘ

**Мәғлүм булыуынса, Рәсәй Президенты Владимир Путин үткән аҙнала Сочи ҡалаһында "Валдай" халыҡ-ара дискуссия клубының йыл да үткәрелә торған пленар сессияһы ултырышында ҡатнашты.**




Уның сығышында белдерелгән төп тезистар түбәндәгесә: Украина фажиғәһе - бөтәбеҙ өсөн дә һыҙланыу ул. Әлегә Украинала утты туҡтатыу мөмкинлегенең булмауы өсөн яуаплылыҡ - Европа иңендә. Европаның ҡоралланыуһы ҡаршы Рәсәйҙең яуабы ҡәтғи буласаҡ. Әгәр НАТО Рәсәй сиктәренә яҡынлашмаһа, Украинала конфликт килеп тыуыуын булдырмаҫҡа мөмкин ине. Әлеге ваҡытта Европаның идара итеүсе элитаһы Рәсәй менән һуғыш ихтималлығы хаҡында истерияны дауам итә.

Владимир Путиндың Валдай форумындағы сығышы донъя матбуғатында киң яҡтыртыла. Экспертлар билдәләүенсә, Рәсәй Президенты дөйөм мәнфәғәттәр уртаҡлығын көҙҙә тотоп, Дональд Трампты маҡтап һүҙ әйткән, ләкин, әгәр ҙә АҠШ Украинаны ҙур алыҫлыҡтағы Tomahavk ракеталары менән тәьмин итә ҡалһа, мөнәсәбәттәрҙең ныҡ ҡына боҙолоу ихтималлығы хаҡында иҫкәртә. Һәм, ысынлап та, The Wall Street Journal баҫмаһы хәбәр итеүенсә, Трамп алыҫ радиусҡа һөжүм итеүсе ракеталар менән Рәсәй энергетика объекттарын утҡа тотоу өсөн Киевҡа разведка мәғлүмәттәрен тапшырыу хаҡында Пентагонға рөхсәт биреүсе указға ҡул ҡуйған, тип яҙа был баҫма. Ә шулай ҙа 5 сентябрҙә Дональд Трамп Рәсәй лидеры Владимир Путиндың стратегик һөжүм итеү ҡоралланыуҙарын киләһе йылдың 5 февраленә тиклем сикләү буйынса тәҡдимен хупланы һәм быны яҡшы фекер тип әйтте.

Рәсәй Президенты форумдағы сығышында Һиндостанды яҡлауын белдерҙе һәм уның премьер-министрына рәхмәт әйтте. Был иһә Һиндостандың Вашингтон баҫымына бирелмәйенсә, Рәсәй нефтен һатып алыуҙы дауам итеүе менән бәйле. Бынан һуң АҠШ президенты һинд тауарҙарына 50 процент пошлина индерҙе, ләкин уның импортҡа тарифтары АҠШ-та сит ил тауарҙарына хаҡтарҙың күтәрелә башлауына сәбәп булды, тип хәбәр итә Financial Times гәзите.

Германияның элекке канцлеры Ангела Меркель Венгрияның Partizan баҫмаһына әңгәмәһендә Украинала МХО башланыуы хаҡында үҙ фекерен белдереп, Польша менән Балтик буйы илдәре Латвия, Литва һәм Эстонияны 2021 йылда Украина көрсөгөн көйләү буйынса Евросоюз менән Рәсәй диалогына ҡаршы сығыуҙа ғәйепләне.

Швейцарияның иң ҙур һәм абруйлы Халыҡ партияһы вәкиле - депутат Жан-Люк Аддор "Известия" гәзитенә әңгәмәһендә Рәсәйҙең тотҡарландырылған активтарын конфискациялау Швейцария закондарына ҡаршы килә, тип белдерҙе һәм Рәсәйгә ҡаршы санкцияларҙың Швейцария экспортерҙарына, шулай уҡ илде энергетика менән тәьмин итеүгә ныҡ ҡамасаулауы һәм ошо юҫыҡта Рәсәйгә коллегаларының эш сәфәрен ойоштороуға ниәтләүе хаҡында һөйләне. Финляндияның Iltalthti гәзите Чехиялағы парламент һайлауҙарында "Ризаһыҙ граждандар акцияһы" (ANO) хәрәкәте башлығы Андрей Бабиштың еңеүе Украина файҙаһына булмаясаҡ, тип яҙҙы. Чехия халҡы Киевҡа ярҙам итеп арыны, Украинаға бик күп аҡса сарыф ителә, тиелә әңгәмәлә.

Хәбәр ителеүенсә, Америка президентын Палестина мәсьәләһе лә борсой. Мәғлүм булыуынса, Яҡын Көнсығыш, ниһәйәт, Газа секторында ҡасан тыныслыҡ урынлашыр көндө зарығып көтә. Палестинаның сәйәси-дини хәрәкәте һәм сәйәси партияһы ХАМАС Израилгә иҫән һәм һәләк булған тотҡондарҙы ҡайтарыу тураһында һөйләшеүҙәргә әҙерләнгән, шулай уҡ Газа менән идара итеүҙе бойондороҡһоҙ һәм сәйәсәткә ҡыҫылмаусы Палестина комитетына тапшырыу ихтималлығы хаҡында белдергәйне. Ошо юҫыҡта Израиль премьер-министры Биньямин Нетаньяхуның ХАМАС менән килешеүгә ышаныс белдермәүе Трампта ныҡ ризаһыҙлыҡ тыуҙырҙы һәм ул премьерҙы: "Белмәйем, ни өсөн һин һәр ваҡыт шулай шайтандарса тиҫкәреһең?"- тип ҡаты ғына тәнҡитләп алырға мәжбүр булды. Улай ғына ла түгел, АҠШ лидеры Израиль премьерын еңелеүен танырға саҡырҙы. Был Трамптың Палестина-Израиль конфликтын хәл итеүҙә ныҡышмаллығын күрһәтә, тип яҙа Axios баҫмаһы.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓10 октябрь республикабыҙҙа беренсе тапҡыр Ҡурай көнө билдәләнә! Шул айҡанлы Башҡортостан Республикаһының дәүләт ҡурайсылар ансамбле "Башҡортостан" концерт залында үтәсәк ҙур концертына саҡыра. Тамашала башҡорт илен данлаған халыҡ йырҙары, боронғо хәрби походтарҙа яңғыраған марштар, бейеү көйҙәре, илһөйәрлек рухы менән һуғарылған заманса музыка һәм өрәңы әҫәрҙәр яңғыраясаҡ. Бай эстәлекле сағыу программала шулай уҡ ҡурай моңона ҡушылып оҫта йырсылар йырлар, дәртле бейеүселәр осҡон сәсеп бейер.

✓Өфөнөң Затон биҫтәһендә төҙөлөп ятҡан мәктәп 1125 уҡыусыға иҫәпләнгән. Ул Миловка, Летчиктар, Ғәзи Заһитов һәм Дмитрий Купцов урамдары араһында урынлашҡан. Проект буйынса мәктәп биш секциянан тора. Бөгөнгө көндә майҙансыҡта төҙөлөш-монтаж эштәре, биләмәне төҙөкләндереү, тышҡы яҡтыртыу ҡорамалдарын монтажлау алып барыла. Шул уҡ ваҡытта яһалма япмалы спорт майҙаны төҙөлә.

✓Яҡташыбыҙ Алһыу Минәзева Австралияла донъя чемпионатында көмөш миҙал алды. Өфө спортсыһы Сиднейҙа сығыш яһаны һәм халыҡ-ара ярышта өс призер иҫәбенә инеп, олимпия дисциплинаһында көмөш миҙал яуланы. 2021 йылдан алып тәүге тапҡыр, йәғни халыҡ-ара ярыштар булмаған осорҙа, Башҡортостан юғары дәрәжәле наградаға эйә булды.

✓Рәсәй банкы 6 октябрҙә 1 миллион дана тираж менән "Хеҙмәт кешеһе" серияһынан "Ауыл хужалығы һәм эшкәртеү сәнәғәте хеҙмәткәре" иҫтәлекле тәңкәһен сығара башлауын хәбәр итте. 10 һумлыҡ тәңкә ҡиммәтле булмаған металдан эшләнгән. Диаметры - 22 миллиметр.

✓Башҡортостанда "БумБатл" Бөтә Рәсәй акцияһы барышында макулатура йыйыу башлана. Йәштәр сәйәсәте министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, өфөләр 10 килограмм макулатура тапшырып, Башҡортостандың милли музейына ике кешелек билет алырға мөмкин. Был акция Бөтә донъя икенсел эшкәртеү көнөнә - 15 ноябргә тиклем бара. Макулатура тапшырыуҙан йыйылған аҡса "Эколог" эко-логия-биология үҙәгендәге хайуандар өсөн аҙыҡ һатып алыуға тотонола. "БумБатл" акцияһы "Экологик именлек" милли проекты буйынса ойошторола.

✓2012 йылдан Республика медицина-генетика үҙәгендә суррогат әсәләр ярҙамында 153 һау-сәләмәт бала донъяға килгән. Был хаҡта Ufanovosti.ru интернет-порталына республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығынан хәбәр иттеләр. Һуңғы йылда суррогат әсәләрҙән 18 бала тыуған. Шәхси клиникаларҙа ошо программа ярҙамында тыуған сабыйҙар буйынса иҫәп алып барылмай, тип белдерҙеләр ведомствола.

**“БАШИНФОРМ” материалдары файҙаланылды.**

*БОРОНҒО АМАНАТ*

# ТЫЙЫУ ЙОЛАҺЫ

Балаһы булмаған йәки тормаған башҡорттар ҙа үлем рухынан арынырға ынтылған. Бәпес тыуғас та, кендек әбейе уны тышҡа алып сыҡҡан. Өй тирәләй бер аҙ йөрөгәс, тәҙрәнән өндәшкән: "Сит тарафтан бер бәпес килтерҙем, һатып алыусы булырмы?" Шунан һатыулашыу башланған, һатыусыға хаҡ итеп, мәсәлән, тимер кисәге бирелгән. Яңы тыуған балаға иһә Тимер, Һатыбалды, тәненә көс-ҡөҙрәт өҫтәр өсөн Теребай, Үлмәсбай кеүек исемдәр ҡушылған.

Шулай итеп, бала сәләмәт, сыҙамлы, оҙон ғүмерле булһын өсөн Йәнтимер, Тимерйән, Таштимер, Йәнтимер, Тимербикә, Йәнбикә исемдәре ҡушылған. Исемдең магик тылсымы, ҡөҙрәте бар, исемдәр кешенең холоҡ-фиғелен, ҡылығын, үҙен тотошон, яҙмышын билдәләй, тип уйланылған. Ысын исемде йәшереү, яуыздарҙан һаҡланыу өсөн кешеләр ҡушамат исемдәр ҙә йөрөткән һәм был ғәҙәт беҙҙең көнкүрештә лә ҡуҙаллана.

* * *

Халыҡ ғөрөф-ғәҙәтендә тыйыуҙар бихисап һәм йәшәйештең бөтә яҡтарына ҡағыла. Алдашма, ғәйбәт һөйләмә; тәкәлеп ҡарама, бәпескә күҙең тейер; бызауға, бәрәскә күҙең теймәһен; малға типмә, аяғың ҡорор; кеше әйберенә ҡағылма, ҡулың ҡорор; бысаҡты кешегә ҡаратма; мылтыҡты кешегә төҙәмә, йылына бер яһауһыҙ ҙа ата; ай яҡтыһында йоҡлама; ҡулыңды тый, теләңде тый; зыяратҡа бармаҡ төртөп күрһәтмә, бармағың серер; мәйетте оҙатмайса юлға сыҡма; мәйеттең юлын ҡыйма; зыяратта көрәктә ҡулға тотторма, ергә һал; һыуҙы ағым ыңғайына алма; юлға сыҡһаң, кире боролоп кермә, юл унмай; тупһаға баҫып торма, үсмәсһең; бесәйҙе рәнйетмә, ҡарғышы төшөр; мөгәҙлө йыланды, туҙбаш йыланды үлтермә, ҡаза килер; үрмәксесте үлтермә, зат-зәүерең ҡорор; эңер менән аҡшам араһында йоҡлама; салғының, бысаҡтың йөҙөн өҫкә ҡаратып һалма, бөлә-ҡаза көсәмә; йома көн кер йыума, тырнаҡ алма; алған сәсте, тырнаҡты теләнә ҡайҙа ташлама, утҡа яҡ...

Тыйыуға бәйле аҡыллы кәңәштәр ҙә бирелгән, теләктәр ҙә әйтелгән: тыя барһаң, тыйнаҡлы булыр; тыйнаҡһыҙ үҫкән ҡыҙҙа бәрәкәт юҡ; тыйнаҡһыҙ йортта йән тынмаҫ, йәм тормаҫ; баланы йәштән өйрәт...

Тимәк, үҙенде тота белеү, тыйнаҡ була белеү сифатын ата-инә, ололар өйрәтергә, күндерергә тейеш. Әйтәйек, беҙ үсмер саҡта шундай гәмәлдәрҙән тыя торғайнылар: үтә нык шаярыуҙан, бер ҙә юҡҡа көләүҙән, үсекләшеүҙән, әрепләшеүҙән, алама һүҙ әйтеүҙән, тәндә йөрөүҙән, һорауһыҙ, рөхсәтһеҙ әйбер алыуҙан, кемделер йәберһетеүҙән, тыҡшайыуҙан, тызрайыуҙан...

Шулай итеп, тыйыу - ыңғай төшөнсә, йола, күренеш. Ул әҙәми заттың тәбиғәтен, ҡылығын, холҡон, тәртибен көйләүҙә тәрбиәләү сараһы, кешеләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәт, йәмғиәткә ҡарата ҡараш, йәнә эш, йәшәйеш, тормош-көнкүреш күрһәтмәләре һәм ҡағиҙәләре булып тора.

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ.**
**(Аҙағы).**

*БЕҘҘЕҢ ДУҪТАР*

# АЛҒА, БЕЛЕМ ИЛЕНӘ!



**Гәзитебеҙҙең иң мәртәбәле уҡыусылары һәм тоғро дуҫтары улар, Өфөләге һәм республика ҡалаларындағы башҡорт гимназия һәм лицейҙары коллективтары. Уларҙың етәкселәренә: "Яңы уҡыу йылын ниндәй кәйеф, ниндәй пландар менән башлап ебәрҙегеҙ?"- тигән һорау биреүҙе дауам итәбеҙ.**

***Гөлшат ӘХМӘТОВА, Стәрлетамаҡ ҡалаһының 3-сө Башҡорт лицей-интернаты директоры:*** Белеүегеҙсә, беҙҙә тик малайҙар ғына уҡый. Лицейҙың көслө педагогтары уларҙы физик һәм рухи йәһәттән үҫтереүгә ҙур иғтибар бүлә. Дөйөм эшебеҙҙең һөҙөмтәһе - ул егеттәрҙең ҡала, республика һәм ил кимәлендә уҙғарылған конкурс, олимпиада, ярыштарҙа ҡатнашып, юғары урындар яулауы. Шулай былтырғы уҡыу йылында ҡала кимәлендә уҙғарылған социаль-иҡтисади ярышта ҡала мәктәптәре араһында беренсе урын алдыҡ. Еңеүебеҙ Стәрлетамаҡ ҡалаһы хакимиәте тарафынан 500 мең һумлыҡ сертификат менән билдәләнде.

Сығарылыш уҡыусыларының БДИ-лағы күрһәткестере үҙе үк белем усағының һөҙөмтәлелеген күрһәтә. Быйылғы сығарылыш араһында ике уҡыусыбыҙ БДИ-ла 100 балл йыйҙы. Улар - физиканан Артур Хәйретдинов һәм химия фәненән Динис Ғиззәтуллин. Шулай уҡ Динис химия буйынса Рәсәй олимпиадаһының йомғаҡлау этабында һәм Халыҡ-ара олимпиадала призлы урын яуланы. Егеттәрҙең ҙур күрһәткестәргә өлгәшеүен күтәрмәләп, ҡала хакимиәте физика һәм химия кабинеттарын йыһазландырыу өсөн 100-шәр мең һум күләмдә аҡса бүлде.

Шулай уҡ уҡыусылар йыл дауамында юғары уҡыу йорттары уҙғарған олимпиадаларҙа ла ҙур теләк менән ҡатнаша. Быйыл лицейҙы тамамлаған 41 егеттән 12-һе һынауҙар бирмәй генә, олимпиада һөҙөмтәләре буйынса, юғары уҡыу йорттарына уҡырға инде. Бындай уңыштар йылдар дауамында алып барылған эшмәкәрлек һөҙөмтәһе ул. Шулай уҡ сығарылыш уҡыусыларының 20-һе лицейҙы беренсе һәм икенсе дәрәжәле миҙалдар менән тамамланы, 40 уҡыусыбыҙ юғары, береһе профессиональ уҡыу йортонда белем ала бөгөнгө көндә. Уларҙың күбеһе техник, информатика, медицина, инженер йүнәлешен һайланы. Иң ҡыуаныслыһы, уларҙың күбеһе республика уҡыу йорттарына уҡырға инде, тимәк, оҙаҡламай дипломлы белгестәр булып, Башҡортостаныбыҙға төпләнеп, ғаиләле булып төбәктең үҫешенә үҙ көстәрен, белемдәрен һалып йәшәрҙәр, тип өмөтләнәм. "Алтын сығарылыш" тип атайбыҙ беҙ быйылғы сығарылыш егеттәрен.

**Рәсәйҙә "Сириус" белем биреү мәғариф үҙәге тарафынан ойошторолған олимпиадаларҙа еңеп, Сочи ҡалаһында бөтә илдән йыйылған һәләтле балалар араһында беҙҙең лицейҙан да 14 уҡыусы булыуын күреү һөйөнөслө. Шулай уҡ уҡыуҙа, спорт һәм башҡа йүнәлештәрҙә ҙур уңыштарға өлгәшкән өс бала "Артек" балалар лагерында ял итте. Быйылғы уҡыу йылының лицейыбыҙ өсөн тағы ла ҙур күрһәткесе - Башҡортостан кимәлендә этно-мәҙәни ҡала мәктәптәре исемлегенең топ-бишәүһенә инеүе.** Шулай уҡ быйылғы уҡыу йылында лицейҙың Рәсәй мәғариф системаһында эшләүенә 30 йыл тулды. Был матур дата айҡанлы Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе бинаһында уҙған сара коллективтың, хаҡлы ялда булған уҡытыусы һәм тәрбиәселәрҙең, төрлө йылдағы сығарылыш уҡыусыларының, бөгөнгө көндә лицейҙа белем алыусыларҙың рухи берҙәмлеге байрамы булды.

Лицейыбыҙҙа йыл һайын "Аҡ тирмә" балалар асыҡ ижади фестивале үтә. 11-се тапҡыр уҙған фестиваль Стәрлетамаҡ ҡалаһында йәшәгән балаларҙы алты йүнәлеш буйынса йыйып, бер майҙансыҡта туплап уларға ижади яҡтан асылырға ярҙам иткән проект. Башҡорт оҙон һәм ҡыҫҡа көй, башҡорт бейеүе, билдәләнгән темаларға видеосюжеттар әҙерләү һәм башҡа күп төрлө йүнәлештәрҙе берләштерә фестиваль. Сараның төп үҙенсәлеге - башҡорт теленә, мәҙәниәтенә, тарихына иғтибар. Фестивалдә төрлө милләт балалары ҡатнаша, ләкин бөтә сығыштар ҙа тик башҡорт телендә генә була. Башҡорт лицей-интернаты булараҡ беҙ был фестивалде үткәреүҙе рухи бурысыбыҙ тип күрәбеҙ һәм уның милләтебеҙгә, телебеҙгә хөрмәт уятыуҙың бер сығанағы тип иҫәпләйбеҙ. Беҙҙең проектҡа килеп, ҡатнашып, еңеү төмән тойған балалар артабан тағы ла ҙурыраҡ конкурстарҙа ҡатнашыр, үҙен күрһәтер, тип уйлап башлаған был фестивалдең һығымтаһын, йылдан-йыл күберәк ҡатнашыусылар йыйыуын күреү, әлбиттә, ҡыуаныслы.

Ғөмүмән, лицейҙы тамамлап сығып киткән элекке уҡыусыларыбыҙ ҙа онотмай беҙҙе. Мәсәлән, улар йыл әйләнәһенә үткәрелеп килгән сараларҙа әүҙем ҡатнаша, йәй көнө профилле лагерға йөрөгән балаларға белем бирә. Быны беҙ "интеллектуаль бағыусылыҡ", тип атайбыҙ һәм уларға рәхмәтлебеҙ. Быйылғы уҡыу йылында ла коллективыбыҙ алдында әһәмиәтле бурыстар ҡуйғанбыҙ. Балаларға яҡшы белем биреү менән бер рәттән, уларҙың граждандыҡ позицияһын нығытыу, ҡыҙыҡһыныуҙарын күреү һәм күтәрмәләү, тейешле шарттар булдырыу - тәүбурыстарыбыҙ булып тора. Улар беҙҙең киләсәк, бөгөн уларға ниндәй тәрбиә һәм белем бирәбеҙ, уның һөҙөмтәһен киләсәктә күрәсәкбеҙ.

***Ләлә ШӘРИПОВА, Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге 2-се башҡорт гимназия-интернаты директоры:*** Быйыл беҙҙең гимназия-интернаттың Ишембайҙың белем усағы булараҡ асылыуына 90 йыл. Уның тарихы алыҫ 30-сы йылдарға барып тоташа. Ишембай нефть ятҡылығы асылғас, илебеҙҙең төрлө төбәктәренән нефть промыслаһында эшләргә ағылыусы эшселәрҙең балалары өсөн мәктәп асыу зарурлығы менән бәйле була ул. 1932 йылдың июль айында башланғыс мәктәп булараҡ асылған белем усағы, бик күп үҙгәрештәр кисереп, 1992 йылдан Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге 2-се Башҡорт республика гимназия-интернаты исемен йөрөтә башлай. 2012 йылдан беҙ муниципаль бюджет учреждениеһы. Нисек кенә аталып йөрөтөлһәк тә, гимназияның 90 йыллыҡ тарихы бар. Әлеге көндә ошо оло юбилейҙы ҡаршы алырға әҙерләнәбеҙ: тарихыбыҙҙы барлайбыҙ, юбилей сараларын үткәреү өсөн төрлө кимәлдә һөйләшеүҙәр алып барабыҙ. Төп сара 28 ноябргә тәғәйенләнгән, интернат-мәктәпте тамамлап, илебеҙҙең төрлө тарафтарында эшләп йөрөгән элекке уҡыусыларыбыҙҙы үҙебеҙҙә көтөп ҡалабыҙ.

Беҙҙең гимназия-интернат - районда абруйлы мәғариф учреждениеларының береһе. Йылдың-йылы сығарылыш класс уҡыусыларының уҡыу йорттарына инеү күрһәткесе юғары кимәлдә. Быйыл да һынатманыҡ: юғары уҡыу йорттарына уҡырға инеүселәр 92 процент тәшкил итте, өс кенә уҡыусыбыҙ (8 процент) уҡыуҙарын колледждарҙа дауам итә. Мәктәпте миҙалға тамамлаусыларҙың һаны был тырғы уҡыу йылының күрһәткестәре буйынса бермә-бер артты. Һуңғы биш-алты йылда медалистарыбыҙ алтышарҙан артмай ине, былтыр ете уҡыусыбыҙ - алтын, дүрт уҡыусыбыҙ көмөш миҙалға тамамлап һөйөндөрҙө.

**Олимпиада хәрәкәте буйынса һөҙөмтәләребеҙ ҡыуандыра. Бигерәк тә башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса Төбәк-ара олимпиадала йыл да уҡыусыларыбыҙ уңышлы сығыш яһай. Быйылғы олимпиадала 9-сы класс уҡыусыһы Яҙгөл Хәйруллина олимпиаданың еңеүсеһе булды. Яҙгөлөбеҙ - "Урал батыр" эпосын тулыһынса ятлап, эпос буйынса ойошторолған йәш сәсәндәр бәйгеһендә Гран-при яулап та республикала билдәлелек яулағайны инде. Ошо уҡ бәйгелә Лотфуллин Искәндәр атлы уҡыусыбыҙ, башланғыс класс уҡыусыһы ғына булыуға ҡарамаҫтан, ике йыл рәттән I урын яулап ҡайтты.** Ике йыл рәттән уҡыусыларыбыҙ туған телдәр буйынса Төньяҡ-Көнсығыш олимпиадаһы тип исемләнгән Федераль кимәлдә үткәрелгән олимпиаданың призерҙары булды. Был да ҙур ҡаҙаныш. Былтырғы уҡыу йылының тағы ла бер уникаль һөҙөмтәһе менән бүлешкe киләм: Ғөбәйҙуллин Илнур исемле егетебеҙ бер түгел ике баҫманың - "Йәншишмә" гәзите менән "Аманат" журналының йәш хәбәрсеһе булып танылды. Бер йылда ҡулына ике баҫманан "Йәш хәбәрсе" танытмаһы алыу, ысынлап та, республика кимәлендә булғаны юҡтыр.

Гимназияла байтаҡ йылдар "Алтынай" бейеү ансамбле эшләп килә. Ансамбль республика кимәлендә күптән танылыу яулаған инде. Быйылғы йәй улар "Байыҡ" телевизион бәйгеһендә Гран-при яулап ҡайттылар. Заман талаптары уҡыусыларҙың дәрестән тыш эшмәкәрлеген ойоштороу өсөн асылған штаттарҙы ҡыҫҡартыуҙы талап итһә лә, бейеү ансамблен һәм спорт йүнәлешендә шулай уҡ йыл да ҙур уңыштарға өлгәшкән тренерҙар штатын һаҡлап ҡала киләбеҙ. Беҙҙә шулай уҡ "Аҡтайлаҡ" мәргәндәр клубы эшләп килә. Клуб етәксеһе Зөһрә Сәфәрғолова уҡыусылары менән ҡайҙарҙа ғына булманы инде, уларҙың уңыштарын һанап бөтөрлөк түгел.

Махсус хәрби операция гимназия-интернат тарихына ла үҙ биттәрен яҙҙы. Былтыр дүрт батырыбыҙҙың исемен мәңгеләштереү өсөн Герой партаһы асҡайныҡ, яңыраҡ ҡына тағы бер егетебеҙ тураһында ҡайғылы хәбәр алдыҡ. Ил тыныслығын һаҡлаған яугирҙарыбыҙға атаәсәләр ярҙамы менән гуманитар ярҙам ебәреүҙе лә даими ойоштороп торабыҙ, уҡыусылар окоп шәмдәре эшләй, сеткалар үрә. Быйыл да был эш дауам итәсәк. Быны ошондай гәмәлдәр, бурыстар менән йәшәйбеҙ.

✓ *Өфө-II цитаделе - Көньяҡ Уралдың ғына түгел, Көнсығыш Европаның уникаль археологик ҡомартҡыһы. Шуға ҡарамаҫтан, объект әлеге көндә бик насар хәлдә, ундағы күп нәмәләр емерелә, эшлектән сыға бара.*



*ТАРИХИ ЙЫЛЪЯҘМА*

# ӨС ЙЫЛҒА САТЫНДАҒЫ ҠАЛА,

## йәки Нисә йәш һиңә, Өфө?

**(Салауат Хәмиҙуллиндың видеофильмы буйынса)**



***Салауат Хәмиҙуллин:*** Б.э. V-VIII быуаттарына ҡараған турбаҫлы мәҙәниәтенең атамаһы Башҡортостандың Благовещен районында урынлашҡан Яңы Турбаҫлы ауылы янында боронғо тораҡ һәм ҡурған ҡәберлеге булған ҡомартҡыһы менән бәйле. Ул уҙған быуаттың 60-сы йылдарында археолог Нияз Мәжитов тарафынан өйрәнелә.

Был ерҙәргә яугир күскенселәрҙең килеүе яңы политогенезға ерлек бирә һәм иерархик структураларҙы, ябайыраҡ әйткәндә, дәүләтселекте барлыҡҡа килтерә. Ә был, үҙ сиратында, төбәк менән идара итеү маҡсатында сәйәси һәм административ үҙәк булдырыу ихтыяжын тыуҙыра.

Был маҡсатта тәбиғи яҡтан яҡшы ҡурсаланған урын - Өфө ярымутрауының көньяҡ ҡырыйы һайлана, сөнки ул тирә-яҡтан өҫкәрәк ҡалҡып тора, Өфө һәм Дим йылғалары тамаҡтарын контролдә тотоу мөмкинлеген бирә. Өфө йылғаһы буйлап Себер тарафтарынан килгән юлдар, Ҡара диңгеҙ яҡтарынан Дим, көньяҡтан - Ағиҙел йылғалары ағымы буйлап һалынған юлдар тап ошонда тоташа.

***Фларит Сөнгәтов, тарих фәндәре кандидаты, археолог:*** Һис шикһеҙ, Өфө ярымутрауындағы ҡалаға турбаҫлы ҡәбиләләре вәкилдәре нигеҙ һалған, сөнки ошо осорҙа улар берҙәм, хәрби яҡтан ойошҡан йәмғиәтте хасил итә. Ошо көслө ҡәүем урындағы халыҡты үҙенә буйһондора алған.

Тикшеренеүселәр иҫәпләүенсә, Зәки Вәлиди, Яңы түшәлгән урам, Пушкин һәм Салауат Юлаев проспекты арауығындағы майҙанда урынлашҡан Өфө-II ҡаласығы ҡәлғә рәүешендә төҙөлгән, унда фортификация ҡоролмалары, хужалыҡ һәм кешеләр өсөн төҙөлгән биналар, хатта таҡта тротуарҙар була. Нығытмаларҙан ситтә, хәҙерге Зәки Вәлиди урамынан Туҡай урамына һәм хәҙер Салауат Юлаев баҡсаһы урынлашҡан Случевская тауына тиклем асыҡ тораҡ та була, уны хәҙер Өфө-III ҡаласығы тип атайҙар. Уны 1969 йылда өлөшләтә башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарынан беренсе археолог булған Мәхмүҙә Садыҡова тикшергән.

Ҡаласыҡ үҙе ҡала цитаделе була, төрлө яҡтан уға йәнәш асыҡ тораҡтар төҙөлә, уларҙы ҡала посады, тип атап була. Археологик яҡтан Өфө-II ҡаласығы, нисек итеп булһа ла, ярайһы уҡ яҡшы тикшерелгән, әммә посад биләмәләрендә тикшеренеү эштәре башҡарылмаған. Өфө-II цитаделе - Көньяҡ Уралдың ғына түгел, Көнсығыш Европаның уникаль археологик ҡомартҡыһы. Шуға ҡарамаҫтан, беҙ тикшергән ошо объект әлеге көндә бик насар хәлдә, ундағы күп нәмәләр емерелә, эшлектән сыға бара.

***Салауат Хәмиҙуллин:*** Өфө ярымутрауы буйлап һыу юлынан барғанда ғәжәп күренеште күҙәтәһең: тәбиғәттең ниндәйҙер бер үҙенсәлекле еңмешлегенәнме, әллә инде аҡылынанмы, уның ҡөҙрәтенә торорлоҡ ошондай бөйөк һәм хикмәтле һәйкәл хасил булған. Өфө үҙе бер тәбиғи ҡәлғәгә тиң, уның менеп етеп булмаҫлыҡ ҡалҡыу ярҙарын йылғаларҙың шәп ағымы йыуа. Юҡҡамы ни ул ҡалмыҡтарҙың һәм Себер ханы Күсем улдарының һөжүмдәренә ҡаршы тора алған, ихтилалға күтәрелгән башҡорттарҙың һәм, ахырҙа, Емельян Пугачев ғәскәрҙәренең ҡамауын имен-аман кире ҡағып торған. Шик юҡ, боронғо замандарҙа ла төрлө баҫҡынсыларҙың Өфөгә ҡаттан-ҡат һөжүм итеп тороуын инҡар итеп булмай. Улай булмаһа, "Өфө-I" һәм "Өфө-II" ҡаласыҡтарында фортификация ҡоролмалары ни өсөн төҙөлгән һуң? Турбаҫлылар бында баҫҡынсы булып килә, әммә тиҙҙән үҙҙәре күскенселәрҙең яңы төркөмдәренән һаҡланырға мәжбүр була. Шулай булһа ла, ҡала сәскә атҡан, Өфө ҡәберлектәренән табылған бай материалдар ошо хаҡта һөйләй.

***Светлана Воробьева:*** 1936 йылда медицина институты территорияһында бик бай ҡәберлек асыла. Унда Византияла яһалған 700-ле пробала алтын кольт табыла, ул сикәгә биҙәүес итеп тағып йөрөтөлгән. Кольт менән бергә ҙур булмаған сәс тотамы ла һаҡланып ҡалған, ул ерән сәсле ҡыҙҙыҡы була. Ғалимдар раҫлауынса, Византия батшалары бындай ҡиммәтле әйберҙәрҙе сит илдәрҙән килгән илселектәргә бүләк итеп биргән.

***Салауат Хәмиҙуллин:*** Бындай эксклюзив изделиеның, моғайын, урындағы хакимдың ҡатыныҡы, йә иһә ҡыҙыныҡы ғына булыуы мөмкин. Башҡа һирәк осрай торған табылдыҡтар араһында Византия империяһы хакимдаштарының һүрәттәре төшөрөлгән медальон, арҙаҡлы яугирҙың көмөштән ҡойолған геральдик бил әйберҙәре йыйылмаһы, алтын биҙәүестәр бар.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләне.**

**(Дауамы. Башы 37-38-се һандарҙа).**

*АҒИНӘЙ ҺҮҘҘӘРЕ*

# АТАЛЫ БАЛА...

## арҡалы

- Аслыҡта ейгән ҡойҡаңды туҡҡа сыҡҡас онотма.
- Дауыл бәрелеүҙән тау һелкенмәй, ел һуғылыуҙан ғына имән эйелмәй.
- Шәп сағыңда дуҫ-иштәрең төрлө һүҙ менән тартҡылай, дошмандарың уҡ менән ҡаҡҡылай; кәрһеҙ ҡалһаң, алмаһы бөткән алмағасты һелкетмәгәндәй, ҡағылмайҙар, һуғылмайҙар.
- Үҙ ҡояшың балҡымаһа, ҡыҡтәгe ҡояш ҡына йылытмай шул.
- Бала бауыр ите тиһәк тә, ул әллә нисә ҡат утлы күлдәк кейҙереүсе зат.
- Барҙың малын, юҡтың көнөн һорау - ил өҫтөнә төшкән ут-яҡҡын ул.
- Тәҙрә төбөндәге гөлгә ҡарап ҡына бөтә донъя гөл-сәскәнән тора, тип уйламағыҙ: билсәне лә, дегәнәге лә, шайтан таяғы ла, әреме менән кесерткәне лә туп-тулы.
- Был донъяның фәйрүзәһе лә, һәтемтәйе лә бар.
- Тирәк ағас - бейек ағас, ҡара ҡарғышлы ағас: быса күрмә ҙурайғас.
- Ҡутырһыҙ - ауыҙ, болаһыҙ ауыл булмаҫ.
- Һөртә белмәһән, хушбуйҙан да - тиҙәк еҫе, һөйләй белмәһәң, йыйы һүҙҙән дә боҙ бөркөлә.
- Йүнһеҙҙең булөге сир сәсер - ишек төбөнән үтмәһен; яҡшының бүләге нур һибер - бейек түрҙән төшмәһен.
- Һимеҙ һарыҡ - аҡҡош мамыҡтан яҫтыҡ, ябығы - ҡырлы-мырлы яҫмыҡ (таш йәки борсаҡ).
- Ике тамсы бер-береһенә оҡшаһа ла, тәмдәре менән айырыла; кешеләр ҙә шулай.
- Ҡатыны - купец, затлы кейем кейенгән; ире - кузнец, һәләмәгә төрөнгән.
- Аталы бала - арҡаулы, әсәле бала сәсмәүле.
- Тел әүеркә: ауыҙға ингән ризыҡты әйләндерә-тулғандыра; тормош та шулай - бәндәне ара һуға, бире бәрә.
- Фатиха алған арымаҫ, алмаған - ҡарымаҫ (йәлсемәҫ).
- Ас һорап ала, туҡ ялмап һала.

**Мөнирә БАЙМӨХӘМӘТОВА.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



# БАШҠОРТТАР

## Солоҡсолоҡ һәм умартасылыҡ, малсылыҡ һәм ҡошсолоҡ, ер эшкәртеү

Тотош Урал алды башҡорттары "солоҡ" тип ҡыуышында ҡырағай бал ҡорттары йәшәгән барлыҡ ҡарт ағастарҙы атаған. Боронғо Рустә лә ул шундай мәғәнәлә йөрөгән. Һуңыраҡ Белоруссия менән Украинала урмандағы ағасҡа элеп ҡуйылған умарталарҙы солоҡ тип атай башлағандар. Башҡорттар, алда әйтеп кителгәнсә, балды ҡырағай ҡорттар йәшәгән ҡыуышлы ағастарҙан алған һәм уларҙы махсус рәүештә эҙләп йөрөгәндәр. Әммә быға тиклем үк улар ағастың эсен соҡоп, яһалма солоҡтар ҙа эшләгән. Һуңынан уларға ҡырағай бал ҡорттары оялаған. Тап шул ваҡыттан умартасылыҡ башланған да инде.

Урманда табылған, ҡырағай бал ҡорттары эйәләшкән эсе ҡыуыш ағасты тапҡан кеше уға үҙенең тамғаһын һалған. Бал алыу өсөн ҡыуыш ауыҙы киңәйтелгән, уға ҡалыптар ҡуйылған һәм йыл һайын унан билдәле күләмдә бал ағыҙып алынған.

Яһалма солоҡ ҡуйыу өсөн диаметры 60 сантиметрҙан да кәм булмаған ҡарт ағастар, бигерәк тә ҡарағай, ҡарағас, имән йәки ҡарама һайланған. Һайланмыш ағасҡа тамға һалынған һәм башҡорт унда ҡыуыш эшләй башлаған. Ул ерҙән 6-8 метр бейеклектә урынлаштырылғас, башта ағасҡа менергә кәрәк булған. Башҡорттарҙа ағасҡа менеү ысулы бик ябай. Ерҙән бер метр бейеклектә ағаста ике яҡлап аяҡ менән терәлеп тороу өсөн уйым уйылған. Артабан кинлеге 5 сантиметр, оҙонлоғо 5 метр булған, сей килеш ат тиреһенән үрелгән яҫы кирәм (ҡайыш) алынған. Уның ике осонда элмәк яһалған. Башҡорт ошо ике уйымға менеп, ҡайыш менән ағасты һәм үҙен бил тәңгәленән уратҡан. Ошо бейеклектә кирәмде әләктергәс, уға арҡаһы менән терәлеп, артабан ағаста яңы уйымдар яһаған һәм аяҡтары менән ҡабат уларға баҫып күтәрелеп, бер һиңғай ҡайышты ла күтәргән. Кәрәкле бейеклеккә еткәс, ул ағасҡа баҫып тороу өсөн махсус ҡулайлама - ағас аяҡ бәйләгән. Ошо ҡулайламаға баҫып, ул үҙен бил тәңгәленән ағасҡа ҡайыш менән нығытҡан да, бал алырға тотонған.

Тире кирәме бик ҡиммәт булғас, ярлыраҡ башҡорттар уны йүкәнән үргән. Ағас аяҡ һәр саҡ ағасты ҡырҡҡанда уның формаһына тура килтереп бөгөлгән формала эшләнгән, өҫкө яғында баҫып тороу майҙансығы, остарында киртек булған. Улар ярҙамында ул ағасҡа бәйләнгән.

Ҡыуышта бал ҡорттары урынлашһын өсөн уйым яһағанда махсус ҡорамалдар файҙаланылған: ҙур һаплы бәләкәй балта; махсус тимер бөрөҙ, бағау, терпе, йышҡы **(һүрәттәр)**.





Умартасының бәләкәй балтаһына туҙҙан эшләнгән махсус һауыт - балта ҡын кейҙерелгән. Ул балтаны йә тулыһынса, йә уның өҫтән ике өләшөн генә ҡаплаған **(һүрәт)**.

**(Дауамы бар).**

***✓ Интернат минең үҙем өсөн иң элек бөтә республиканы үтә күреү майҙансығы булыуы менән әһәмиәтле. Синыфташтарымдың ҡайһыһы ҡайһы яҡтан килеүенә ҡарап, һәр төбәк кешеләренең менталитетын айырырға өйрәндем.***



# ТОРМОШТА ҮҘЕҢДЕ

## халҡыңа, туған телеңә

**1944 йылдың 25 мартында РСФСР Халыҡ Комиссарҙары Советы Башҡортостан Өлкә Комитеты бюроһының башҡорт балалары өсөн интернат асыу тураһындағы ҡарарын раҫлай. Өфөнөң 9-сы урта мәктәбе эргәһендә эшләй башлаған уҡыу йорто шул уҡ йылдың 1 сентябрендә тәүге 47 уҡыусыһын ҡабул итә. Мәктәптең уҡыу корпусы Зенцов урамындағы 49-сы йортта булһа, ятаҡ Лесопильная урамы, 34-се йорт адресы буйынса 5-се китапхана бинаһында урынлаша. Шулай итеп, ун ике меңдән ашыу сығарылыш уҡыусыһы өсөн икенсе йорт булған легендар уҡыу йортоноң, Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатының, тарихы башлана.**
**Бөгөн беҙҙең редакцияла ҡунаҡта республикала билдәле шәхестәр, 1971-1975 йылдарҙа гимназия-интернатта белем алған драматург, журналист, тәржемәсе, сценарист, яҙыусы Сәрүәр Рәшит ҡыҙы СУРИНА, театр һәм кино актеры, режиссер Әлмира Шәриф ҡыҙы ҠЫУАТОВА һәм 1985-1987 йылдарҙа уҡыған "Йәшлек" гәзитенең баш мөхәррире Артур Хәсән улы ДӘҮЛӘТБӘКОВ.**

**Һеҙ республикала билдәле шәхестәр, ә шулай ҙа гәзит уҡыусыларға бер аҙ үҙегеҙ, тыуған төбәгегеҙ, атай-әсәйегеҙ, һеҙҙе таныулы, данлы иткән ғәмәлдәрегеҙ тураһында һөйләп үтһәгеҙ ине...**

**Сәрүәр Рәшит ҡыҙы:** 1957 йылда Күгәрсен районының Үрге Һаҙ ауылында тыуғанмын. Етеболаҡ мәсетендә ике ауылға имам-хатиб булып торған Ғәйнетдин хәҙрәт Ибраһимовтың бүләсәре булам. Атайым Рәшит Мәзитов әле лә, 94 йәшендә, ауыл мәсетенең имамы.

Мәктәптән һуң Башҡорт дәүләт университетының филология факультетында уҡыным. Хеҙмәт юлым баштан аҙағына тиклем БСТ-ла - республика телевидениеһында үтте. Ҡырҡ йыл! Студент саҡтан уҡ эшләй башлағайным, диплом алғас, редактор итеп саҡырҙылар. Интернет киңлектәрендә мин әҙерләгән меңгә яҡын төрлө документаль фильмдар, репортаждар йөрөй. Төп эшемдән айырылмайынса, "Аҡбуҙат" журналында, Башҡорт дәүләт академия драма театрында, "Китап" нәшриәтендә, "Киске Өфө" гәзитендә лә эшләнем. Тиҫтәгә яҡын китабым донъя күрҙе. Драматург, балалар яҙыусыһы, сценарист булараҡ яҙышам. 2004 йылда Салауат Юлаевтың тыуыуына 250 йылға ҡарата яҙылған "Салауат йыйыны" өсөн сценарий - иң күләмлеһе һәм әһәмиәтлеһе булғандыр. Был байрамда синыфташым Әлмира Ҡыуатова менән "йыйын" төшөнсәһен һәм мәғәнәһен халыҡҡа ҡайтарҙыҡ.

**Артур Хәсән улы:** Ейәнсура районы Үтәғол ауылында 1971 йылда тыуғанмын. Уҡырға Ибрай мәктәбенә барҙым, артабан ғаиләбеҙ Иҙәш ауылына күсте. Атайым мәктәп директоры ине, ул заманда партия етәкселәрҙе шулай урындан урынға күсереп йөрөттө бит.

Юғары белемде Башҡорт дәүләт университетында алдым. Авиация институтына ингәйнем тәүҙә, оҡшатманым, күңелемә ятманы. Электрик һөнәре алып, моторҙар эшләү заводында хеҙмәт юлымды башланым да икенсе йылына БДУ-ға уҡырға барҙым. Хеҙмәт юлын "Йәшлек" гәзитендә башланым. Туғыҙ йыл эшләгәндән һуң, "Аманат"ҡа мөхәррир итеп ҡуйҙылар. Унда дүрт йыл эшләп алдым, ә "Йәшлек"те 2006 йылдан етәкләйем.

**Әлмира Шәриф ҡыҙы:** 1957 йылда Ейәнсура районының Эткол ауылында тыуғанмын. Дворян Ҡыуатовтар нәҫеленәнмен. Ата-әсәһе репрессияға эләгеп, атайым сабый саҡта етем ҡала. Ғүмер буйы малсылыҡта эшләне, мин дә уға һыбай йөрөп көтөү көтөшә инем. Һуғыштың бөтә ауырлыҡтарын күрһә лә, башынан үткәндәрен бер ваҡытта ла һөйләмәне.

Интернаттан һуң Өфө дәүләт сәнғәт институтында профессор Фәрдүнә Ҡасим ҡыҙы класында уҡыным. Ул туғыҙ кешене генә һайлап алды. Конкурс ҙур булды - бер урынға егерме ике абитуриент дәғүә иткәйне. Мәктәптә уҡығанда Сәрүәрҙең "Ғәрәп" тигән пьесаһын сәхнәләштергәйнек, тәүге сәхнә тәжрибәм булғас, миңә һынау тотоуы еңелерәк булғандыр, тим. Эште Салауат башҡорт драма театрында актриса булып башланым. Артабан ижад юлым "Сулпан" Сибай балалар театрында дауам итте. Сибай филармонияһын ойоштороусыларҙың береһе һәм унын тәүге художество етәксеһе булыу бәхете тейҙе. 1994 - 2001 йылдарҙа эшләү дәүерендә көслө коллектив тупланды, утыҙға яҡын программа ижад иттем. Бөтә Рәсәй, халыҡ-ара конкурстарҙа ҡатнаштыҡ, Санкт-Петербург, Екатеринбург, Пермь, Ҡаҙан, Ҡурған, Белгород ҡалалары сәхнәләренә сыҡтыҡ, Үзбәкстан, Ҡаҙағстан, Франция, Греция илдәрендә сығыш яһап, башҡорт сәнғәтен таныттыҡ.

**Өфөгә, 1-се интернат-мәктәпкә, уҡыуға килеүегеҙ тарихы менән дә таныштыраһығыҙ инде...**

**Сәрүәр Рәшит ҡыҙы:** Ауылда һигеҙ йыллыҡ ҡына мәктәп булғас, атай-әсәйемде мине Өфөгә интернат-мәктәпкә ебәрергә күндерҙем. Күрше Мәксүт ауылына алама юлдан йөрөп уҡыу, мәктәп янындағы иҫке интернатта ыҙалап йәшәү ҡыйын булыр ине. Ул осорҙа ауылыбыҙҙан арыуыҡ бала 1-се интернат-мәктәптә белем алды, мин дә уларға ҡушылып киттем.

**Артур Хәсән улы:** Иҙәштә мәктәп һигеҙ йыллыҡ ҡына булғас, ситкә китергә тура килде шул миңә лә. Сибайға педагогия училищеһына барырға хыялланып йөрөнөм дә Өфөләге әлеге интернат-мәктәпте һайланым. Бәлки, атайым шулай кәңәш иткәндер, хәҙер онотолған инде. Имтихан менән ҡабул иттеләр. Ул саҡта кешенең күплеге аптыратты - интернат алды һабантуй майҙанын хәтерләтә ине. Сәхнәләрҙә генә күргән Азат Айытҡолов та улын алып килгәйне.

**Әлмира Шәриф ҡыҙы:** Ауыл мәктәбендә алтынсы класты бөткәс, интернатҡа барам, тип, үҙем теләк белдерҙем. Ул ваҡытта беҙҙең ауыл балалары күпләп унда уҡый башлағайны. Улар каникулға ҡайтҡанда "городской" булып, үҙҙәрен әллә кемгә ҡуйып йөрөй торғайны. Ул заманда хәҙерге шикелле ярты ауыл Стәрлетамаҡта, икенсе яртыһы Өфөлә түгел, ултыраҡ булды халыҡ. Кешенең ситтә йөрөп ҡайтыуы оло ваҡиға ине. Шуға, бәлки, күҙ ҡыҙып киткәндер инде. Өфөгә барып, имтихандар бирҙек. Саҡырыу ҡағыҙы килде. Уҡырға китәм, тип әҙерләнеп йөрөгән булам, тик әсәйем "Юҡ, бармайһың, кем иҙән йыуа, кем мал ҡараша?" - тине лә ҡаршы төштө. Кинйә баламын, ағай-апайҙарым ситтә. Улар ҙа өгөтләп ҡарай әсәйҙе. Шунда атайым: "Уҡырға бара Әлмүш", - тип киҫеп үҙ һүҙен әйтте. Ул мине, Әлмүш, ти торғайны. Әсәйем башҡа ҡарышманы. Бына нисек булған элек ир һүҙе, атай абруйы.

**Абруйлы, даны киң таралған мәктәп-интернатта, баш ҡалабыҙ Өфөнөң үҙендә уҡыу һеҙгә нимә бирҙе?**

**Сәрүәр Рәшит ҡыҙы:** Дөрөҫөн әйткәндә, Өфө ул заманда башҡортто кәртә артынан да индермәгән ҡала ине. Беҙҙең, ауыл балаларының, шундай ҡырыҫ ҡалаға килеп, белем алып, ниндәйҙер үрҙәр яулауы, әлбиттә, маҡтауға ла лайыҡтыр ул, тип уйлайым хәҙер.

Интернат минең үҙем өсөн иң элек бөтә республиканы үтә күреү майҙансығы булыуы менән әһәмиәтле. Синыфташтарымдың ҡайһыһы ҡайһы яҡтан килеүенә ҡарап, һәр төбәк кешеләренең менталитетын айырырға өйрәндем. Хәҙер хаталанмайынса, кемдең ҡайҙан икәнен тәүге осрашыуҙа уҡ әйтә алам. Күп дуҫтар таптым. Беҙҙе иң элек шәхес, буласаҡ милли кадр итеп тәрбиәләнеләр, тормош һуҡмағынан үткәндә Аллаһ Тәғәлә биргән һәләттәрҙе юғалтмағыҙ, атай-әсәйегеҙ йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килтермәгеҙ, интернаттың данын сығармағыҙ, тип тәрбиәләнеләр, ғүмерлек һабаҡ бирҙеләр.

**Әлмира Шәриф ҡыҙы:** Беҙҙе бик йыш опера һәм балет театрына йөрөттөләр. "Салауат Юлаев" операһын өс тапҡыр ҡарағанмындыр. Мәғәфүр Хисмәтуллин: "Ниндәй ҡара йылан саҡты һине, Әминәм..." - тип йырлаһа, тәндәр земберләп китер ине. Кластағы бөтә ҡыҙҙар ҙа моңло, ә минең ундай һәләтем юҡ. Шуға ҡарамай, "Әминә"не йырлап йөрөнөм.

Мәктәпкә бармаҫ борон уҡ артис буласағымды белә инем. Барлы-юҡлы аҡсаларын йыйып алам да, театрға алып китә инем ҡыҙҙарҙы. Музейҙарға йөрөнөк, ҙур-ҙур шәхестәр менән осрашыуҙар ойоштоpолдо, БДУ-нан килеп, психологик тестар үткәрерҙәр ине.

Баш ҡалала интернат тормошо бай эстәлекле булды. Тағы бер шәп яғы - башҡортса насар белгән балаларға телде өйрәтте. Беҙҙең класта Нефтекаманан татар телле малай булды, русса уҡып, башҡортсаны белмәгәндәр ҙә бар ине. Саф башҡортса һөйләшә башланылар. Аҙаҡтан осрашҡанда уларҙың тел таҙалығына аптырарлыҡ ине. Башҡа телдәрҙән ингән паразит һүҙҙәрҙе бөтөнләй ҡулланмай һөйләшә улар.

Интернат дисциплинаға өйрәтте: тораһың, урыныңды йыяһың, физик күнегеүҙәргә баҫаһың - тотош көн билдәләнгән тәрбип буйынса үтә. Телһөйәрлек, илһөйәрлек бирҙе был интернат-мәктәп. Уҡытыусыларыбыҙ үҙ эштәренә мөкиббән киткән кешеләр ине. Уларҙан беҙ ошо сифаттарҙы алдыҡ, тип уйлайым. Башлағанһың икән, аҙағына тиклем алып барып еткер!

**Артур Хәсән улы:** Август аҙағында Өфөгә яңғыҙым, үҙем генә, сығып киттем. Таныш бер кешем юҡ. Иҫәнғолда этешә-төртөшә саҡ-саҡ автобусҡа ултырҙым. Өфөгә төнләтеп, ун бер - ун икеләр тирәһендә килеп еттек. Барыр урын юҡ, ҡаланы йөрөй ҙә белмәйем. Юлда уҡ интернатҡа барған кешеләр менән танышып алғайным, уларға эйәрҙем. Шулай, баштан уҡ интернат үҙаллылыҡҡа өйрәтте, тип әйтә алам.

Ысынлап та, билдәле шәхестәр менән осрашыуҙар йыш булды. Гимназиянан сыҡҡандар араһында ла ундайҙар күп бит инде. Шул сараларҙан репортаж яҙа инем. Тик уларҙы бер баҫмаға ла ебәрмәнем. Яҙышыуға, журналистикаға килеүемә табаҡ-табаҡ һағыныу хаттары яҙыуым да булышлыҡ иткәндер. Һәр булған хәлде, көндәлек алып барғандағы шикелле, теркәйем унда.

Ике ай үттеме-юҡмы, интернатты ташлап, ауылға ҡайтып китергә булдым. Атайым өгөтләп ҡалырға күндерҙе. Аҙаҡтан инде һағышҡа бирелеп ултырырға ваҡыт та ҡалманы - төрлө түңәрәктәр, спорт секциялары эшләй, нимә теләйһең, шуның менән шөғөлләнергә мөмкинлек бар. Иҙәштә мин ҡурайҙа уйнарға хыяллана инем, әммә ауылда бер ҡурайсы ла булманы. Ҡырҙан ҡурай йыйып алып ҡайтып, үҙем һыҙғыртырға өйрәндем. Бәхетемә күрә, Әхмәтшәриф Яҡупов атлы яңы уҡытыусы килде мәктәпкә, ул уйнай белә ине. Миңә бер-ике көй өйрәтте. Гимназияла ҡурай ансамбленә йөрөп, оҫтарып алдым. Ҡурай түңәрәген Юлай Ғәйнетдинов алып барҙы.

Баш бала булараҡ, шулай Өфөгә юл ярғайным, артымдан тағы дүрт туғаным интернатта уҡыны. Әлеге ваҡытта һеңлем Альбина Кайбышева гимназия-интернатта башҡорт теленән уҡыта. Минең ҡәйнәм, уның ҡыҙы - ҡатыным да унда уҡығандар. Үҙебеҙҙең ҡыҙыбыҙға ла ул бәхет тейҙе. Бына шундай үҙенсәлекле династия барлыҡҡа килде был интернат-мәктәптә.

**Мәктәп йылдары хәтирәләренә ҡағылғанда, иң элек нимә иҫегеҙгә төшә, ниндәй ваҡиға күңелегеҙгә бигерәк тә ныҡ уйылған?**

**Сәрүәр Рәшит ҡыҙы:** Физика уҡытыусыһы, интернатта завуч вазифаһын алып барған Мөхәмәт ағайҙың ҡапыл үлеп китеүе ныҡ иҫтә ҡалған. Ул беҙҙең класта дәрес алып барманы, шуға уны ситтән генә белә инек. Хушлашырға табутын тышҡа, мәктәп алдына, ҡуйҙылар. Бөтәһе лә тәгәрәп ятып илай. Үлгән кешене тәүгә күреүем. Табутта һылыу, йәп-йәш кеше ята. Әллә нисә тапҡыр барып ҡараным. Матур ағай нишләп үлеп ҡуйҙы икән, тип аптырандым. Ҡапыл йөрәге тотҡан икән. Һуңынан белеүемсә, Мөхәмәт Ғәтиәт улы Мозафаров бик ҙур башҡорт патриоты булған, мәктәп өсөн дә, халҡыбыҙ өсөн дә байтаҡ эштәр башҡарған. Интернатта ниндәйҙер яҡшы үҙгәреш күрһәм, Мөхәмәт ағай ҡалай ҡыуаныр ине, тип уйлай торғайным аҙаҡ.

**Әлмира Шәриф ҡыҙы:** Мине, ауыл кешеһен, колхозсы балаһын шаҡ ҡатырғаны шул булды: өс ҡатлы ҙур мәктәп, линейкаға сығып баҫҡан бихисап уҡыусы, торба уйнатып, барабан һуғып, байраҡ сығаралар - бөтәһе лә иҫ киткес матур. Йылдар үткәс, саралар ойошторғанда, Ҡыуатоваға массовость кәрәк инде ул, ти торғайнылар. Моғайын, ошо тәьҫорат эшемдә сағылғандыр ҙа инде.

Тыуған йортто, атай-әсәйҙе, туғандарҙы, ҡайындарҙы, тауҙарҙы, йондоҙло төндәрҙе өҙөлөп һағыныу мәлдәре онотолмай. Хатта, "Тыуҙырғас, мине нимә тинең, әсәй? Китһен, тинеңме ситкә, Янһын, тинеңме утта..." тип шиғыр ҙа сығарҙым. Бүлмәлә егерме ҡыҙ йәшәйбеҙ. Йоҡларға ятҡас, ипләп кенә беребеҙ һыҡтай башлаһа, бөтәбеҙ сеңләп иларға тотона инек.

**Артур Хәсән улы:** Мәктәп йылдарындағы һәр ваҡиға иҫтә. Беҙ, ейәнсуралар, ауылыбыҙға Ырымбур аша ҡайта торғайныҡ. Ырымбур - Ҡыуандыҡ электричкаһы йөрөнө. Каникулға бер көн булһа ла алданыраҡ ысҡыныр өсөн ғариза яҙабыҙ. Сәбәбен уйлап сығарабыҙ. Дөрөҫөн әйткәндә, алдашабыҙ. Көндөң нисек тап килеүенә ҡарап, "Ырымбур - Ҡыуандыҡ электричкаһы календарҙың тик таҡ көнөндә генә йөрөй, йә, киреһенсә, йоп датала, тип яҙабыҙ. Сәрүәр Рәшит ҡыҙы, Әлмира Шәриф

ҡыҙы, телгә иғтибар ҙур булды, тиҙәр. Ә беҙҙең заманда, киреһенсә, руссаға баҫым яһанылар. Линейкалар, саралар русса үтте. Балаларҙың үҙ-ара русса аралашырға тырышыуына мин, ауылдан килгән малай, аптырай торғайным.

**Мин үҙем дә - интернат балаһы, 1973-1979 йылдарҙа Баймаҡ интернат-мәктәбендә уҡыным. Беҙҙең өсөн тәрбиәселәр, уҡытыусылар икенсе әсәй урынында булды. Миңә ҡалһа, шундай уҡ мөнәсәбәт бөтә интернат-мәктәптәр өсөн хас ине ул ваҡытта...**

**Сәрүәр Рәшит ҡыҙы:** Атай-әсәй урынына уҡ ҡуймаһаҡ та, шәхес булараҡ юғары баһалай инек уларҙы. Уҡытыусыларҙың иң-индәре - тренерыбыҙ Рәүеф Ғәзиз улы Кәримов, уны Старик, тип йөрөттөк, легендар шәхес ине. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Фәрзәнә Фәйез ҡыҙы Абдуллинаны яраттыҡ. Интернатта тәрбиәселәрҙең, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының роле бик юғары булды. Фәрзәнә Фәйез ҡыҙы күпме әҙиптәргә юл асты - Гөлсирә Ғиззәтуллина, Йомабикә Ильясова, улар иҫәбендә мин үҙем дә уның һабаҡтарын алдым. Йәндәре йәннәттә булһын.

**Әлмира Шәриф ҡыҙы:** Беҙ спорт класында уҡыныҡ. Шуғамылыр, тренеребыҙ яҡынараҡ булды. Рәүеф ағай, Старик, дәрестәр бөткәс, ашап сығыуыбыҙҙы көтөп торор ине. Тиҙ генә кейемде алыштырабыҙ ҙа тренировкаға йүгерәбеҙ. Дәрестәрҙе әҙерләп бөткәс, киске аштан һуң - тағы күнекмәләр. Башҡалар иртәнсәк етелә тора, ә беҙ бер сәғәткә алда - алтыла. Ҡыҙҙар - Спорт һарайына тиклем, малайҙар Ауыл хужалығы институтына хәтлем йүгереп барып урай. Ярыштарҙа йыш ҡатнаштыҡ. Ғөмүмән, буш ваҡытыбыҙ спорт менән Рәүеф ағай янында үтте. Ә тәрбиәсебеҙ менән аралашыу һирәк тейҙе, уға асылып китә алманыҡ. Шулай ҙа Фәниҙә Мәхмүт ҡыҙы Байрамғоловаға рәхмәтлебеҙ.

**Артур Хәсән улы:** Тәрбиәселәрҙең дә төрлөһө була инде ул. Дөйөмләштереп әйткәндә, уларҙың эше баһалап бөткөһөҙ. Иҫемдә, эксперимент рәүешендә тәрбиәсеһеҙ класс булдырып ҡарағайнылар, бынан бер ни ҙә килеп сыҡманы. Тәрбиәсе Клара Вәли ҡыҙы Бикбулатова актрисалар шикелле кейенеп йөрөнө, үҙенең юғары мәҙәниәте менән балаларға өлгө ине. Гөлсирә Фазулла ҡыҙы Юлдыбаеваның класы тәртип, таҙалыҡ буйынса алдыңғылыҡты бирмәй торғайны. Мәктәп директоры, аҙаҡ күп йылдар башҡорт телен һәм әҙәбиәтен уҡытҡан Сажиҙә Хәмәтйәр ҡыҙы Зайлалова тураһында ишетеп кенә беләбеҙ. Ул сығарылыш уҡыусыларын үҙе етәкләп йөрөтөп, Өфө вуздарына ғына түгел, Мәскәү, Ленинград һәм башҡа ҡалаларҙың юғары уҡыу йорттарына индергән.

**Һабаҡташтарығыҙ араһынан тағы кемдәр һайлаған һөнәре буйынса шулай күтәрелә алды йә етәксе булып китте? Бала саҡ дуҫлығығыҙ дауам итәме, мәктәбегеҙгә йыш бараһығыҙмы?**

**Сәрүәр Рәшит ҡыҙы:** Үкенескә ҡаршы, ситкә китеүселәр күп булды класыбыҙҙан. Әкрәм Ғәббәсов юристлыҡҡа уҡыны, "Ассы" шифаханаһы етәкселегендә эшләне. Булат Хәбибуллин "НефАЗ" заводының генераль директоры урынбаҫарына тиклем күтәрелде. Рафаил Хәсәнов - Күмертауҙа билдәле инженер-конструктор. Рәфҡәт Шәрипов - Өфө Моторҙар эшләү берекмәһендә инженер. Рәғинә Ишмырҙина - балалар баҡсаһы мөдире, Альмира Азаматова мәктәптә завуч булды. Әмир Сынбулатов йүгереү буйынса Рәсәй чемпионы исемен яуланы. Ул ғүмерен хәрби хеҙмәткә бағышланы, Афған, Чечен һуғыштарын үтте, полковник званиеһына етте. Уны башҡорттар араһынан сыҡҡан күренекле офицерҙар рәтенә индерергә мөмкин. Сер тотоп һөйләп еткермәһә лә, Әмирҙең юғары хәрби белгес булыуын, башҡаларҙы өйрәтеп йөрөгәнен беләбеҙ. Үкенескә ҡаршы, ковидтан мәрхүм булып ҡалды. Мәктәпте тамамлауҙың илле йыллығының икенсе көнөн Күгәрсен районында, уның тыуған Ҡалдар ауылында үткәрҙек, тормош юлына бағышланған экспозиция астыҡ. Ҡаһарман синыфташыбыҙҙың исемен райондың күренекле кешеләре араһына индереү, мәңгеләштереү буйынса эш алып барабыҙ.

Эйе, интернат атай йорто шикелле үҙенә тарта. Ә тартып торған көс, магнит иң элек - Рәүеф Ғәзиз улы Кәримов, Старик тураһындағы иҫтәлектәребеҙ.



# ТАБЫРҒА ТЕЛӘҺӘҢ, хеҙмәт ит!

**Әлмира Шәриф ҡыҙы:** Йыл да осрашып торабыҙ, юбилейҙар, башҡа төрлө ваҡиғалар айҡанлы ҡапыл ғына йыйылып та алабыҙ. "Наш спортивный 10 В" тигән чатыбыҙ бар. 28 кеше тамамлағайныҡ мәктәпте, бишәүебеҙ был донъялыҡтан китте инде. Берәүебеҙ Италияла. Уның менән бәйләнештәбеҙ. Башҡалар кеүек, өс йә биш йылға бер түгел, ә йыл да йыйылышыуыбыҙҙың сәбәпсеһе - тренерыбыҙ Рәүеф Ғәзиз улы Кәримов исемендәге призға интернат-гимназияла үткәрелгән көҙгө кросс. Уны Стариктың уҡыусыһы, еңел атлетика буйынса СССР спорт мастеры, Бөтә Союз һәм Бөтә Рәсәй ярыштарында күп тапҡыр еңеүсе Фәйзулла Ғабдулйән улы Абдрафиков ойоштора. Беҙҙе почетлы ҡунаҡ итеп саҡыралар.

**Артур Хәсән улы:** Һабаҡташтар менән даими осрашып торабыҙ. Класташтарыбыҙ араһында бөтәһе лә тип әйтерлек тормошта үҙ урынын тапҡан. Флүр Саламатов төрлө урындарҙа етәксе булып эшләне. Азамат Кәримов - республика Юғары суды судьяһы, Руслан Рамаҙанов та хоҡуҡ органдарында яуаплы вазифалар биләй. Ғөмүмән, республика буйлап ҡайҙа ғына барһаң да, хатта ситтә лә, төрлө яуаплы урындарҙа үҙебеҙҙекеләрҙе, интернатты тамамлағандарҙы осратырға мөмкин. Беҙҙе бит берҙәмлек рухы тарта бер-беребеҙгә.

**Интернат-мәктәптәрҙең йөҙө, статусы башҡасараҡ хәҙер. Шулай ҙа дөйөм шарттар, тиҫтә йылдар элек һалынған белем биреү системаһы, уны ойоштороу алымдары һаҡланған. Тел, милли кадрҙар мәсьәләләре киҫкен торған бөгөнгө көндә Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты өсөн яуаплылыҡ тағы ла арта ғына, минеңсә. Һеҙ ошо фекер менән ризаһығыҙмы?**

**Сәрүәр Рәшит ҡыҙы:** Мәктәпкә нигеҙ һалынған осорҙа тәүге уҡытыусыларҙың береһе Зәйнәп Биишеваның бер туған апаһы Хәлимә Абдулла ҡыҙы Ҡорбанаева-Биишева була. Ул башҡорт балаларын райондарға барып, үҙе йыйып йөрөй. Рухлы, белемле башҡорт зыялылары быуынын тәрбиәләгән абруйлы остаз ул. Шул традиция, йәғни, "Булһаң, алтын бул (башҡорт бул), булмаһаң, йөрөмә бында", тигән ишара һаҡлана тәрбиә процестарында. Башҡорт мәктәбе булғас, белем алыу талаптарынан тыш, милли мөхит йәшәһен ул. Быйыл сығарылыш тантанаһына 20-се Башҡорт ҡала гимназияһына барғайным, сараны бер көсөргәнешһеҙ, шулай тейеш һымаҡ матур итеп башҡортса үткәрҙеләр. Шундай мөхит кәрәк ул һәр башҡорт мәктәбендә.

**Әлмира Шәриф ҡыҙы:** Тормошом, яҙмышым менән ҡәнәғәтмен. Үҙ урынымды таптым, тип әйтә алам. Һәм, әлбиттә, бының өсөн мин интернатҡа мең-мең рәхмәтлемен. Фәрзәнә Фәйез ҡыҙы, Сәрүәр яҙған пьесаны сәхнәгә ҡуйһың, тигән талабы менән миңә этәргес биргән. Тимәк, режиссер булып китеүемдә уҡытыусымдың, интернаттың роле бик ҙур. Беҙгә тәрбиә бирҙеләр, ҡарар ҡабул итергә, анализ, һығымта эшләргә өйрәттеләр. Пенсияға сыҡҡас, гимназия-интернатҡа йышланым мин. Рәхмәт йөҙөнән бушлай спектакль ҡуйырға ине теләгем. Илнур Рифат улы Сәлихов директор булып килгәс, уртаҡ тел таптыҡ. Күрә йөрөйөм, башҡорт теле уҡытыусылары элекке традицияларҙы тота, телгә һөйөү, рух тәрбиәләй. Барыбер ҙә заманалар башҡа хәҙер. Башҡорт теле уҡытыусыһының дәрәжәһен күтәрергә кәрәк. Мин бер ҙур идея менән янам - беҙгә башҡорт телен һаҡлау, өйрәнеү маҡсатында Халыҡ фонды булдырырға кәрәк. Унан башҡорт теле уҡытыусыларына ла өҫтәп түләп булыр ине. Үҙем пенсиямдан ай һайын мең һум күсереп торорға әҙермен.

**Артур Хәсән улы:** Элек тел өйрәнеү өсөн мөхит бар ине. Хәҙер бит гаджеттар заманы. Улар баҫып алып бара донъяны, кешене үҙенә буйһондора. Ошо шарттарҙа ҡайҙа ла тел мәсьәләһе бик ауыр тора. Уҡыу программаһы сиктәренән дә сығып булмай. Уҡыусыны Берҙәм дәүләт имтихандарына әҙерләү беренсе планға ҡуйыла. Интернатта милли мөхитте юғалтмаҫҡа кәрәк - иң мөһиме шул. Үҫеп килгән быуында телгә ҡарата һөйөү тәрбиәләргә кәрәк, башҡортса һөйләшеү модаға инһен ине ул.

**Интернаттың бөгөнгө быуын уҡыусыларына әйтер һүҙегеҙ, еткерер аманатығыҙ...**

**Сәрүәр Рәшит ҡыҙы:** Интернат ул - ҙур трамплин ғына, артабанғы яҙмышың үҙ ҡулыңда. Әгәр һин биргән нәсихәттәргә тоғро булмаһаң, нисек аҙаҡтан мәктәбең тупһаһына аяҡ баҫырһың, уҡытыусыларың йөҙөнә бағырһың? Был буталсыҡ донъяла, тормош океанында тапсыҡ, бер юнышҡы, йә иһә сүп-сар булып юғалып ҡалмаҫ өсөн, туған телебеҙҙән, туған халҡыбыҙҙан айырылмаһындар ине. Шул саҡта йөҙҙәре һәр ваҡыт яҡты булыр. Ҡайҙа ғына, кем генә булып эшләһәләр ҙә, иң элек халҡым өсөн, туған телемде һаҡлау, үҫтереү өсөн нимә эшләнем әле, тип, үҙ гәмәлдәренә баһа бирһендәр.

Уҡытыусыларың йөҙөнә нисек бағырһың, тигәндән, тормоштан фәһемле бер миҫал килтерәйем. Башҡорт академия драма театры менән тел яҙмышына арналған вербатим, йәғни документаль спектакль өсөн материаль йыйырға Йылайыр районына барҙыҡ. Ун ике ауылда 15 - 95 йәшлек 208 кеше менән һөйләштек. Уратып, суратып тормай, уларға: "Һин башҡорт телен үҫтереү йәки уны үлтереү өсөн нимә эшләнең? Балаларың башҡорт телендә һөйләшәме (ни өсөн һөйләшмәй)?" - тигән кеүек һорауҙар бирҙек. Шунда ғүмере буйы башҡорт телен уҡытҡан бер апайҙың һөйләгәндәре тетрәндерҙе.

Уны элекке уҡыусылары, мәктәпте тамамлауҙарына 35 йыл айҡанлы, ҡунаҡҡа саҡыра, ҙурлап бүләктәр бирәләр. Апай уларҙан "Кемегеҙҙең балалары башҡортса һөйләшә?" тип һорай. Береһенең дә балалары туған телдә һөйләшмәй икән. "Кемегеҙ "Агизел" журналын алдыра?" тигән һорауы ла тынлыҡта эленеп ҡала. "Кемдең өйөндә башҡорт китаптары бар?" тигәнгә бер-ике генә ҡул күтәрелә. "Минең һеҙҙе уҡытыуымдың, һеҙҙең мине саҡырып ултырыуығыҙҙың хаҡы - баҡыр өс тин. Мин һеҙҙең алдығыҙҙа гәйеплемен, сөнки һеҙҙә әсә теленә һөйөү тәрбиәләй алмағанмын", - тип илай оло уҡытыусы. Ошондай хәлгә ҡалмаһын ине гимназия-интернат уҡытыусылары ла, уны тамамлаған уҡыусылар ҙа.

**Әлмира Шәриф ҡыҙы:** Беҙ - коммунизмға өмөт иткән быуын кешеләре. Ул заманда берләштереү, коллективизм көслө ине. Йыл да 7 ноябрҙә, Бөйөк Октябрь байрамы көнөндә, демонстрацияға сыға инек. Уны ҡайҙан алғандарҙыр, бөтәбеҙ ҙә милли кейем кейеп үтә инек майҙандан. Хәҙер улай түгел. Ә ниңә гимназия-интернатҡа уҡырға инергә килгәндә, малай-ҡыҙҙарға башҡорт кейемендә булмаҫҡа? Интернатты тамамлағанда егеттәр - ҡурай уйнай, бөтәһе лә башҡортса тыпырҙатып баҫа белһен.

Быны нимәнән сығып әйтәм? Сочиҙа казак балалары өсөн махсус мәктәптә уҡыусыларҙың Шолоховтың "Тымыҡ Дон" романындағы шикелле кейенеп йөрөгәндәрен күрҙем. Һорашып, был уларҙың уҡыу формаһы икәнен белгәс, һушым китте. Тимәк, теләгәндә, булдырып була. Донъяла биш кенә моңло тел бар. Улар иҫәбендә - башҡорт теле. Йырлы, моңло телеңде белеү кәрәк. Үҙ телен белгән кешенең арҡа һөйәге ныҡ була. Тормошта үҙеңде табырға теләһәң, юғалып ҡалмайым, асылыма хыянат итмәйем, тиһәң, халҡыңа хеҙмәт ит.

**Артур Хәсән улы:** Гимназияла уҡыу бәхетенә ирешкәндәр икән, ҡәҙерен белһендәр. Ул мәл тиҙ генә үтә лә китә. Бер ваҡытта ла гимназия-интернаттың 1-се икәнен онотмаһындар. "Әй Йола" башҡортто бөтә донъяға танытты. Шуның кеүек, халҡыбыҙҙы күтәрерлек проекттар тыуҙырһындар. Шул саҡта башҡорт теленә лә, кейеменә лә иғтибар булыр.

**Шулай итеп, Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты үҙ тарихының туғыҙынсы тиҫтә битен асты. Милли кадрҙар әҙерләү, милли рухты, телде күтәреү йәһәтенән мөһим урын тотҡан урта белем биреү йорто бөгөнгө глобаллашеү дәүерендә лә ошо асылынан тайпылмаһын, маяҡ булып торһон, тигән дөйөм фекер әйтелде әңгәмә барышында. Беҙ бының менән тулыһынса килешәбеҙ һәм гимназия-интернатының уҡытыусылар коллективына, уҡыусыларына уңыштар теләйбеҙ.**

Рәсүл БАЙГИЛДИН
әңгәмә ҡорҙо.

**✓ Алаҡайымдың итен терелəй ашап ятҡан ҡорттарҙы мин, әлбиттә, тере бирелəй күрҙем. Бер өңдө табып алһам, ҡортон сығармайынса ҡуйманым. Утын ярған ерҙән ҡәләм кеүек осло тап килтерәм дә теге тишекте киңәйтә башлайым.**

# ИСЕМЕМ - АЛАҠАЙ

(Донъяуи хикәйә)

Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ



Әммә тарих шуның өсөн дә тарих инде ул - уны үҙгәртеп тә, ҡайтанан яҙып та булмай. Шуныһы ғына хаҡ: Фәрит ағайым менән Алаҡай араһында ныҡлы дуҫлыҡ бер ваҡытта ла урынлашманы. Ә бына Әхәт ағайым менән ала һыйыр араһындағы мөнәсәбәттәр ниндәй булғандыр, уныһын әйтә алмайым. Икенсе ағайымды яҙмыш һис кенә лә аяманы. Алтымыетеме йәшендә ул умыртҡа бағанаһын һындырҙы, шунлыҡтан, Мәғнит ҡалаһында өс йыл самаһы эҙбис ҡалыпта ятты. Ҡәҙимге йүнәлеп ҡайтты ҡайтыуын, әммә башҡорт телен бөтөнләй онотҡан булып сыҡты. Шуға ла атайым уны урыҫ мәктәбе булған урынға - Ҡаҡтуғайға - ебәрергә мәжбүр булды. Әсәйемдең ҡустыһы Фәкей ағайым һәм Тайба еңгәм уны ике йыл буйы үҙ балалары менән бер рәттән аҫраны һәм уҡытты. Күп ваҡытын ситтә үткәргәнгәмелер, ала һыйырҙың икенсе ағайыма нисек ҡарағанын һис кенә лә бәйән итә алмайым. Әхәт ағайымдың ғүмеркәйҙәре ҡыҫҡа булды: утыҙ йәшен тултырҙы ла Сибайҙың күңелһеҙ генә ҡәберлегенең бер ситендә үҙенә мәңгелек урын тапты.

Үҙемә килгәндә иһә, ала һыйыр менән бик дуҫ булдым. Ҡыш көндәрендә, иртә менән тороп, аҙбарға йүгерә һәм һыйырҙың суҡайып туңған тиҙәктәрен көрәк менән айыра торғайным. Ҡаты һыуыҡтарҙа тиҙәкте хатта балта менән дә тумырҙым, сөнки Алаҡай ята алмай интегер, тип уйланым. Ашлы һыуҙы ла үҙем алып сығарырға тырыштым, сөнки белә инем: һыуыҡта тороп өшөгән һыйыр өсөн унан да ҡәҙерлерәк ризыҡ юҡ. Сатлама һыуыҡтарҙа, бигерәк тә һыйыр быҙаулар алдынан, йыбанмайынса, баҙға төшөп, картуф сығарҙым, эреләрен урталай ярып, ятҡан хайуанымды һыйланым. Ятларға бирелгән шиғырҙарҙы йыш ҡына тәүҙә Алаҡайға һөйләп ишеттерә торғайным. Үҙем ҡатҡан тиҙәкте тумырам, үҙем ҡысҡырып һөйләйем: "Урамда буран, мин өйҙә торам..." Һыйырҡайым һөйләгәндәремде ҡолағын ҡайсылатып тыңлай, ә хәсрәтле итеп һөйләгән урындарында тәрән итеп тын ала ла уфылдаған кеүегерәк итеп таусыш сығара. Йәнәһе, минең хәлемде аңлай.

Яҙ көндәрендә Алаҡай менән бергә ҡояшта ҡыҙындым. Ул әкрен генә көйшәп тора, ә мин уның арҡаһынан бөжәктәр эҙләйем. Ошо мәлдә беҙҙең эргәгә әтәс һәм тауыҡ халҡы йыйылып китә: белеп бөткәндәр - хәҙер ем буласаҡ. Мин һыйырҙың һыртын ҡулым менән әкрен генә һыйпап барам һәм, ҡатҡан тупраҡҡа оҡшаған нәмәгә төртөлһәм, шып туҡтайым. Яҡыныраҡ килеп ҡараһам, ысынлап та, бөжәк ояһы. Тупраҡҡа оҡшап ҡатҡан нәмә - ул кипкән эрен. Шул эрендә соҡоп төшөрһәң, бәләкәй генә тишек асыла. Ана шул тишек аша тын алып, өңөнөң эсендә сәтәкәй бармаҡтан саҡ ҡына ҡайтышыраҡ йыуанлыҡтағы ҡорт йомарланып ята. Аптырап һорағаным иҫемдә: "Атай, ул бәләкәй генә тишектән һыйырҙың арҡаһына ҡорт нисек инә икән?" Атайым аңлата: "Ул тишек ҡортҡа тын алыу өсөн генә кәрәк. Һыйырҙың арҡаһына ул йәй үк инеп ултыра. Шундай эре себен була: бал ҡорто саҡҡандағы кеүек ултырып, һыйыр малының арҡаһына йомортҡаһын һала ул. Яҙға табан йомортҡа эсенән һин күргән ҡорт сыға ла инде".

Алаҡайымдың итен терелəй ашап ятҡан ҡорттарҙы мин, әлбиттә, тере бирелəй күрҙем. Бер өңдө табып алһам, ҡортон сығармайынса ҡуйманым. Утын ярған ерҙән ҡәләм кеүек осло тап килтерәм дә теге тишекте киңәйтә башлайым. Енел эш түгел был, сөнки тишек тары ярмаһы һыймалы ғына, ә ҡорт, әйткәнемсә, сәтәкәй бармаҡтан саҡ ҡына ҡайтышыраҡ. Тишекте киңәйткән мәлдә һыйыр сыҙамай ҙа китә: ҡайһы саҡта, башын ҡапыл бороп, һөҙөргә самалап ҡуя. Ҡабырғанды тишә һөҙәр - ятырһың шунда ҡанға батып, табынды ҡосаҡлап. Шулай ҙа түҙәһең инде - үҙ малың бит.

Ниһайәт, тишек ярайһы ғына киңәйә. Тапты ергә ташлап, баш бармаҡтарым менән тишектең ике яғына бөтә көсөм менән баҫамын. Бына бер заман тишектән ҡорттоң ҡара-көрән мороно күренә, унан, "шыртмырт" итеп, бүлкәтле-бүлкәтле кәүҙәһе сыға башлай. Мин баҫымды тағы ла арттырам, һәм, ахыр сиктә, "бырт" итеп ҡорт тулыһынса килеп сыға. Тотаһың да бисара ҡортто тауыҡтарға ташлайһың. Китә шунан ҡош-ҡорт араһында шау-шыу: ҡортто ике-өс тауыҡ төрлө яҡҡа тартҡыслай башлай, һәм бер йән әйәһе икенсе йән әйәһе өсөн емгә әйләнә...

Алаҡайҙы миңә бер ваҡытта ла, иртә таңдан тороп, көтөүгә ҡыуырға тура килмәне. Быны һәр ваҡыт әсәйем йә атайым эшләнә. Ә бына кис һыйырҙы ҡаршы алыуҙы, уның малайҙары - быҙауҙарын - ҡарау күберәк минең елкәгә төштө. Көнө буйы нур түгеп, хәле бөткән ҡояштың тәғәрмәсе Иген тауына ҡунырға етешһә, мин ауыл осона сыға торғайным.

Алаҡай, ғәҙәттәгесә, көтөүҙең иң башында килә. Башҡа һыйырҙар уның алдына сығырға баҙнат итмәйҙәр, сөнки беләләр: көтөү хужабикәһе быға юл ҡуймаясаҡ. Мин ваҡ мал - кәзәмәзә, һарыҡ-марыҡ - тураһында һүҙ алып бармайым, әйткәндәрем фәҡәт эре малға ғына ҡағыла. "Мэ-э-э, мэ-э-э" тип мыҡырлап килгән кәзәләр, "брә-ә-ә, брә-ә-ә" тип ларылдап барған һарыҡтар, улар артынан уйнаҡлап килеүсе бәрәстәре Алаҡайҙы, әлбиттә, үтеп китә торғайны, ә бына һыйырҙар араһында бындайҙар табылманы. Мин иҫ белгәндә, Алаҡай ауыл көтөүенең иң оло йәштәге, иң абруйлы һыйыры ине - уға ун йәш тулып килә ине инде. Малҡайҙарҙың ғүмеркәйҙәре ҡыҫҡа була бит - күбеһе йыллан артыҡ йәшәмәй. Һыйырҙар иһә иң күбендә етеһигеҙ, уҙа барһа, тиҫтә йыл йәшәй ҙә йә һуғымға һуйыла, йә Түбә баҙарында иткә һатыла.

Дөрөҫ, ситтән килтерелгән һыйырҙар, Алаҡайҙы һанға һуҡмай, үҙҙәре баш булырға маташып ҡаранылар ҡарауын, әммә беҙҙең һыйыр уларҙы урындарына ултырта барҙы. Йәй көндәренең береһендә миңә ике һыйыр араһында булған бәрелештең шаһиты булырға тура килде.

Ул көндә дуҫым Хәкимйән менән Түңәрәк һаҙ тирәһен, күпер аҫтарын ҡыҙырып балыҡ ҡармаҡланыҡ, ҡармаҡланыҡ та, эләкмәгәс, Һаҡмар түбәненә төшөп киттек. Ҡояш иң юғары нөктәгә менеп, туғайҡырҙарҙы ихласлап ҡыҙҙыра башлағанда, беҙ Бәләкәй туғайға килеп еткәйнек. Көн эсе булғанлыҡтан, бөтә мал Һаҡмар буйына төшкәйне. Һарыҡ-кәзә, эҫегә түҙмәй, ҡомға үлек кеүек тәгәрәшеп бөткәйне, ә һыйырҙарҙың ҡайһылары, тубыҡтарына тиклем һыуға инеп, ҡабаланмайынса ғына көйшәй ине. Бөтә мал Һаҡмарҙың һөҙәк уң ярына һибелгән булһа, дуҫым менән беҙ йылғаның текә һул ярында урынлаштыҡ. Үҙебеҙҙең һыйырҙы мин шунда уҡ таныным, сөнки уның ише һыйыр миңә бер ваҡытта ла осрағаны булманы. Дөрөҫ, көтөүҙә ала төҫтәге ике-өс һыйыр бар ине барлығын, әммә уларҙың "туны" Алаҡайҙыҡынан күпкә ҡайтыш икәне күҙгә ташланып торҙо. Һыйырыбыҙҙың төҫө ап-аҡ булды, яҡындан ҡараһаң, хатта ниндәйҙер күкһеллек тә төҫмөрләнде. Бына ошо аҡ ерлеккә, эре-эре итеп, һигеҙләп сөм ҡара "ямау" һалынғайны. Ямауҙарҙың береһе уның арҡа тирәһендә булды, ә ҡалғандары ҡабырғаларын биҙәп торҙо. Һәр төрлө бәләкәй ямауҙарҙың, ниндәйҙер ҡара төртөктәрҙең әҫәре лә булманы. Ҡара ямауҙарҙың ҙурлығы, тышҡы күренеше һәм урынлашыу тәртибе шундай камил булды, әгәр күрһәләр, малҡайыбыҙҙың тунына хур ҡыҙҙары ла һоҡланып туя алмаҫ ине.

Алаҡайҙың матурлығына иҫем китеп ултырһам, "мө-у-у-уу" тигәнерәк тупаҫ мөңрәү ишетелде. Был ауазды мин тәүҙә үгеҙ үкереүенә оҡшаттым. Абайлабыраҡ ҡараһам, ҡаршылағы ярҙың иң бейек урынына ҡара-көрән төҫтәге таныш булмаған һыйыр менеп баҫҡан. "Ырыҫҡол ағайҙарҙың яңы һыйыры, - тип аңлатты миңә Хәкимйән дуҫым. - Тоҡомло һыйыр! Ҡыҙылдан ҡолонло бейәгә алмаштырып алғандар. Көнөнә өс биҙрә һөт бирә". Мин был хайуанҡайға ҡурҡыу ҡатыш ҡыҙыҡһыныу менән ҡарап ултырҙым. Ысынлап та, беҙҙең яҡ һыйырҙарынан ныҡ айырылып тора ине ул. Кәүҙәһе ҙур һәм килбәтһеҙ, мөгөҙҙәре, кәкре ҡылысҡа оҡшап, өҫкә бөгөлмәй, бик алға сығып тора. Артҡы һәм алғы тояҡтары бер-береһенән шундай алыҫ урынлашҡан - бына-бына умыртҡа бағанаһы һынып китер ҙә ҡорһағы ергә барып төшөр кеүек тойола. Елене шундай ҙур - яҫтап ятҡан яҫтығымдай өс булыр. Ошо ғәжәйеп хайуандың ауыр кәүҙәһен ҡыҫҡа ғына, әммә ифрат йыуан аяҡтар күтәреп тора. Һәр аяҡтың үксә тирәһенән кәзә һаҡалын хәтерләткән бер услам самаһы йөн тырпайып тора. Был "һаҡал"дар бисараға шул тиклем килешмәй, шунлыҡтан, түҙеп торор әмәл ҡалмағас, ҡытырлатып көлөп ебәрҙем.

Тик көлөүем оҙаҡҡа барманы: килбәтһеҙ һыйыр тағы берҙе тупаҫ итеп үкерҙе лә, торған урынынан төшөп, йылғаға табан сабып китте. Ҡом өҫтөндә ятҡан ваҡ малды өркөтә-өркөтә, туптура Алаҡай торған яҡҡа сапты ул. Ярты юлды үткәс, башын аҫҡа эйҙе һәм ҡылысҡа оҡшап торған мөгөҙҙәрен һыйырыбыҙҙың ҡабырғаһына ҡаҙарға әҙерләнде. Мин шундай шөрләнем, хатта ҡурҡышымдан ыштанымдың төбөн еүешләткәнемде һиҙмәй ҙә ҡалдым.

Әммә Алаҡай килмешәктең ни өсөн сыпранлауын аңлап алғайны инде. Дошманы килеп еттем тигәндә генә, кинәт алға һикерҙе һәм, тәрән урынға әләгеп, йылға ыңғайына йөҙҙө лә китте. Йән-фарман сабып килгән дәү һыйырҙың кәүҙәһе урта биленән тәрән урынға барып төштө, а арт яғы һай урында тороп ҡалды. Ярайһы ғына көслө ағым Ҡыҙыл һыйырының кәүҙәһен ярға ҡыҫырыҡлай башланы. Бер аҙҙан һыйыр һәрмәнеп йылғаның төбән тапты һәм, сигенә торғас, ярға килеп сыҡты.

Был ваҡытта Алаҡай ярға сыҡҡайны инде. Ул көтөү урынлашҡан уйпатлыҡтың мөйөш һымағыраҡ урынына тороп, көйшәүен дауам итте. Әммә уның тынысһыҙ оҙаҡҡа барманы: дәү һыйырҙа көтөү хужабикәһенә һабаҡ биреү теләге һүрелмәгәйне әле. Ҡыҙыл һыйыры, урата биренкәреп, Алаҡайға тауышһыҙ ғына яҡынлашты. Һыйырыбыҙға ҡасыу юлын бикләне килмешәк: уң яҡтан текә яр, һулдан батҡаҡ эсендә рәхәтләнеп үҫкән таллыҡ юлын кәртәләһә, асыҡ яҡты һөмһеҙ һыйыр үҙе япты. Ала һыйыр хәлен аңланы: башын эйҙе һәм, мөгөҙҙәрен дошманына юнәлтеп, бер урында ҡатып ҡалды. Килмешәк һыйыр йәмһеҙ итеп үкерҙе лә, башын түбән эйеп, Алаҡайға ташланды.

Ике пар мөгөҙ шаҡ итеп бер-береһенә бәрелде, һәм аяуһыҙ көрәш башланды. Бер ни тиклем ваҡыт мөгөҙҙәре эләгешкән һыйырҙар төкөшкән урындарында тапанды. Икәүһе лә ер сапсыны, асыулы тауыш менән мөңрәне. Был тауышты ишеткәс, һыйырҙарҙың ҡайһы берҙәре ситкә китеүҙе хуп күрҙе, ә һуғышсаныраҡ башмаҡтар көрәш майҙаны тирәһенә йыйылды.

Көс һынашыусы һыйырҙар бер урында әллә ни оҙаҡ торманы. Дәү һыйыр башын уңға ташлағайны, мөгөҙө кипсәлгән Алаҡай шул яҡҡа ҡолап китә яҙҙы. Һыйырыбыҙҙың алғы тояҡтары ҡапыл һынғандай булды, һәм Алаҡай ике алғы тубығына сүкте. "Мөө-уууу" тип яман үкереп, килмешәк уны артҡа этәрә башланы. Ҡырсын өҫтөндә тәрән бураҙна ҡалдырып, Алаҡай артҡа шыуҙы. Ваҡыты-ваҡыты менән артҡы тояҡтары ярҙамында шыуышыуҙы туҡтатырға тырышып ҡараһа ла, бер нәмә лә килеп сыҡманы. Көслө ине Ҡыҙыл һыйыры, айһай, көслө ине! Ауырлығы ғына ла ике Алаҡайға торошло ине уның. Һыйырыбыҙҙы ярға табан өҫтөрөүен дауам итте ул. Әгәр текә урынға алып барып ҡыҫһа, Алаҡай үлемдән ҡотола алмаҫ ине. Һыйырҡайым, дошманының үлемесле мөгөҙҙәренән ҡотолорға тырышып, бер нисә мәртәбә башын уңлы-һуллы борғолап ҡараны, әммә бер нимә лә килеп сыҡманы. Эйе, урманда бер-береһенән ысҡына алмайынса һәләк булған ике мышы хәлендә ине һыйырҙар. Мин күҙ йәштәремде тыйып торманым: башымды аҫҡа эйеп, йәшел үләнгә лыпын яттым. "Үлтерҙе, үлтерҙе!" - тип һыҡтай-һыҡтай күҙҙәремде йомдом. "Ысҡынды!" "Ысҡынды-ы-ы!" "Алаҡайҙың мөгөҙҙәре ысҡынды-ы-ы!" Дуҫымдың шулай һөрәнләүен ишеткәс, мин, башымды йәһәт кенә күтәреп, күҙҙәремде арьяҡҡа төбәнем. Ҡараһам, Алаҡайым, торна кеүек кенә баҫып, көтөүҙән байтаҡ алыҫлыҡта юртып бара ине. Килмешәк һыйыр, танауҙарын тажрайтып, моронон киң итеп асты ла еңеү ауаздары сығарҙы. Әммә бөтә эре мал, уның еңеүен таныырға теләмәгәндәй, өнһеҙ генә тороуын белде.

**(Дауамы. Башы 38-39-сы һандарҙа).**

ХӘТЕРКИТАП

# ӘЛЕ ИҪТӘ ШҮЛКӘ БУЙҘАРЫНДА...



**Күренекле яҡташыбыҙ, мәшһүр композитор Хөсәйен Әхмәтовтың халыҡ ижады гәүһәренә әүерелгән киң билдәле "Тыуған ауылым" йырының тик беҙҙең яҡта ғына башҡарылған, тик үҙебеҙгә генә аңлашылған һүҙҙәре бар. Ул да булһа:**
**Әле иҫтә Шүлкә буйҙарында**
**Ҡолас киреп бесән сапҡанда.**
**Күк бәрлекәй аулап Күсәбәлә**
**Төндәрендә сыраҡ яҡҡанда...**

Тап ана шул Шүлкә, Мәхмүт, Ҡашҡат, Аҡһолтан, Мүңкә, Аҡташ, Ярмайылға, Күсәбә йылғалары буйында Буранбай, Сыңғыҙ ауылдары кешеләренең сабынлыҡтары урынлашҡан. Улай ғына ла түгел, ошо ике ауылда тыуып үҫеп, сәнғәт, мәҙәниәт, әҙәбиәт донъяһында танылыу яулаған бик-бик күптәрҙең илһам сығанағы тап ошо шишмәләрҙән баш ала. Уларҙың барыһын да теҙеп яҙа башлаһаң, ике ауыл халҡының тулы исемлеген килтерергә, бының өсөн махсус мәҡәлә яҙырға кәрәк булыр ине. Шуға күрә был яҙмала бары бер төнгә бәйле хәтирәләрҙе генә яҙып үтмәксемен.

Беҙҙең дә сабынлыҡ, йыр һүҙҙәрендә әйтелгәнсә, тап Шүлкә буйҙарында. Ғаиләбеҙ менән йылға буйында ҡыуыш ҡороп, унда ай һуҙымында ҡуна ятып бесән эшләгән саҡтар бала сағыбыҙҙан алып күңелебеҙгә ғүмерлеккә һеңеп ҡалыр хәтирәләре менән уйылған. Ғүмеремдең ул илаһи мәлдәре борон-борондан халҡыбыҙҙың йәйләүгә сыҡҡан хәтирәләренән һис айырылғыһыҙ булғанға илаһи хозурлыҡ булып онотолмай, ҡурай моңо яңғырауы була, хәтерем ҡуҙҙары ялпылдай ҙа китә.

Юғарыла һанап үтелгән йылғалар, шишмәләр буйындағы мөғжизәләр тынғыһыҙ эш көнө тамамланып, йыһан күктә йондоҙ-шәмдәрен берәм-берәм балҡытып, төн етеүгә башлана. Күҙ алдына килтерегеҙ: йылға буйында бер-береһенән биш йөҙәр аҙым, берәр саҡрым алыҫлыҡта ҡыуыштар урынлашҡан. Ҡыуыштар янында усаҡтар ләүкелдәп яна. Йылға янына барып баҫһаң, сыртылдап усаҡ янғаны, шишмә сылтырап аҡҡаны, һандуғастарҙың үҙәк өҙөп һайрауы ғына ишетелә. Әммә тәбиғәттең илаһи был триоһы оҙаҡҡа һуҙылмай. Сөнки тап ошо мәлдә дүртенсе тауыш хасил була. Арҡа буйлап ниндәйҙер йылы ағым умыртҡа һөйәге аша тәндә зымбырҙатып ергә уйылып төшөп киткәндәй. Әйтерһең дә, һандуғас тап ошо мәлдә илаһи көйгә ҡушылыр өсөн тап төн мәлдә үҙенең йән тирбәлтер көйөн яңғырата кеүек.

...Дүртенсе тауыш тураһында. Тап шул йылды әрмемән Зәйнулла ағай Раев ҡайтып төштө. Төрөк фильмы йондоҙо Бурак Озчивиттан, артыҡ булмаһа, һис тә кәм түгел ине ул. Оҙон буйлы, ике ҡоласлай киң яурынлы, ҡарағусҡыл йөҙлө, ҡара мыйыҡлы, ҡарашынан илаһи нур бөрҡөлөп тора. Етмәһә, дингеҙ флотында хеҙмәт итеп ҡайтҡан, формаһы үҙенә гәжәйеп килешә, айырыуса, үҙе лә шул хәрби формаға бермә-бер килешеп тора. Ағай әрмемән ҡайтып төшөүе булды, колхоз һабантуйында көрәшеп, быға тиклем бер кемгә лә бил бирмәй килгән майҙан батырын һиппеп ебәреп (беҙҙә бил көрәшендә еңеүҙе һирпеү тиҙәр!), еңеүсе булды.

Мәхмүт йылғаһы буйында бесән сабыусы Зәйнулла ағай көндөҙ беҙҙең ҡыуыш янына үлән ҡурайҙар тотоп килеп, атайымдан ҡурай яһатып алғайны. Шишмә, усаҡ, һандуғас триоһына дүртенсе ауаз, квартетты тулыландырыусы, тәнебеҙҙе зымбырҙатыусы тап ана шул Зәйнулла ағайҙың ҡурай моңо икән дә. Халҡыбыҙҙың мәшһүр "Урал"ын башҡара ағай. Ҡурай моңо башта әкрен генә ағылып, диҡҡәтебеҙҙе арбай ҙа, аҙаҡ яйлап тауышы шәбәйә, көсәйә бара. Йылға буйлап усаҡтарҙан сыҡҡан төтөнгә яғылып, ҡурай моңо ла ағыла, тирә-яҡҡа тарала.

Тап шул мәлдә шул уҡ тональностағы икенсе бер ҡурай тауышы яңғырай башлай. Был Әхиәт ҡусты Ғәйетбаев Мәхмүт кисеүе янындағы үҙ ҡыуышында моңға тулышып, ҡушыла булыр. Ул да атайымдан ҡурай яһатып алғайны. Шуны ғына көткәндәй, йылға буйындағы Дегет тигән ҡабаҡ башынан өсөнсө ҡурай тауышы иғтибарыбыҙҙы йәлеп иттерә, ул Таһир Хәмитовтың аһәңе. Мәхмүт түбәненән тағы ла бер моң сығанағы ҡушыла - ул Ғәйзулла еҙнәһенең ҡыуышында йоҡларға ҡалған Рәйес Түләк булыр.

...Бындай мәлдә ҡыуышта ятып ҡына түҙерлекме ни! Түҙмәне атайым, йоҡларға ятҡан еренән һикереп тышҡа сығып, үҙе яһап биргән ҡурайҙарҙың тауышын әллә ҡайҙан танып, ҡыуыш бесәненә кипсәп ҡуйылған ҡурайын ҡулына алып, дөйөм моңға ҡушылды. Һәҙәмтәлә ҡурайсылар ансамбле шишмәләрҙең, усаҡтарҙың, һандуғастарҙың триоһына ҡушылып, "Урал"ды симфоник оркестр яңғырашында донъяға, йыһанға яңғыратты.

Белһәгеҙ ине йәнкәйҙәремдең ошо мәлдә ҡайҙарға осоп киткәнен. Ә бит тап ошондай илаһи күренештән сәбәпсеһе, шаһиты булыу күптәребеҙҙең ижад осҡондарын тоҡандырҙы, тоҡандырып ҡына ҡалманы, офоҡ артындағы ҙур донъяларға алып сығып, сәнғәт күгендә балҡытты. Ошо ғына кисте алған ваҡытта ла, Зәйнулла Раев Өфө сәнғәт училищеһында яңы ғына асылған ҡурай бүлегенең тәүге уҡыусыларының береһе булып китте, конкурс-фестивалдәрҙә еңеп сыҡты, һуңынан тыуған яғына ҡайтып, төрлө ауылдарҙа мәктәп уҡыусыларына ҡурай серҙәрен төшөндөрҙө. Әхиәт Ғәйетбаевты ҡурайҙа уйнарға мин өйрәткәйнем, ул да ҡурай бүлеген тамамлап, төрлө ҡурай, йыр конкурстарында еңеп сығып, Сибай музыка училищеһын, Өфөлә Әҙеһәм Исҡужин исемендәге Балалар сәнғәт мәктәбен тәҙәүҙә туранан-тура ҡатнашты, төрлә маҡтаулы исемдәргә, Салауат Юлаев орденына лайыҡ булды.

Үҙ нәүбәтендә Әхиәт Ғәйетбаевты ҡурай буйынса остазы һанаған Таһир Хәмитов шулай уҡ төрлө конкурс-фестивалдәрҙә еңеп сығып, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы исеменә лайыҡ булып, бөгөн Өфө сәнғәт училищеһында ҡурай уҡытыусыһы, Рәсәй халыҡтары музыка ҡоралдары бүлеге мөдире булып эшләй. Ҡурай моңонан әсирләнгән Рәйесебеҙ иһә башҡорт шиғриәте күгенә үҙенең исемен алтын хәрефтәр менән яҙып ҡалдырҙы. Беҙ егермнсе быуат башы башҡорт шиғриәте тигәндә иң тәүгеләрҙән булып Бабичты хәтергә алһаҡ, егерме беренсе быуатты нәҡ Рәйестең "Яныу", "Ҡашмау" поэмалары менән башлайбыҙ. Үкенескә күрә, Зәйнулла ағай менән Рәйес хәҙерге көнгә килеп етә алманылар, баҡый донъяға күстеләр. Уның ҡарауы, моңдары, аһәңдәре йәндәребеҙгә һеңеп ҡалды.

...Төнгә йылға буйындағы илаһи күренештән һуң йәнемә ут ҡапты. Ул саҡтарҙа мин төндәрен бөтөнләй йоҡламаным да тиерлек. Ижад итер өсөн усаҡ янында үҙемсә әтмәләп алған "эш өҫтәле" артына ултырып, күңелемдә яралған юлдарҙы ҡағыҙға төшөрәм:

*Усаҡ яна,*
*Төнгө уйҙар менән*
*Уралғанмын уның утына.*
*Ә күңелем тыуыр йырым өсөн*
*Һәр ялҡынын һаҡлап тотона.*
*Усаҡ яна,*
*Башта уйҙар тыуа.*
*Һүнгән йондоҙҙарҙы ҡабыҙам...*
*Тере ҡуҙҙар булып иреп төшкәс,*
*Шиғыр юлдарына тамыҙам.*
*Аҙаҡ килеп*
*Төтөнөнә баҫып*
*Күтәреләм айлы күктәргә.*
*Ә һүҙҙәрем шат йондоҙҙар булып*
*Төшә бара һаман дәфтәргә...*

...Әле мин Шүлкә буйындағы бер илаһи төндөң һәҙәмтәләрен генә иҫкә алдым. Ә бит сабынлыҡтар урынлашҡан башҡа йылға-шишмәләр буйында башҡа бихисап илаһи төндәр ҙә булды беҙҙең төбәктә. Беҙҙең ауылдарҙың Туйсиндар, Сирбаевтар, Аралбаевтар, Ҡотдосовтар, Ғәйетбаевтар, Ҡотоевтар, Һағынбаевтар, Байрамголовтар, Буранбаевтар, Хәмитовтар, Түләктәр феноменының асылы ла шул йылға буйҙарындағы илаһи төндәргә бәйле. Беҙҙең ауылдан ҡурай бүлегендә белем алған профессиональ ҡурайсыларҙың исемдәрен атау ҙа күпкә ишара: Зәйнулла Раев, Әхиәт һәм Илгиз Ғәйетбаевтар, Фәттәх Аралбаев, Рәмил Ҡотдосов, Ирғәле һәм Нурғәле Байрамғоловтар, Юнир һәм Иҙел Һағынбаевтар, Таһир һәм Юныс Хәмитовтар, Йәмил Үтәбаев, Юнир һәм Иҙел Һағынбаевтар, Айтуған Усманов...

Тап шул Шүлкә буйында бесән сапҡанда атайыбыҙ беҙҙе, алты улын, кис ҡыуыш янындағы усаҡ янына баҫтырып, ҡурай тартырға өйрәтер ине. Беребеҙ ҙә профессиональ ҡурайсы булып китмәһәк тә, ҡурайға, халҡыбыҙ моңона ғашиҡ булып үҫтек. Бигерәк тә Әхтәм ҡустыбыҙ мәрхүм ҡурайҙа бик оҫта уйнарға өйрәнде. Көйҙәрҙе атайыбыҙҙан да, грампластинкаларҙан да отто. Бигерәк тә "Буранбай"ҙы Ишмулла Дилмөхәмәтов һымаҡ башҡарып, халыҡ йырҙарын үҙе йырлап хайран итер ине. Ғүмере генә ҡыҫҡа булды. Минең иһә ҡурайҙа уйнауымдың фәтеүәһе шунда булды: Әхиәтте уйнарға өйрәттем, атаһы Ғиниәт ағай менән Өфөгә музыка училищеһына алып барып, Ғата Сәләймәновтың ҡулына тапшырып киттек.

Ҡурай өйрәнеүгә бәйле тағы ла бер көлкөлө хәтирәне яҙып үтмәйенсә булмаҫтыр. Ул саҡта беҙҙең яҡта "ҡурайҙа уйнарға теләһәң, уны яндырып, көлөн ашарға кәрәк" тигән лаҡап ныҡ таралғайны. Беҙ иһә был һүҙҙәрҙе туранан-тура мәғәнәһендә аңлап, мунсаға ике ҡурай тотоп барып, береһен яндырып, шуның көлөн ашап, икенсеһен өрөп ҡарап, ҡыран-гәләмәт килә торғайныҡ. "Көлөн ашап" тигән һүҙҙәрҙең "ныҡ тырышлыҡ һалырға кәрәк" тигән мәғәнәһен кем белһен инде. Мин был хаҡта үҙемдең "Ҡара мунса" тигән поэмамда яҙып үткәйнем:

*Мунса, мунса, һиндә күпме*
*Үлдек тә беҙ, терелдек тә.*
*Атай беҙҙе ана шулай*
*Сыныҡтырҙы тимерлектә.*
*Хәтирәләр - уйлай китһәң,*
*Иларлыҡ та, көлөрлөк тә.*

*Имеш, ике ҡурай алып,*
*Мунсаларға бараһың да,*
*Көлөн тәүҙә ашар өсөн,*
*Бер(е)һен утҡа ягаһың да -*
*Ғыжғылдатып уйнап ебәр,*
*Икенсеһен алаһың да.*

*Имеш, етмеш һөнәреңә*
*Тағы һөнәр, эш ҡушыла.*
*Сығыуыңа мунсаларҙан*
*Һин - ҡурайсы, һин - Ишмулла.*
*Һәр ҡурайсы был йоланы*
*Атҡарырға тейеш була.*

*Беҙ, малайҙар, мунсаларға*
*Бара инек ҡасып-боҫоп.*
*Ашай инек ҡурай көлөн,*
*Тәүҙә көлөп, аҙаҡ ҡоҫоп.*
*Моң сығырын көтә инек,*
*Ҡурай тишектәрен баҫып.*

*Тик ҡурайсы булалманыҡ,*
*Ултырһаҡ та таңға тиклем.*
*Атайымдың кинәйәһе*
*Барып еткәс аңға тиклем:*
*Көл-морондар таралыштыҡ,*
*Берәм-һәрәм, аңҡы-тиңкә.*

*Кәрәк булған ҙур тырышлыҡ -*
*"Көлөн аша" тигәндәре.*
*Атайымдың ана шулай*
*Оло һабаҡ биргәндәре.*
*Хәҙер көлкә ҡурай тотоп*
*Мунсаларға ингәндәрем...*

Бер мәл билдәле архитектор, һәүәҫкәр ҡурайсы Рудоль Әүсәхов башҡортлоҡто "Бер туҡтауһыҙ күңелендә ҡурай моңо яңғырап тороуы" тигән һүҙҙәр менән аңлатҡайны. Бик тәрән мәғәнәле һүҙҙәр: ҡурай моңо яңғыраясаҡ, ҡурай моңо яңғырағанда башҡорт йәшәйәсәк. Иншаллаһ!

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

✓ *Беҙ асыҡлаған архив документтары буйынса тап 10 октябрь бөйөк ҡурайсы Йомабай Иҫәнбаевтың тыуған көнө. Тап ошо көн Ҡурай көнө тип республикабыҙ Башлығы тарафынан иғлан ителеүе үҙе бер хикмәт.*



ИНТЕРНЕТТАН



# КӨСЛӨ ТАУЫШТАН...

## йөрәгеңде һаҡла

■ Ғалимдар Wi-Fi сәләмәтлектең ҡаҡшауына килтереүе ихтимал, тип белдерә. Дания ғалимдары балаларҙа һәм бүлмә гөлдәрендә һынауҙар үткәргән. Бер төркөм уҡыусылар Wi-Fi селтәренә тоташтырылған телефондарын яҫтыҡ аҫтына һалып йоҡлаған. Беренсе төндән һуң уҡ балалар баш ауыртыуына, иғтибарҙы туплауы ауыр булыуына зарланған. Тәжрибәнең икенсе өлөшөндә уның бүлмә гөлдәренә тәьҫире тикшерелгән. 6 гөлдө 12 көнгә Wi-Fi сығанаҡлы бүлмәгә бикләгәндәр, тағы 6 гөл ябай бүлмәгә урынлаштырылған. Экспериментҡа тәғәйенләнгән ваҡыт үтеүгә беренсе бүлмәләге гөлдәр һулыған, икенсе бүлмәләге гөлдәр сәскә атыуын дауам иткән. Wi-Fi-ҙың тәьҫир итеү механизмы әлегә өйрәнелмәгән, бының өсөн ҙур һынауҙар үткәреү кәрәк буласаҡ. Шулай ҙа ғалимдар хәҙерҙән үк йоҡларға ятҡанда уны һүндерергә һәм кеҫә телефондарын карауаттан 1,5 метр йыраҡлығында торорға кәңәш итә.

■ Туҡланыу продукттары хәүефһеҙлеге буйынса Европа идаралығы (EFSA) аспартам буйынса тикшеренеүҙәрҙе тамамлаған һәм уны хәүефһеҙ тип тапҡан. Шәкәрҙән 200 тапҡыр татлыраҡ булған аспартам диабет менән ауырыусылар һәм үҙ кәүҙәһе ауырлығын контролдә тоторға теләүселәр өсөн тәғәйенләнгән ризыҡтарҙы әҙерләүҙә ҡулланыла. Шәкәрҙе алыштырыусының канцероген сифаттары буйынса бәхәстәрҙә уның зыянлы булыуын билдәләй инеләр. Эксперттар әйтеүенсә, дозаһын күтәргән осраҡта аспартам, ысынлап та, зыянлы, әммә уға ағылған башҡа ғәйептәр дәлилләнмәгән. Төрлө илдәрҙә уның максималь дозаһы төрлөсә билдәләнә, шулай ҙа ул яҡынса тәүлегенә 100-130 таблетка. Аспартам диетик газлы эсемлектәрҙең, һағыҙҙарҙың составына ла инә.

■ Билдәле булыуынса, ир-егет һәм ҡатын-ҡыҙ араһында һөйөү бик тиҙ тоҡана, тимәк, ғашиҡ булыуҙың төп сәбәптәренең береһе булып тышҡы ҡиәфәт тора. Ғашиҡ булыу өсөн ҡатын-ҡыҙ ир-егетте ниндәй итеп күрергә тейеш һуң? Италия тикшеренеүсеһе Диего Местрипьери үткәргән һынауҙар барышында асыҡланыуынса, ҡатын-ҡыҙ ир-егеттең йөҙөнә ҡарап, уның ниндәй атай булыуын тойомлай ала икән, был һәләт уға тәбиғәттән һалынған. Бер төркөм ир-егеттәргә ололарҙың һәм балаларҙың фотоларын күрһәтеп, үҙҙәренә оҡшаған фотоларҙы билдәләргә ҡушҡандар. Ҡатын-ҡыҙҙар төркөмө иһә был экспериментта ҡатнашыусы ир-егеттәрҙең фотоларын ҡарап, уларҙың ҡайһылары менән ғаилә ҡора алырҙарын билдәләгән. Шуныһы ҡыҙыҡлы, ҡатын-ҡыҙҙар бәләкәй балаларҙың фотоларын оҡшатҡан ир-егеттәрҙе һайлаған.

■ Каролина Эриксон етәкселегендәге тикшеренеүселәр төркөмө билдәләүенсә, йөрәк һәм йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы эшмәкәрлеген боҙоу өсөн ҙур булмаған тауыш та етә. Эксперимент барышында 110 кеше йөрәк ритмын теркәп барыусы портатив мониторҙар йөрөткән. Медицина хеҙмәткәрҙәре улар булған урындарҙа тауыштың кимәлен тикшергән. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, тауыш 65 децибелға ғына күтәрелһә лә (ул ҡысҡырып һөйләшеүгә тиң), йөрәк ритмы шунда уҡ көсәйә икән. Шуға ла тауыш көслө булған урындарҙа йөрәк өйәнәге ихтималлығы ла ҙурая.

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# ҠУРАЙ КӨНӨ...

## Йомабай Иҫәнбевтың тыуған көнө лә икән

**Башҡорт халҡының мәшһүр ҡурайсыһы Йомабай Мөтиғулла улы Иҫәнбаевтың тамырҙары Түңгәүер ырыуы башҡорттарына барып тоташа. Башҡортостан Республикаһы Милли архивында һаҡланған документтарҙы өйрәнеү һөҙөмтәһендә бик тә ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәргә юлығырға насип булды.**



Йомабай Иҫәнбаевтың тыуған ауылы Үрге Смаҡтың (Исмәғил) XIX быуат уртаһында 1-се Түңгәүер улысының Ғүмәр (икенсе исеме Бүкәт) ауылы кешеләре тарафынан нигеҙләнгәне билдәле. Ғүмәр ауылы XX быуат уртаһында Юлдыбай ауылына (Йылайыр районы) ҡушылған. 1816 йылғы ревизияла Ғүмәр ауылында Йомабай Иҫәнбаевтың ата-бабалары *Иҫәнбай Һикһәнбай улы* (54 йәштә) һәм уның улдары *Мөхәмәтйән* (21 йәштә, Й.Иҫәнбаевтың ҡарт ҡартатаһы), *Мөхәмәтрәхим* (18 йәшлек), *Ғәлиәкбәр* (11 йәш), һәм шулай уҡ Иҫәнбайҙың ағаһы *Ғүмәр Һикһәнбаев* (73 йәштә) һәм уның уландары *Исмәғил* (37 йәштә), *Мөхәмәтйәр* (15 йәштә), Исмәғилдең улдары *Мөхәмәтсадиҡ* (10 йәшлек) һәм *Зәбир* (8 йәшлек) теркәлгән.

1859 йылғы ревизия мәлендә инде Йомабай Иҫәнбаевтың ата-бабалары Исмәғил ауылында көн иткән булған. *Мөхәмәтйән Иҫәнбай* улы 1857 йылда Исмәғил ауылында 62 йәшендә донъя ҡуйған. Уның өлкән улы *Ғилман*, йәғни Йомабай Иҫәнбаевтың ҡартатаһы, 23 йәштә булған. Ғилман Башҡорт ғәскәрендә урядник булып хеҙмәт иткән. Ғилмандың 1859 йылда ике улы теркәлгән: өлкәне *Ғиззәтулла* (1854 йылғы), кесеһе *Хәйбулла* (1856 йылғы).

Әйткәндәй, XIX быуат уртаһында барлыҡҡа килгән Исмәғил (Смаҡ) ауылының үҙ мәсете булмаған. Һуңыраҡ төҙөлгәндер, моғайын. 1901 йылда Ырымбур ҡалаһында баҫылған *"Списки населенных мест Оренбургской губернии"* тип аталған белешмә китапта Түңгәүер улысы ауылдары тураһында ла ҡыҫҡаса мәғлүмәт бирелгән (күпме йорт, күпме кеше, ҡайһы йылға буйында урынлашҡан, мәсет һ.б.). Китапта бирелгән мәғлүмәткә ҡарағанда, 1901 йылда Исмәғил ауылы 7 йорттан торған, унда барлығы 63 кеше йәшәгән. Ауылдың мәсете булмаған. Документтарҙан күренеүенсә, тәүҙә Исмәғил ауылы халҡы Янғаҙы ауылы мәсетенә беркетелгән булған, 1891 йылда Әбделнасыр ауылында мәсет һалына. "Ведомость о числе приходов и духовных лиц различных губерний" исемле документта былай тип яҙылған: *"Абдулнасырово. Соборная мечеть. Построена в 1891 году. Приходом причислены две деревни - обе Исмагилова".* Бында Үрге һәм Түбәнге Смаҡ ауылдары тураһында һүҙ бара.

Ырымбур губернаһы Орск өйәҙе 2-се Түңгәүер улысының Әбделнасир ауылының 2-се мәсет метрика китабында Й.Иҫәнбаевтың ҡартатаһы Ғилмандың үлеме тураһында мәғлүмәткә юлыҡтыҡ. Ул 1902 йылдың 5 декабрендә 67 йәшендә биҙгәк ауырыуынан үлгән. Атаһы - Мөхәмәтйән Иҫәнбаев Исмәғил ауылында вафат .

Артабанғы эҙләнеүҙәр һөҙөмтәһендә Йомабай Иҫәнбаевтың тыуыуы тураһында мәғлүмәтте таптыҡ. Ырымбур губернаһы Орск өйәҙе Түңгәүер улысының Янғаҙы ауылы мәсете метрика китабында **1890 йылдың 10 октябрендә Йомабай** исемле малай тыуғанлығы тураһында яҙылған. Тыуған урыны **Исмәғил ауылы,** атаһы - **Мөтиғулла Ғилман улы Иҫәнбаев,** әсәһе - **Бибихәбибә Ялалетдин ҡыҙы Солтантимерова,** тип теркәлгән.

Был архив документы Йомабай Иҫәнбаев биографияһы буйынса бөтөнләй көтөлмәгән яңы мәғлүмәт булып сыға бит. Рәсми мәғлүмәттәр буйынса ҡурайсының тыуған йылы һәм көнө **1891 йылдың 21 сентябрендә** тип яҙыла һәм нисәмә йылдар буйы юбилейына бағышланған саралар тап ошо дата менән бәйле үткәрелеп килде. Ә бына хәҙер, архив документы буйынса, йәғни мулла теркәгән тәүге мәғлүмәт буйынса, Йомабай ҡурайсының тыуған йылы **1890 йылдың 10 октябры** булып сыға. Метрика китаптарындағы мәғлүмәтте шик аҫтына ҡуйып булмай, сөнки, тыуым-үлем, никахты теркәп барыу муллаларҙың бурысы булған. Шуға күрә лә был бурысҡа муллалар бик етди ҡараған һәм һәр тыуған баланы теүәл теркәп барған. Тимәк, хата һуңынан китеүе ихтимал.

Иң ҡыҙығы шунда, былтыр Республика Башлығы Хәбиров указы буйынса республикабыҙҙа Ҡурай көнө булдырылды. Быға тиклем Ҡурай көнөнөң датаһына иғтибар иткәнем булманы. Яңыраҡ, Ҡурай көнөнөң 10 октябрҙә булыуын күреп, аптырап киттем. Был бит Аллаһу Тәғәләнең бер хикмәте! Сөнки беҙ асыҡлаған яңы архив документтары буйынса тап 10 октябрь башҡорт халҡының бөйөк ҡурайсыһы Йомабай Иҫәнбаевтың тыуған көнө. Тап ошо көн Ҡурай көнө тип республикабыҙ Башлығы тарафынан иғлан ителеүе үҙе бер хикмәт.

Шулай итеп, быйыл 10 октябрҙә - Ҡурай көнөндә башҡорт халҡының мәшһүр ҡурайсыһы Йомабай Иҫәнбаевтың тыуыуына 135 йыл, уның Парижға барып башҡорт ҡурайын бөтә донъяға танытып ҡайтыуына 100 йыл тулды. Яңы табылған тарихи факттар мәшһүр ҡурайсының исемен мәңгеләштереү йәһәтенән дә һәм, ғөмүмән, уның юбилей сараларын үткәреү йәһәтенән дә яңы ҡараш тыуҙырыуға булышлыҡ итер тип ышанам.

**Азат ЯРМУЛЛИН,**
**тарихсы,**
**Башҡортостан Республикаһы**
**Милли архивының бүлек**
**начальнигы.**

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

# ҠУРАЙ КҮРГӘҘМӘҺЕНДӘ...



**Башҡортостандың Милли музейы мөһим ваҡиға шаһиты булды: "Ҡурай - башҡорт халыҡ йәне" күргәҙмәһе яңы уникаль экспонаттар менән тулыланды. Бөтә донъяға билдәле "Ay Yola" төркөмөнөң виртуоз ҡурайсыһы, солист Ринат Рамаҙанов һәм ZAINETDIN этнопроекты етәксеһе Заһир Зәйнетдинов шәхси музыка ҡоралдарын музейға тапшырҙы.**

Башҡарыу оҫталығы һәм башҡорт мәҙәниәтен тәрән аңлауы менән билдәле Ринат Рамаҙанов музейға шәхси ҡурайын алып килде, уның һүҙҙәренсә, ҡурай - ул халыҡтың йәнен символлаштыра. "Республикабыҙҙың төп музейы стеналарында күп легендаларҙа һәм риүәйәттәрҙә данланған инструментҡа арналған күргәҙмә асылыуына бик шатмын. Был коллекцияны тулыландырып, боронғо музыка ҡоралын популярлаштырыуға булышлыҡ итә алыуым менән ғорурланам", - тип билдәләне ул музейға ҡурай тапшырып.

Традицион музыкаға новаторлыҡ ҡарашы менән билдәле Заһир Зәйнетдинов боронғо инструменттың бер нисә данаһын, шулай уҡ үҙ ҡулдары менән эшләгәнен дә, тәҡдим итте һәм: "Мульти-инструменталист булараҡ, мин ҡурай моңонда йәштәрҙең йөрәгендә яңғыраған ноталарҙы табам. Ҡурайҙың бәрхәт тауышы - ул мауыҡтырғыс һәм үҙ артынан эйәртеүгә һәләтле тере ағым", - тине.

Башҡортостандың Милли музейы директоры Рөстәм Исхаҡов, бүләктәрҙе ҡабул итеп, күргәҙмәгә һәм боронғо башҡорт музыка ҡоралына арналған "Башҡорт ҡурайы" журналында киң аудитория өсөн ҡурайҙың һаулыҡҡа һәм күңел һиллегенә йоғонтоһо менән бәйле идеялар тәҡдим итте. "Ҡурай - башҡорт халҡының йәне" күргәҙмәһе классик традиция менән уның заманса көйҙәләнеше араһындағы күпер генә түгел, ә ҡурайҙың кешеләрҙең йөрәгенә тәьҫир итеүен, быуындарҙы һәм мәҙәниәттәрҙе берләштерергә һәләтле тере һәм үҫешкән инструмент булып ҡалыуын дәлилләй", - тип белдерҙе Рөстәм Әхмәт улы.

✓ *Милләтебеҙгә ҡот өрөүсе, яҡшы менән яманды айырырға өйрәтеүсе һәм ҡурсалаусы изге зат. Урал батырҙы нәҡ башҡорттарға ебәрелгән бәйғәмбәр тип тә уйларға мөмкин.*



АФАРИН!

**Учалы ҡалаһында Урал батырға скульптура композицияһын ҡуйыу тураһында һүҙ күптән бара ине, сөнки бөйөк эпостағы хәл-ваҡиғалар әле Учалы, Бөрйән, Белорет райондары биләгән ерҙәрҙә барған бит. Шул иҫәптән, Ирәмәл тауынан төшөп, улдары атаһының булат ҡылысы менән сапҡандан һуң, Ағиҙел һәм Яйыҡ йылғалары аға башлай, ә Яйыҡ менән Уй йылғаларының Йәнбирҙе һәм Йәнбикә тигән ҡушылдыҡтары был биләмәлә һаман бар.**

# "КЕШЕГӘ БАЙМАН ТАБЫҒЫҘ!"



Шулай итеп, 19 сентябрҙә Учалы ҡалаһының Дан стелаһы менән "Евразия" сауҙа үҙәге араһындағы күркәм урында скульптура композицияһын асыу тантанаһы үтте. "Район өсөн генә түгел, бөтә Башҡортостан өсөн мөһим ваҡиға был! - тип билдәләне район хакимиәте башлығы Руслан Ғиләзетдинов.- Ул быуаттар буйына барыбыҙға ла көс һәм илһам сығанағына әйләнһен!" Билдәләнеүенсә, 2024 йылда Учалы ҡала ултырағы "Башҡортостан Республикаһының иң яҡшы муниципаль берәмеге" конкурсында еңгәс, хыял тормошҡа ашты. Ә был ҡаҙаныш, үҙ сиратында, Бөтә Рәсәй конкурсында "Иң яҡшы муниципаль практика" номинацияһында еңеү һөҙөмтәһе булды, 65 төбәк, 297 дәғүәсе араһында 4-се урынға сыҡҡайны бит Учалы.

Урал батыр һыны алюмин иретмәһенән Екатеринбургта ҡойола, 2 тонна ауырлыҡта, оҙонлоғо - 7, бейеклеге - 4 метр самаһы. Бындай конструкцияны килтереү һәм урынлаштырыу үҙе генә лә оло эш, ярай ҙа, Учалы тау-байыҡтырыу комбинаты ярҙам итә. Арыҫлан һыбайлаған кеше һынландырылған һәйкәл Рәсәйҙә берҙән-бер. Эйе, урмандарыбыҙҙа хәҙер арыҫландар юҡ, ләкин палеонтология белгестәре раҫлауынса, борон бөтә Евразияла, шул иҫәптән Урал тауҙарында ла мәмерйә арыҫландары көн күргән.

Оло байрамға әйләнде был сара - милли кейемдә парад, ҡурай моңдары, йыйылған халыҡтың бер-береһен ҡотлауҙары... Һәйкәл асыу таҫмаһын киҫеү хөрмәте БРҙың атҡаҙанған укытыусыһы, район башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитетыны әүҙем ағзаһы Зилә Шәрәфетдиноваға бирелде. Бар ғүмерен Урал батырҙың васыяттарын үтәүгә бағышлаһы тиергә була бит уны! Зилә Ғизетдин ҡыҙының эргәһендә "Урал батыр " эпосын яттан һөйләү буйынса былтырғы һәм быйылғы төбәк-ара конкурс еңеүселәре, йәш сәсәндәр Зөлхизә Аманова (Урал лицейы) менән Морат Аҙнабаевтар (Башҡорт гимназияһы) торҙо. Бик хуп, быуаттар үтә, быуындар алмашына, дәүләттәр сәскә ата һәм ҡорой, ә ата-бабаларыбыҙҙың рухи аманаты, йәштәр күңеленә һалынғас, мәңгүр ҡая кеүек мәңге тора бирә.

Эйе, Урал батырҙың кем икәнен бер кемгә лә аңлатып торорға кәрәкмәй! Милләтебеҙгә ҡот өрөүсе, яҡшы менән яманды айырырға өйрәтеүсе һәм ҡурсалаусы изге зат. Хатта, Йәнбирҙе менән Йәнбикә - улар ныҡ ологайған, туфан һыуҙары ҡалҡҡас, Урал тауҙарына һыйынған Әҙәм менән Һауа ул, ә Урал менән Шүлгән - уларҙың һуңғы балалары, тигән фараздар ҙа ишетелгәләп ҡала. Улайһа, Урал батырҙы нәҡ башҡорттарға ебәрелгән бәйғәмбәр тип тә уйларға мөмкин, Ҡөрьән-Кәримдә әйтелә бит - һәр халыҡҡа Аллаһы Тәғәлә төрлө ваҡыттарҙа илселәр ебәргән.

Нисек кенә булмаһын, һәйкәл асылыуҙы урындағы халыҡ бик шатланып ҡабул итте. Бындай мөмкинлек тапҡан власть органдарына, айырыуса һәйкәл авторына ихлас күңелдән рәхмәт һүҙҙәре күп әйтелде. Эйе, скульптураның авторы Фәнил Фәтхулла улы Мөслимов, һис шикһеҙ, оло рәхмәт һүҙҙәренә лә, маҡтау-баһалауҙарға ла лайыҡ! Беренсе эше түгел бит, Төрлө быуын яугирҙарына арналған һәйкәле үҙе генә лә ни тора! "Эпосты кәмендә ҡырҡ тапҡыр уҡып сыҡҡанымдыр, һөҙөмтәлә нәҡ ошондай образ күҙ алдыма килде", - ти талантлы яҡташыбыҙ һәм тағы бер хыялы тураһындағы серен сисә: Урал батыр һәйкәле янындараҡ Аҡбуҙатты ла һынландырып, яңғыҙ һәйкәлде тулы композицияға әйләндереү.

Эйе, оло тарихи ваҡиға булды бөгөн Учалыла, бар төбәгебеҙгә ҡот, ырыҫ һәм иман өҫтәп торһон был һәйкәл! "Өфөлә Салауат Юлаев һәйкәле ремонтланған арала Башҡортостанды рухи ҡурсалау ҡарауылына Урал батыр баҫты!" - тигән фекерҙәр ҙә янғыраны тантанаға йыйылған кешеләр араһында.

Ирекһеҙҙән шул да иҫкә төшә: МХО-ла һәләк булған яҡташыбыҙ, ордендар кавалеры, дингеҙ пехотаһы лейтенанты Илнар Байегетов нәҡ "Урал батыр"ҙы яратты, яттан белде, тип раҫлай яҡындары. Күрәһең,

*"Ир-арыҫлан булһаң да,*
*Батыр беләкле тыуһаң да,*
*Илдә йөрөп, ил күрмәй,*
*Тубығыңдан ҡан кисмәй,*
*Йөрәгең батыр булалмаҫ",*

- тигән юлдары ныҡ тәьҫир иткәндер эпостың. Төрлө быуын яугирҙарына арналған һәйкәл һәм Урал батыр композицияһының Дан стелаһының ике яғынан ике ҡанат булып урынлашыуы ла юҡҡа түгелдер...

Әйткәндәй, "Урал батыр" эпосындағы рухи аманатыбыҙҙың башҡа юлдарын да иҫкә алайыҡ әле:

*Яҡшылыҡ булһын атығыҙ,*
*Кеше булһын затығыҙ;*
*Яманға юл ҡуймағыҙ,*
*Яҡшынан баш тартмағыҙ!*
*Яуызға юлдаш булмағыҙ,*
*Кәңәшһеҙ эш ҡылмағыҙ,*
*Уландарым, һеҙгә әйтәм:*
*Мин әрсегән ерҙәрҙә*
*Кешегә байман табығыҙ;*
*Яуҙа булһа, баш булып,*
*Кешегә ил ҡороғоҙ,*
*Данлы батыр булығыҙ.*
*Олоно оло итегеҙ, -*
*Кәңәш алып йөрөгөҙ;*
*Кесене кесе итегеҙ, -*
*Кәңәш биреп йөрөгөҙ.*
*Күҙенә суп төшөрҙәй,*
*Күҙһеҙ булып ҡалырҙай*
*Еҫерҙәрҙән алдында*
*Күҙенә керпек булығыҙ.*

**Илфат ЯНБАЕВ.**
**Учалы районы.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Аҡһырт тумыртҡа
**(Белоспинный дятел)**



Сыбар тумыртҡанан саҡ ҡына ҙурыраҡ, төҫө йәһәтенән дә уға оҡшаған. Айырмаһы - арҡаһының аҫҡы өлөшө, ҡойроғоноң өҫкө яғы - аҡ, ә ҡабырғаһында ҡара төҫлө буй һыҙаттар булыуы. Ата ҡоштоң башы тулыһынса ҡыҙыл, инә ҡоштоҡо - ҡара. Тауышы - талғын ҡына, "геть-геть-геть" тип ишетелә.

Урман зонаһында ҡатнаш һәм япраҡлы урмандарҙа оя ҡора. Сыбар тумыртҡаға ҡарағанда һирәгерәк осрай, йылға буйҙарындағы урмандарҙы, ҡайындан әҙерләнгән утын өйөмдәрен ярата. Таулы яҡтарҙа ҡайын урмандарына өҫтөнлөк бирә. Авторҙар Учалы районында Өргөн күле буйында, Иглин районы Иҫке Ҡобау ауылы эргәһендә, Белорет районы Сәрмән ауылы эргәһендә тап итә, һуңғыһының ҡараҫҡыһы Өфө фән һәм технологиялар университетының зоология музейында һаҡлана.

Башҡа тумыртҡаларға ҡарағанда иртәрәк - апрель-майҙа оя ҡора. Ҡороған усаҡ, ҡайын h.б ағасында оя яһай, ояһы иркен, сыбар тумыртҡаныҡына ҡарағанда бейегерәк һәм ҙурыраҡ. Йыл һайын яңы оя яһай, иҫкеһен киләһе йылына ҡулланмай. 3-7, йышыраҡ 4-6 йомортҡа һала. Икәүләп 14-16 көн баҫалар. Бәпкәләр 27-28 көн ояла ултыра, башҡа тумыртҡа балаларына ҡарағанда, бик тауышланып бармайҙар, бары ашатҡанда ғына ҡысҡыралар.

Йыл әйләнәһенә серегән ағас ҡайырыһы аҫтында йәшәгән төрлө бөжәктәр менән туҡлана. Ғүмеренең ҙур өлөшөн ҡайын урманында ҡороған ағастарҙың ҡайырыһын соҡоп айырыу менән шөғөлләнә. Тубырсыҡтарҙы ярып ашамай.

Бер өйрәнгән урынын ташлап китә һалмай. Шулай ҙа йәй уртаһында йәш ҡоштар башҡа урындарға күсеп китеүе билдәле. Бер һайлаған парҙарына тоғролар, йыл әйләнәһенә бергә йәшәйҙәр.

## Ваҡ тумыртҡа
**(Малый дятел)**



Турғайҙан саҡ ҙурыраҡ. Арҡаһы, ҡанаттары ҡара, аҡ һыҙаттары бар, ата ҡоштоң башы ҡыҙыл, инәһенеке - аҡ йәки ҡыҙғылт аҡ. Түше аҡ. "Ки-ки-ки" тип тиҙ-тиҙ һәм ныҡ тауышланып һайрай.

Португалиянан Камчатҡаға тиклем таралған. Ҡатнаш һәм япраҡлы ағастарҙан торған урманды үҙ итә. Ҡороған ағасҡа оя ҡора, ояны йыл да яңырта. Апрель-майҙа уның ояһы әҙер була. Йомортҡаларының һаны, уны баҫыу ваҡыты башҡа тумыртҡаларҙыҡына тап килә. Бәпкәләре ныҡ тауышлана, тауыштары бөтөнләй тынмай тиһәң дә дөрөҫ. Ояһына кеше яҡын килгән саҡта оло ҡоштар шулай уҡ тауышланып уны ҡурҡытырға тырыша.

Йыл әйләнәһенә ҡороған ағас ҡайырыһы аҫтынан бөжәктәр, үрмәкселәр соҡоп ашай. Ваҡ тумыртҡа ағастың нәҙек кенә ботаҡтарын һәм ҡыуаҡлыҡтарҙы ла игтибарҙан ситтә ҡалдырмай. Шулай уҡ үлән ҡуйы үҫкән урындарҙа көпшәле үҫемлектәрҙе лә тишә. Ҡышты ҡыҙылтүштәр менән бергә үткәрә.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

✔ *Гаджеттарҙың янып китеүенең ике төп сәбәбе бар. Улар - батареяның дефекты йәки зарарланыуы арҡаһында схеманың ҡыҫҡа тоташыуы һәм батареяның артыҡ ҡыҙыуы.*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# БАШҠОРТОСТАН ЙӘМЕН, ҠОТОН ҺАҠЛАУ МИНЕҢ, ҺИНЕҢ ИЗГЕ БУРЫСЫМ!




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**39-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Камалов. Аҡманов. Ямғыршин. Тарҡау. Саған. Арал. Егет. Амур. Ира. Ырҙын. Ҡала. Таяу. Ватт. Лесото. Вахта. Рикша. Әсе. Урҙа. Титов. Елкә. Үксә.

**Вертикаль буйынса:** Сәлихов. Ярғанат. Нурыева. Алты. Әминев. Реал. Муму. Трест. Ант. Инәү. Налим. Көрт. Олон. Офис. Тимербулатов. Ҡасау. Ҡорт. Уйылданова.

ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!

# ГАДЖЕТТАР ҘА ЯНА



**Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитетында гаджеттарҙың янып китеү осраҡтарына аңлатма бирҙеләр.**

Белгестәр әйтеүенсә, бының ике төп сәбәбе бар. Улар - батареяның дефекты йәки зарарланыуы арҡаһында схеманың ҡыҫҡа тоташыуы һәм батареяның артыҡ ҡыҙыуы. Артыҡ зарядлау ҙа файҙаға түгел. "Янғындан һаҡланыу өсөн оригиналь аксессуарҙар ғына ҡулланығыҙ. Шулай уҡ гаджетты ҡояшта һәм йылылыҡ сығанаҡтары эргәһендә ҡалдырырға ярамай. Яҫтыҡ аҫтында йәки карауатта зарядламағыҙ. Артыҡ ҡыҙһа, шунда уҡ розетканан алығыҙ. Әгәр телефон янһа, төтөнөн һуламағыҙ. Янып китһә, утты янғын һүндергес менән һүндерегеҙ, йәки ҡалын туҡыма, металл һауыт-һаба менән ҡаплағыҙ", - тип кәңәш бирә ҡотҡарыусылар.

• Өфөлә йорт ихатаһында Renault Kangoo автомашинаһы янған. Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, ваҡиға Интернациональ урамындағы йорт ихатаһында булған. Ут менән көрәшселәрҙең оператив эше арҡаһында янғын тиҙ арала һүндерелә. Бер кем дә зыян күрмәгән. Янғын сәбәптәрен Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы тәфтишсеһе асыҡлай.

• Ҡыйғы районының Туғыҙлы ауылында ҡышҡылыҡҡа әҙерләнгән бесән янып киткән. Утты тиҙ арала Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы ҡотҡарыусылары һәм ауыл халҡы һүндерә. Зыян күреүселәр юҡ. Тәфтишсе янғындың һәм килеп тыуған ваҡиғаның сәбәптәрен асыҡлай.

• БР Урман хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, Йылайыр районында кешенең ут менән һаҡһыҙ эш итеүе арҡаһында янғын сыҡҡан. Ауылдарға һәм иҡтисад объекттарына ут күсеүгә юл ҡуйылмаған. 14,4 гектар майҙанды биләп алған янғынды һүндереүҙә 6 берәмек техника һәм 12 урман хужалығы белгесе ҡатнашҡан.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**10 октябрь "Яратам, тип әйтеп өлгөрмәнем"** (Г. Ғиззәтуллина, А.Абушахманов), кинодрама. 12+

**11 октябрь "Эҙләнем, бәғерем, һине"** (Т.Миңнуллин, А.Нәҙерғолов), мелодрама. 12+

**16 октябрь "Ай тотолған төндә"** (М.Кәрим, А.Абушахманов), драма. 12+

## М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**10 октябрь "У ковчега в восемь"** (У. Хуб, М. Күлбаев), ғаилә спектакле. 11:00. 6+

**10 октябрь "Седина в бороду или невеста из Имеретии..."** (Б. Рацер, В. Константинов, М. Күлбаев), музыкаль комедия. 19:00. 12+

**11 октябрь "Я считаю до пяти"** (М. Бартенев, М. Күлбаев), әкиәт. 12:00. 0+

**11 октябрь "Аҡмулла"** (З. Бураҡаева, Р. Хәкимов), притча. 18:00. 6+

**12 октябрь "Аҡбуҙат"** (З. Бураҡаева инц., И. Ҡаҙаҡбаев), фэнтези. 12+

**14 октябрь "Где лужа, там и я"** (С. Я. Маршак исемендәге Воронеж дәүләт йәш тамашасы театры). 11:00. 12+

**14 октябрь "Олеся"** ("Глобус" Новосибирск академия йәштәр театры). 19:00. 16+

**15 октябрь "Мцыри"** (М. Сеспель исемендәге Сыуаш йәш тамашасы театры). 19:00. 16+

**16 октябрь "Солнце над моим Донбассом"** (Мари йәш тамашасы театры). 19:00. 16+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**10 октябрь "Озеро заколдованного коня"** (Г. Шафиков). 12:00. 12+

**11 октябрь "Буратино"** (А.Толстой). 12:00 һәм 15:00. 0+

**11 октября "Етем төлкө"**. Башҡорт халыҡ әкиәте. 14:00. 0+

**12 октябрь "Аленький цветочек"** (С.Аксаков). 12:00 һәм 15:00. 6+

**12 октябрь "О чем поет осень?"** ( В. Щербакова). 0+

**16 октябрь "Любовное приключение"** (В. Аношкин). 19:00. 18+

## Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**10 октябрь "Ҡурай көнө"**нә арналған Башҡортостан дәүләт ҡурайсылар ансамбле концерты. 12+

**14 октябрь Салауат Итбаевтың** тыуыуына 80 йыл тулыуға арналған хәтер кисәһе. 12+

**16 октябрь "Край любви моей"** Марий Эл дәүләт бейеү ансамбле концерты. 6+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**10 октябрь "Хазина"** (С. Әбүзәр), комедия. 12+

**11 октябрь "Кошкин дом"** (С. Маршак), янғын хәүефһеҙлеге тураһында әкиәт. 6+

**14 октябрь "Зәйтүнә"** (С.Сурина), драма. 12+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**10 октябрь "Батыр ҡурайы тынмаһын!"** музыкаль-әҙәби лекторийы. 0+

**12 октябрь "Покатился мой клубочек"** музыкаль-әҙәби лекторийы. 0+

**16 октябрь "Батырҙар беҙҙең арала".** "Ашҡаҙар" эстрада-фольклор төркөмө концерты. 6+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**10 октябрь "Әстәғәфриулла!"** (Н.Ғәйетбай), комедия. 16+

## БР Милли музейы

**10 октябрь "Сағыу төҫтөр мелодияһы".** Дарья Тимофееваның шәхси картиналар күргәҙмәһен асыу. 12:00. 0+

**11 октябрь "Алға, Башҡортостан!"** Республика көнө айҡанлы диктант. 11:00-17:00. 12+

МӘҘӘНИ МАЙҘАН

# БЕҘҘЕҢ ФИЛАРМОНИЯ!




**Башҡорт дәүләт филармонияһы "Пушкин картаһы" премияһын алды. Бүләкләү тантанаһы Мәскәүҙә Ҙур театрҙың Бетховен залында булып үтте.**

"Иң яҡшы төбәк концерт майҙансығы" номинацияһында еңеүселәр иҫәбендә Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы ла бар. Лауреаттарҙы РФ Хөкүмәте рәйесе урынбаҫары Татьяна Голикова ҡотланы."Был проект үҫешенә бөтөн көсөн һәм күңелен һалған барлыҡ ҡатнашыусыларға ла рәхмәт. Һөҙөмтәләр һоҡландырғыс: программаны бойомға ашырыуҙа ил буйынса 12 млн йәш кеше һәм менәрләгән мәҙәниәт учреждениеһы ҡатнашты. 860-тан ашыу сара үткәрелде һәм һатылған билеттар һаны 95 миллиондан артып китте. Бигерәк тә шуныһы шатландыра: проектҡа бәләкәй ҡалаларҙағы 14-16 йәшлек үсмер балаларҙы йәлеп итеүсе мәҙәниәт йорттары әүҙем ҡатнаша",- тине вице-премьер.

Юғары награда314ы Башҡорт дәүләт филармонияһы директоры Алмаз Сәйетов алды. "Беҙҙең филармония "Пушкин картаһы" программаһы ғәмәлгә индерелгәндән алып әүҙем ҡатнашып килә. Филармония икенсе йыл рәттән "Иң яҡшы төбәк концерт майҙансығы" номинацияһында еңеүсе булды. Бөтөн коллективты ихлас ҡотлайбыҙ һәм беҙҙең йәштәрҙе тәрбиәләүҙә артабан да уңыштар теләйбеҙ",- тине БР мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова. Әйткәндәй, бынан алдараҡ Башҡортостан "Пушкин картаһы " программаһын бойомға ашырыуҙа топ-3 төбәк иҫәбенә ингәйне.

# ҺАЙ АФАРИН "ЮЛДАШ"ТАРҒА!

**Был кистә "Юлдаш" радиоһы баш ҡаланың иң ҙур майҙансығы "Өфө-Арена"ла эстрада концерты ойоштороп, 6 меңдән ашыу тамашасы йыйҙы. Гала-концерт дүрт сәғәттән ашыу барҙы. Башҡортостандың төрлө төбәктәренән бик күп тыңлаусылар яраткан алып барыусыларын күрергә һәм Башҡортостан, Татарстан, Мәскәү, Ҡаҙағстан, Ҡытай артистары башҡарыуында йырҙар тыңларға килде. Байрамға йөҙҙән ашыу МХО яугиры ла саҡырылғайны.**

Республика етәксеһе Радий Хәбировтың сәләмләүенән һуң сәхнәлә бер-бер артлы радионың дуҫтары - Башҡортостаныбыҙҙың танылған эстрада йондоҙҙары сығыш яһаны. Шулай уҡ төрлө балалар конкурстарында төп еңеүҙәр яулаған Рамазан Биккининдың балҡышы ла өлкән сәхнә әһелдәренекенән кәм булманы: ул Рим Хәсәновтың "Кышкы романсы"н башҡарып, тамашасы күңеленде яңы йондоҙ булып урын алды. "Бишбармаҡ" оркестры дәртле итеп сығыш яһағанда сәхнәгә AY YOLA төркөмө солисы Ринат Рамазанов сыҡты. Адель һәм Руслан Шәйхетдиновтарҙың видеоҡотлауынан һуң ул "Беҙ бергә" йырын башҡарҙы.

Ә Ҡаҙағстан йырсылары Акимхан Маженов, Акбота Коснадин һәм Ҡытайҙан килгән Ли Шию сығыштары сараға халыҡ-ара статус өҫтәне.

"Беҙ был кисте "халыҡсан" радионың дуҫтары күңеленде йондоҙло ҡунаҡтар менән генә түгел, 25 йыл дауамында оҙата килгән моңло йырҙар, иҫтәлекле бүләктәр, йылы мөхит, илһамландырыр осрашыуҙар менән хәтерҙәрендә ҡалдырырға тырыштыҡ. Беҙҙең көндәлек хеҙмәтебеҙ, тәүлек әйләнәһенә эшләгән эфир, тапшырыуҙар һәм йырҙар, һөйөүебеҙ - барыһы ла тыңлаусыларыбыҙ өсөн, - ти ойоштороусылар. - Йылы ҡотлауы, изге теләктәре өсөн республикабыҙ Башлығы Радий Хәбировҡа, илдең һәм донъяның төрлө тарафтарынан ихлас сәләмдәр юллаусы коллегалар, милләттәштәргә рәхмәтлебеҙ. 25 йыл йомғаҡланды, хәҙер яңы көс һәм илһам менән алға, яңы дәүергә, яңы һынауҙар, мөмкинлектәр, асыштарға табан тыңлаусыларыбыҙ менән ҡулға-ҡул тотоноп юл алабыҙ. Беҙ бергә!"

# ИШЕКТӘР ЙӘНӘ АСЫЛДЫ

**Салауат башҡорт дәүләт драма театры коллективы үҙенең 93-сө ижад миҙгелен асты. Аристарыбыҙ көс туплап, үҙенең тамашасыларын яңынан-яңы премьералары менән шатландырырға әҙер.**



Спектаклдәргә һыуһаған тамашасыларҙы театр алсаҡ ҡаршы алды. Миҙгел премьераһы майҙа күрһәтелгән "Зәйтүнә" спектакле менән асылды.

Артист булырға хыялланған Миәкә ҡыҙы Зәйтүнә Әлбаева Өфө сәнғәт училищеһына уҡырға инә. Әммә Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, Стәрлетамаҡ ҡалаһындағы медицина курсына бара. Уны ла тамамларға насип булмай ҡыҙға: 1942 йылдың майында уҙ теләге менән фронтҡа юллана. Ҡыҙ поста булғанда немец разведкаһы һалдаттары һөжүм итә. Уға бер яңғыҙына дошмандарға ҡаршы торорға тура килә һәм 20 йәшлек Зәйтүнә ҡалмыҡ ерендәге Садовое ауылы янында вафат була. "Бәхил булығыҙ, ҡыҙҙар, Ватан өсөн үләм" - был уның һуңғы һүҙәре була...

- Зал тултырып килгән, көслө алҡыштарын йәлләмәгән тамашасыларыбыҙға сикһеҙ рәхмәттәребеҙҙе белдерәбеҙ. Яңы ижади миҙгелдә лә беҙҙең менән ҡалығыҙ. Ә беҙ һеҙҙе яңынан-яңы премьераларыбыҙ менән шатландырырға вәғәҙәләйбеҙ, - тине театр директоры Айбулат Ҡотошов. Ул шулай уҡ ҡыуаныслы хәбәр ҙә еткерҙе: театрҙа 2026 - 2027 йылдарҙа капиталь ремонт башланасаҡ. "Яҡын киләсәктә яңы миҙгелдәрҙе яңыртылған, төҙөкләндерелгән матур, уңайлы бинала ҡаршы алырбыҙ, тип ышанабыҙ", - тине Айбулат Миңлеғәле улы.

Театрҙың баш режиссеры Лиана Ниғмәтуллина ижади төркөмдөң киләсәккә пландары менән уртаҡлашты: "Яңы йылға тиклем ике премьера планлаштырылған: Татарстан режиссеры Ренат Әйүпов ҡуйылышында "Йәнекәйем, мин өйләнәм" комедияһы һәм балалар өсөн "Кар батшабикәһе" спектакле. Тағы ла күп кенә ҡыҙыҡлы тамашалар, шулай уҡ юбилей бенефистары көтөлә", - тине ул.

Сәхнәгә ҡала башҡорттары ҡоролтайы рәйесе Азат Юлтимеров күтәрелде.

Ул театрҙың баш режиссеры Лиана Ниғмәтуллинаны һәм Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Рәмзиә Ғәйнуллинаны Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының иң юғары наградаһы - "Ал да нур сәс халҡыңа" миҙалы менән бүләкләне.

"Театрға, һис шикһеҙ, йөрөргә кәрәк, сөнки театр - илһам шишмәһе, рух сығанағы. Был спектаклдәге Бөйөк Ватан һуғышы йылдарындағы хәл-ваҡиғалар әлеге Махсус хәрби операция менән ауаздаш. Ысынлап та, фронтҡа Тыуған иленә сикһеҙ һөйөүе булғандар юллана. Күп театрҙарҙа булғаным бар, әммә беҙҙекеләр - иң яҡшыһы", - тип, үҙенең тәьҫораттары менән уртаҡлашты аҙаҡтан Лилиә Баязитова тигән тамашасы.

**Әйткәндәй, Сәрүәр Суринаның "Зәйтүнә" спектаклен 22 октябрҙә Өфө тамашасылары М. Ғафури исемендәге БАДТ сәхнәһендә ҡарай ала.**

**Динә ҒӘЛИЕВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ФОРМАҢ МЕНӘН МАҠТАНМА,

## нормаң менән маҡтан

Үгеҙгә үҫкән мөгөҙ ишәккә сыҡһа, йыҡмаған затты ҡалдырмаҫ ине.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Бәхетһеҙҙәр һәм насар йоҡлаусылар, ғәҙәттә, был сифаттары менән ғорурланырға ярата.

**(Бертран Рассел).**

Әгәр ҙә кешеләр ғашиҡ булыу арҡаһында ғына ғаилә ҡорһа, күбеһе ғүмер буйы тормош иптәшеһеҙ йәшәп донъя ҡуйыр ине.

**(Роберт Стивенсон).**

Һуңғы һалдат ерләнгәс кенә һуғыш тамамланасаҡ.

**(Александр Суворов).**

Изге йөрәклегә рәхмәт әйтеүе ҡыйын түгел.

**(Д. Бомарше).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Табипҡа йөрәк неврозы менән ауырыған бер кеше килә һәм:**

**- Минә бер ниндәй дарыуҙар ҙа ярҙам итмәй, миңә хәҙер ни эшләргә, һеҙ ниндәй кәңәш бирерһегеҙ? - тип һорай. Табип ауырыуға бик игтибарлап ҡарап торған да, ярҙамсыһына ҡайсы килтерергә ҡушҡан. Ҡайсы килтергәнсе, ауырыу тулҡынланыуынан ни эшләргә лә белмәгән һәм табиптан:**

**- Һеҙ ҡайсы менән минең йөрәгемде киҫергә уйлайһығыҙмы? - тип һораған. Табип йылмайған һәм:**

**- Мин хирург түгел. Унан һуң, ҡайсы менән операция яһағандарын ҡайҙа күргәнең бар? - тигән. Табипҡа ҡайсы тотторғас, ул ауырыуҙың жилетындағы бер төймәне киҫеп алған һәм:**

**- Был урынға башҡаса төймә таҡмағыҙ һәм ул урынға ҡулығыҙ менән ҡағылмағыҙ, - тигән. Шунан ул ауырыуға ике аҙнанан тағы килергә ҡушҡан, ошо арала хәлегеҙ яҡшырыр, тип тә ышандырған.**

**Ауырыу табип ҡушҡандың барыһын да үтәгән. Ике аҙнанан һуң ул шат йөҙ һәм яҡшы кәйеф менән табип эргәһенә килгән һәм:**

**- Үҙемдең табибым мине тикшерҙе, ҡараны ла, аптыраны: мин һап-һау хәҙер. Һеҙ мине ни эшләттегеҙ, әфәндем, төймә менән бергә минең йәнемдәге яуыҙ шайтанды ҡыуҙығыҙмы? - тигән.**

**- Һеҙҙең ҡулығыҙ һәр ваҡыт жилетығыҙҙағы йөрәк тапҡырындағы төймә менән уйнаған. Ул төймә һеҙҙең йөрәктә кимереүсе яуыҙ булған да инде. Ул төймәне киҫеп ырғытып, һеҙҙең йөрәкте һеҙҙең нервылы ҡулдарығыҙҙан ҡотҡарҙым - бары шул ғына..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.

Баш мөхәррир: Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.
Мөхәрририәт: Рәсүл БАЙГИЛДИН, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: 450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: kiskeufa@mail.ru
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99
Матбуғат таратыу 252-39-99
График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты - 9.10.2025 й. 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 9.10.2025 й. 14 сәғәт 30 мин.
Баҫылып сыҡты - 10.10.2025 й.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44 телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
«Киске Өфө»нөң индексы – ПР905
Тиражы - 2707
Заказ - 1893